*✓ **Бала саҡта аҡса тоторға өйрәнмәгән кеше олоғайғас та аҡса тота белмәй. Ғүмер түгел, көн дә үткәрә алмай. Бар байлығын исраф итеп, бәхетһеҙ булып ҡалыуы ла ихтимал. Шуның өсөн атайығыҙ биргән аҡсаны бала саҡтан тота белергә өйрәнегеҙ. Һаҡ булығыҙ. "Был аҙ ғына аҡса нимәгә?" тип уйламағыҙ, сөнки һеҙгә әле шул аҙ ғына аҡса ла етә.***

РИЗАИТДИН нәсихәттәренән.

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

7-13 АПРЕЛЬ (АЛАҒАРАЙ) 2007 ЙЫЛ

№14 (224)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Пенсиям етә,**

**хатта артып та ҡала...**



2

**Торналар бейегәнен күрҙем...**



7

**Шағирҙар бит ауылдарҙа тыуа,**

**ҡалаларға килеп үләләр**



8-9

**Иман нуры балҡып китте**

**Әбйәлил һылыуҙары иман өлгөһө күрһәтә**



16

**ТВ ПРОГРАММАҺЫ**

14-15

*Был һағышлы башҡорт йыры гәзиз балаларының һәммәһен дә хәтерләгән Әсә кеүек, барыһын да хәтерләй: 1662 йылда баш күтәреүсе Сәйетте, 1707 йылда баш күтәреүсе Алдар бей менән Күсемде, 1736 йылда баш күтәреүсе Бәпәнәне, Айҙарҙы, Төлкөсураны һәм шундай ҡаһарман йөрәкле бик күп башҡа батырҙарҙы. Уларҙың барыһының да башы салғы ҡыйған йәшел дала үләне кеүек, гәзиз Башҡортостаны өсөн ҡыйылды...*

**Д.Н. МАМИН-СИБИРЯК (1852-1972).**

*ҺАЙ, АФАРИН!*

# ОЛИМПИАДА ЕҢЕҮЕ –

## университетҡа имтиханһыҙ инеү, тигән һүҙ




**Юғары уҡыу йортона инеү йылдан-йыл ҡатмарлаша бара. Тик юғары уҡыу йортона ингәндә республика олимпиадалары һөҙөмтәләренең иҫәпкә алыныуы күңелде йылытып тора. Яңыраҡ Өфөлә үткән башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса төбәк-ара олимпиада филология, журналистика юлын һайларға теләгән ҡыҙҙар һәм егеттәргә киләсәккә юл асты.**

Быйылғы олимпиада Башҡортостан район-ҡалаларынан һәм күрше төбәктәрҙән бөтәһе 388 уҡыусыны йыйған. Олимпиадала тексты анализлау, башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән викторина, сәсәнлектә ярышыу кеүек һынауҙар ҡуйылғайны. Жюри фекеренсә, башҡорт мәктәптәре һәм гимназия, лицейҙар уҡыусыларының белем кимәле уларҙың ысын мәғәнәһендә көслө әҙерлек менән килеүен күрһәткән. Ә бына урыҫ мәктәптәре уҡыусылары араһында башҡорт телен насар белгән, хатта һорауҙарҙы руссаға тәржемә итеүҙе һорағандар ҙа булған. Әгәр бала ошо предмет буйынса тейешле белем тупламаған икән, уны төбәк-ара кимәлдәге олимпиадаға исем өсөн генә сығарып, йөҙ ҡыҙартыуҙан ни фәтеүә?

Уның ҡарауы, башҡорт мәктәптәре һәм гимназия, лицейҙарҙан килгән уҡыусыларҙың уңышын күреү ҡыуандырҙы. Мәҫәлән, туғыҙынсы синыфтар араһында Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Республика башҡорт гимназия-интернатынан Тәлғәт Манатов, Стәрлетамаҡ районы Күсәрбай мәктәбенән Динара Ибәтуллина, Хәйбулла районы 1-се Аҡъяр мәктәбе уҡыусыһы Гөлназ Бохарбаева олимпиадала I урын яуланы.

(Дауамы 4-се биттә).

✓ *Ләкин икенсе күренеш әле генә булған борсолоуҙы ҡул менән һыпырып алғандай юҡҡа сығарҙы. Ҡаршыбыҙҙа аҡ яулыҡ ябынған инәйҙәр, йәш ҡыҙҙар, малайҙар осраны.*



*ИШАРА*

# ПЕНСИЯМ ЕТӘ,

## хатта артып та ҡала...

**"Скорняк" тип аталған әрмән халыҡ әкиәтен ишеткәнегеҙ бармы? Был әкиәтте Сергей Михалков руссаға ауҙарған. Тыңлағыҙ, һөйләйем.**

Бер крәҫтиән бер һарыҡ тиреһен тотоп, скорнякка (күндән кейем тегеүсе) бүрек тектерергә йүнәлгән, ти. Унан: "Ошо тире бер бүреккә етерлекме?" - тип һораған. Ә скорняк, ихлас йылмайып: "Етә, ниңә етмәһен, хатта артып та ҡалыр әле", - тигән. Крәҫтиән "хатта артып та ҡалыр" тигән һүҙҙәргә ҡыуанып киткән һәм ҡыйыуһыҙ ғына: "Ә ике бүрек тегергә етәме?" - тип һораған. Скорняк: "Етә, әлбиттә, артып та ҡалыр әле", - тип яуаплаған. Бер бүрек урынына ике бүрекле булаһағына шатланып, крәҫтиән тағы һорау биргән: "Ә өс бүрек сығамы был тиренән?" Шулай һөйләшә торғас, бер тирене ун бүреккә еткерергә һөйләшеп, килешеп, эше өсөн хаҡын алдан түләп, бик тә ҡәнәғәт булып ҡайтып китә был крәҫтиән. Ваҡыты еткәс, бүректәрен алырға килә был. Тегенсе тегегә ун бармаҡ башына кейҙерерлек ун бүрек сығарып һала...

Был әкиәтте төрлөсәгә бөгөргә була. Крәҫтиәндең нәфсеһе уйнап киткән, тиһәң, дөрөҫ үк булмаҫ. Мохтажлығы шулай булғандыр, күрәһең. Бөгөн дә ауыл кешеһе унан-бынан тартып, ялғап көн итә, балаларын аяҡҡа баҫтыра бит. Әммә мохтажлыҡ тураһында һөйләргә яратмай беҙҙең халыҡ. Ауыҙынан өҙөп, башкалар менән уртаҡлашырға әҙер тора. Йортона ҡунаҡ килһә, өҫтәле ризыҡтан һығыла. Мул йәшәгәндән, ризығын ҡайҙа ҡуйырға белмәгәндән түгел, ҡунаҡсыллығынан был. Халҡымдың күңел киңлеге һәр кемгә өлгө булырлыҡ.

**Мин дә шул халыҡтың ҡыҙы лабаһа. Был әкиәтте һөйләп, ниндәйҙер зар һүҙе ишеттерергә теләмәйем. Әйтергә теләгәнем шул. Хәҙер инде олоғайып, һабаҡташтарыма, дуҫ-иштәремә йыш йөрөй алмайым. Телефон аша ғына аралашам. "Пенсияң күпме өҫтәнеләр? Фатир, яҡтылыҡ, телефон өсөн күпме түләйһең?" - тип һораһалар, мин, аптырап, әле генә һөйләгән әкиәттәге тегенсенең һүҙҙәрен ҡабатлайым: "Пенсиям етә, хатта аҙыҡ-түлеклек артып та ҡала..."**

**Фәүзиә ЯХИНА.**



*Затлы кейемкәйҙәре, Иманлы йөҙкәйҙәре. Изгелеккә өлгө итеп Ҡуйырлыҡ үҙкәйҙәрен!*

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

# Өҫтәүен ...

## өҫтәйҙәр ҙә ул

**Рәсәй Федерацияһы Пенсия фондының Башҡортостан Республикаһы буйынса бүлексәһе идарасыһы Фоат Хантимеров әйтеүенсә, 1 апрелдән пенсияның база өлөшө -7,5, страховка өлөшө 9,2 процентка арткан, ай һайын түләнгән аҡсаға 7,5, пенсия капиталының иҫәбенә 16 процентка индексация үткәрелә.**

Ф. Хантимеровтың һүҙҙәренә ҡарағанда, пенсияның база өлөшө бөтөн пенсионерҙарға ла бер - тигеҙ 1035 һумдан 1112 һумғаса күтәрелгән, ә страховка өлөшө эш биреүсенең страховка взносын күпме суммала биреүенә ҡарай. Бөйөк Ватан һуғышы инвалидтарының һәм һуғышта ҡатнашыусыларҙың пенсияһы 365 һумдан 629 һумға тиклем артҡан. Шуныһын иҫәпкә алыу мөһим: индексация үткәреү бөтөн категория пенсионерҙарҙың хеҙмәт пенсияһының база өлөшөнә ҡағыла. Беренсе дәрәжә инвалидтарҙың пенсияһының база өлөшө һәм кеше ҡарауындағыларҙың пенсияһы 556,37 һум (уртаса алғанда 38,82 һумға арткан) тәшкил итә. Хәҙер ҡартлыҡ буйынса (Башҡортостанда 74 процент кеше ҡартлыҡ буйынса пенсия ала) пенсияның уртаса күләме 3100, ә хеҙмәт пенсияһының уртаса күләме 2914 һум тәшкил итә. Дөйөм алғанда, 1 апрелдән республикала пенсияның уртаса күләме 2850 һум иҫәпләнә.

Советтар Союзы, Рәсәй Федерацияһы, Социалистик Хеҙмәт Геройҙарын, Ленин ордены менән бүләкләнеүселәрҙе һәм Ленин премияһы лауреаттарын өҫтәмә матди тәьмин итеү күләме лә артты. Унан тыш, Федераль бюджеттан тәьмин ителгән граждандарға ай һайын бирелгән аҡсаның күләме хәҙер бер кешегә иҫәпләгәндә айына 513 һум тәшкил итә. Пенсионерҙарға арткан пенсияны түләү башланды ла инде.

*АУЫЛҒА ХАТ*

# Битараф түгелмен...

## яҡташтарым яҙмышына

**Һаумыһығыҙ минең ҡәҙерле атайым һәм әсәйем!**

**Һеҙгә һағыныслы сәләмдәр ебәреп хат яҙа Гүзәл ҡыҙығыҙ. Минең хәлдәрем яҡшы ғына. Дәрестәр ҡалдырып йөрөгәнем юҡ. Уҡытыусыларҙың һәр һүҙен йотлоғоп тыңлайым. Минең бар маҡсатым уҡыу йортон тик "яҡшы" билдәләренә генә тамамлау бит. Ошо маҡсатымдан тайпылмаҫҡа тырышам.**

Үткән ял әхирәтем мине Ғафури районына ҡунаҡҡа алып ҡайтты. Был яҡ тәбиғәте беҙҙең Баймаҡтағынан айырыла. Барыбер үҙ матурлығы бар. Әхирәтемдең ауылы Мағаш тигән тауға һыйынып ҡына ултыра. Ауылға килеп инеү менән бер күренеш көйөфте ҡырҙы: көлә-көндөҙ типһә тимер өҙөрлөк ирҙәр магазин алдында өйөрөлә. Иҫеректәр, үҙ-ара гөү киләләр. Әхирәтем дә әсенде һәм: "Колхоз бөтөү менән халыҡ эшһеҙлектән арып, эскегә һабышты. Быға тиклем бөтөн ауылға ике-өс эсеүсе ине. Уларҙы әҙәмгә лә һанамай торғайнылар. Хәҙер ғаиләләре менән эсәләр. Йәш кенә ир-егеттәрҙең башына ошо зәһәр араҡы етте", - тине.

Ләкин икенсе күренеш әле генә булған борсолоуҙы ҡул менән һыпырып алғандай юҡҡа сығарҙы. Ҡаршыбыҙҙа аҡ яулыҡ ябынған инәйҙәр, йәш ҡыҙҙар, малайҙар осраны. Ул да булмай, ауыл өҫтөндә аҙан тауышы таралды. Бында яңыраҡ ҡына мәсет аҫҡандар икән. Күптәр тәүбәгә килеп, намаҙға баҫҡан. Йәш быуынға Ислам дине нигеҙҙәрен өйрәтә башлағандар. Дини байрамдар ваҡытында мәсет шығырым тула икән. Ауыл халҡы иманға ҡайта. Яйлап шайтан ҡотҡоһонан арынғандар ҙа иман юлына баҫыр, был ауыл үҙенең асылына ҡайтыр, иншалла.

Үҙегеҙҙең хәлдәр нисек? Фаил ағай имен генә эшләп йөрөймө? Әнүәрҙең уҡыуы нисек? Клубты төҙөкләндереү буйынса эштәр башландымы? Янған медпункттың ҡалдыҡтарын һаман таҙартманылармы? Ниғмәт Баймаҡ районының иң гүзәл ауылдарының береһе бит инде ул. Тик бына ауылдың үҙәк урамындағы ошо "көйөк" бөтә йәмде боҙа. Бәлки бөтөн ауыл менән сығып, әмә ойоштороп, ошо урынды таҙартып та ҡуйыр әле ауылдаштарым?

Үҙебеҙҙең Ниғмәттә башка ауылдар менән сағыштырам да, "Аллаға шөкөр", тием. Күпләп мал аҫырап, ҡош-ҡорт көтөп, мул баҡса үҫтереп, шуны аҡсаға әйләндереп йәшәй беләләр. Шәхси эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнеүселәр ҙә байтаҡ. Хәмерҙән ары торорға тырышыуҙары ла оло маҡтауға лайыҡ. Заманға яраҡлашып, айын табып йәшәй беләләр. Ауылымдың ағинәйҙәре теләнән доға, ҡулдарынан тәсбих төшмәй. Мин үҙ ауылдаштарым өсөн ғорурлыҡ тойғоһо кисерәм. Сәлих мулла ойоштороған дини уҡыуға балалар йөрөймө? Шунда Зәлиә матур доғалар өйрәнгәйне.

Ауылдаштарыма, айырыуса яратҡан күршебеҙ Миңнур инәйгә, уҡытыусыларыма күп-күп сәләм әйтегеҙ.

Хатымды ошо урында туктатып торам. Мин һеҙҙе бик һағындым! Май байрамдарында күрешербеҙ, иншалла.

Һеҙҙең яратҡан ҡыҙығыҙ,

**Гүзәл БИКМӘТОВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Ауырғазы районына эш сәфәре ваҡытында 1200 баш һауын һыйырға иҫәпләнгән мегафирманы - "АгроГалс" предприятиеһының малсылыҡ комплексы төҙөлөшөн ҡараны. Талбазы ауылындағы эсәр һыуға ҡытлыҡ мәсьәләһе нисек хәл ителеүе менән ҡыҙыҡһынды һәм ҡәнәғәтләнерлек яуап алды. Түрҫәгәҙе ауылында социаль-мәҙәни үҙәкте асыуҙа ҡатнашып, ауыл халҡының шатлығын уртаҡлашты.

✓БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай Рәйесе Константин Толкачев етәкселегендәге министрлыҡ, ведомство етәкселәре, йәмәғәт ойошмалары вәкилдәренән, ғалимдарҙан торған рәсми делегация Санкт-Петербург ҡалаһында булды. Г. Плеханов исемендәге Санкт-Петербург дәүләт тау институтында ошо уҡыу йортона нигеҙ һалыусы Ғәйнә ырыуы башкорто Исмәғил Тасимовка иҫтәлекле таҡтаташ ҡуйылды.

✓"Урал" Башҡорт халыҡ үҙәгенең әйле ырыуы вәкилдәре менән берлектә үткәрелгән сираттағы ултырышында әйле ырыуы йыйынын үткәреү тураһында ҡарар ҡабул ителде. Йыйынды үткәреү ваҡыты Өфөлә май айының икенсе яртыһында тип билдәләнде. Һорауҙар менән 273-34-40 телефоны буйынса шылтыратырға мөмкин.

Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрының "Бал-маскарад" спектакле 14 апрелгә тиклем Мәскәүҙә үтәсәк "Алтын битлек" Бөтә Рәсәй фестиваленә биш номинация буйынса тәҡдим ителгән. Операның премьераһы 10 апрелдә Мәскәүҙә үтәсәк.

✓Башҡортостан Республикаһында байрам көндәре менән бәйле 2007 йылдың 29,30 апреле һәм 1,2,9 майы ял көндәре булып тора.

✓Башҡортостанда тыуым арта. 2005 йылда 44094 бала донъяға килһә, былтыр 44921 сабый тыуған. Яңы тыуған сабыйҙар араһында үлем осраҡтары кәмегән.

✓Башҡортостанда 100 йәште уҙған 232 кеше йәшәй. Ике кешегә 110-ар йәш, ә иң өлкәненә - 111 йәш. Статистика буйынса, оҙон ғүмерлеләр араһындағыларҙың күбеһе ҡатын-ҡыҙ һәм ҡалала йәшәй. 100 йәштәр уҙғандарҙың тик бишәүһе генә ир-ат затынан. Ә 90 йәштән уҙғандар республикала 7 мең тирәһе кеше.

*АҘНА ШАҢДАУЫ*

# Утыҙ етенсе ҡабатланмаҫмы?

## Сталин репрессияларына быйыл 70 йыл тула

**Бөгөнгө күҙәтеүем үткән аҙнала донъя күргән гәзит-журналдарҙа булмаған нәмәләр хаҡында. Улай булмай тиһегеҙме? Була икән шул.**

**Йыл башынан матбуғат баҫмаларын иғтибар менән ҡарап барырға тырышам. Кис булһа, телевизорҙан күҙҙәремде алмайым. Донъяла һәм илебеҙҙә булып торған хәл-ваҡиғалар тураһында көнө-төнө һөйләйҙәр. Америкамы, Европамы, Африкамы, Яҡын Көнсығышмы - береһен дә ҡалдырмайҙар. Ираҡта көн һайын нисә кеше һәләк булғанын иҫәпләйҙәр. АҠШ-тың сәйәсәтен тәнҡитләйҙәр, Украиналағы "Майҙан"ды яҡтырталар. Мин хәҙер вис беләм - ҡайҙа нимә шартлағанын, ҡайһы мөйөштә ниндәй вулкан уянғанын, Джордж Буштың нимә тип әйткәнен һәм Путин уға нимә тип яуап биргәнен.**

Ҡайһы саҡ ваҡытлы матбуғат саралары тарих төпкөлөнә лә төшөп китә. Элегәрәк булған ҙур катастрофаларҙы күрһәтәләр. Элекке лидерҙарыбыҙҙы иҫкә төшөрөп алалар. Брежнев, уның ҡыҙы хаҡында һөйләйҙәр, Хрущев хаҡында ла онотмайҙар, Сталин тураһында ла. Телеканалдарҙың береһе Иосиф Виссарионович тураһында хатта сериал төшөргән. Урыҡ-һурыҡ булһа ла ҡарайым ул сериалды. Совет осоронда Сталин бөйөк башлыҡ, оҫта полководец, белдекле, күп йылдарға алдан күрә белеүсе етәксе булараҡ һүрәтләнә ине. Өҫтә әйтеп үтелгән фильмдан һуң уны үҙ проблемалары, ҡайғылары һәм шатлыҡтары булған ябай ғына бер кеше тип күҙ алдына баҫтырырға мөмкин. Сталин бушҡа ғына минең иҫкә төшмәне. Үҙгәртеп ҡороу һәм билдәлелек осоронда уның ҡанһыҙлыҡтары тураһында күп яҙылғайны һәм һөйләнгәйне. Һуңғы ваҡытта иһә уның эшмәкәрлеге менән бәйле илебеҙ һәм халҡыбыҙ тарихындағы бер осорҙо ғына онота башланылар, шикелле. Әллә ул мәл журналистар өсөн үтә мөһим түгел, әллә уларға кемдер илебеҙ тарихындағы тотош бер дәүерҙе оноторға ҡушып ҡуйған инде, аңламаҫһың.

Һүҙ 70 йыл элек башланған һәм йәмғиәтебеҙҙе тамырынан үҙгәрткән ваҡиғалар хаҡында, йәғни 1937 йыл хаҡында барасаҡ. Эйе, илебеҙҙең тормошондағы иң ҡанлы һәм аяуһыҙ осорҙарының береһе бөгөн бөтөнләй тиерлек онотолған. Егерме йыл эсендә йәмғиәтебеҙҙең фекерләү торошо ҡырҡа үҙгәрҙе. 180 градусҡа боролдо, тиергә лә мөмкин. Коммунистик идеяларҙы яҡлап сығыш яһаған кешеләр бөгөн эшҡыуарлыҡҡа тотоноп, акса һуға, капитализмдың өҫтөнлөктәрен иҫбатларға тырыша. Элегәрәк "интернационализм", "халыҡтар дуҫлығы" тигән фразалар менән уяныусылар һәм йоҡларға ятыусылар иһә Рәсәйҙең "айырым юлы", урыҫ халҡының "башҡа халыҡтарҙы берләштереү һәм туплау буйынса Алла тарафынан бирелгән бөйөк миссияһы" хаҡында һөйләргә ярата. Ә атеизмды дәүләт сәйәсәте итеп иғлан итеүселәр иһә "православие һәм державасылыҡ" тип һөрән һала. Дөрөҫөн генә әйткәндә, яңы фекерҙәр түгел улар. Ваҡытында, Октябрь революцияһына тиклем, Рәсәй империяһы тап ошо постулаттарға нигеҙләнгән булған. Бөгөн шуларҙы кабаттан тергеҙергә тырышалар. Бер яктан, ыңғай күренеш һымаҡ. Тарихты өйрәнергә кәрәк. Илебеҙҙең (ниндәй исем менән генә аталмаһын ул) үткәнен белмәнәк, унан фәһем алмаһаҡ, алға ла барып булмаясаҡ бит. Әммә нишләп әле беҙ 100-200 йыл элек булғандарҙы онотмайбыҙ, ҡабаттан тергеҙергә тырышабыҙ, ә 70 йыллыкты иҫебеҙгә лә төшөрмәйбеҙ? Ундай тәжрибә беҙгә кәрәкмәйме? Ә кеше хәтере? Уны төрлө сериалдар менән генә юйып буламы һуң? Ғөмүмән, йәмғиәтебеҙ өсөн Утыҙ етенсе йыл, йәки Бөйөк Террор йылы бөгөн әһәмиәтлеме?

Соконмағыҙ тарих төпкөлөндә, үткән - бөткән, үлеләрҙе кире тергеҙеп булмай, тиеүселәр ҙә табылыр. Бөгөнгөнө, киләсәкте уйларға кәрәк, балаларыбыҙ, ейәндәребеҙҙе ҡайғыртырға кәрәк, тип әйтеүселәр ҙә булыр. Мин дә балаларымды уйлайым. Уларға яҡын киләсәктә яңы Утыҙ етенсе менән осрашырға яҙмаһын, уларҙы дәүләт машинаһының "ҡанлы тирмәне" иләмәһен, улар иркен һәм ирекле тормошта йәшәһен ине, тип уйлайым.

1937 йыл нимәһе менән ғибрәтле һуң, тип һорарһығыҙ. Бит асылда репрессиялар уға тиклем үк башланған булған. Тәүҙә бер төркөм интеллигенция вәкилдәрен пароходтарға тейәп, сит илдәргә оҙаталар, шунан дин әһелдәренә, сиркәүҙәргә һәм мәсеттәргә тотоналар. Мәҫәлән, ҡартатайым Вәлиулла мулла, күренекле мәғрифәтсе, 30-сы йылдар башында тыуған ауылынан оҙатыла, "зарарлы дин тәғлимәттәрен таратҡаны өсөн", йәнәһе. Суд-фәлән дә булмай. Бары тик өҫтән төшкән ҡағыҙ, хөкүмәт ҡарары нигеҙендә генә.

Ә 1937 йылдан алып репрессиялар дөйөм тәҫ ала. Советтар Союзының бер генә төбәге лә бындай акциянан ситтә ҡалмай. Хатта Сталиндың тыуған яғы Грузияла ла совет һәм партия аппаратын "зарарлы элементтарҙан таҙартыу" башлана. Гәзиттәрҙә көн һайын асылған яңынан-яңы "заговорҙар" хаҡында яҙыла. Бөтә илгә билдәле булған шәхестәр "Англия, Америка Ҡушма Штаттары, Япония агенттары", тип иғлан ителә. СССР-ҙы ҡурҡыу, бер-берендән шикләнеү тойғолары солғап ала. Ябай халыҡ, йәмәғәтселек был эшкә әүҙем йәлеп ителә. Кеше урамдарҙа, эш урынында, хатта өйөндә нимәлер булһа ла әйтергә, һөйләргә ҡурҡа башлай. Яңылыш ҡына ысҡындырылған һүҙ кешеләрҙе 10-25 йылға төрмәгә ябырға мөмкинлек бирә. Илдә "әпкәләйҙәр", һүҙ йөрөтөүселәр тантана итә. "Намыҫ" төшөнсәһе юҡҡа сыға. 1937-1938 йылдар эсендә бер миллион ете йөҙ меңдән ашыу кеше сәйәси енәйәттәрҙә ғәйепләнеп, ҡулға алына, ете йөҙ меңгә яҡыны юк ителә, үлтерелә.

Ҡапыл ғына, көтмәгәндә башланған эш түгел был. Алдан уйлап, Енәйәти кодекска махсус статьялар индерелеп, хатта махсус план әҙерләнеп ойоштороло репрессиялар. Улай ғына ла түгел, һәр бер өлкәгә, республикаға план төшөрелә, ҡайҙа күпме кеше ҡулға алынырға һәм хөкөм ителенергә тейешлеге аныҡлана. Планды үтәмәгән төбәктәрҙең етәкселеге, НКВД аппараты үҙҙәре ҡулға алына һәм "короткослок"та ғәйепләнеп, төрмәгә оҙатыла, күбеһе атыла. Ғәҙел суд урынына "тройка"лар булдырыла. Предприятие-ойошмаларҙа "СССР тамырына балта сабыусыларҙы ғәйепләгән" митингылар, йыйылыштар ойоштороло. Сәйәси золомдо ойоштороусыларҙың төп маҡсаты - бөтә илде, йәмғиәтте репрессиялар менән бәйләү, йәғни енәйәтселәр жаргонында - "буяу". Ул осорҙа улы атаһынан, әсәһе ҡыҙынан баш тарта, кеше ғүмеренең ҡиммәте юҡҡа сыға.

Шул үк осорҙа Сталиндың был ысулдарын Гитлер оҫта файҙалана. Германияла бөтә йәмғиәт фашизм идеялары менән зарарланған була. Әммә Икенсе бөтә донъя һуғышында тар-мар ителгәс, немец милләте күтәрелергә, аяҡҡа баҫырға рухи көс таба. Тарихтың фажиғәле һабаҡтарын яҡшы өйрәнә улар.

Беҙҙә иһә Утыҙ етенсе йыл ҡаныбыҙға һеңеп ҡалған һәм быуындан-быуынға күсеп килә. Кешенең шәхес түгел, ә "лагерь саңы" ғына икәнлеген мейебеҙгә ныҡлап һеңдергәндәр. Хатта етмеш йыл үтһә лә йәмғиәттең арҡаһы турайһын, башы күтәрелерлек түгел.

**Кешенең холоҡ-фиғеленә, яҙмышына бөгөнгө тормош, сәйәси һәм иҡтисади ситуация ғына түгел, уның ата-бабаларының хаталары һәм еңеүҙәре, кисерештәре һәм ҡылған эштәре йоғонто яһай, тиҙәр. Элегәрәк кеше нәҫелендә быуындан-быуынға күсеп килгән ҡәһәрләүҙән ҡотолоу өсөн бар ғүмерен бағышларға мәжбүр булған. Был тотош йәмғиәткә лә ҡағыла. Илебеҙҙең өҫтөндә ҡара болот булып торған, алға барырға ирек бирмәгән Утыҙ етенән ҡотолоу сараһы бар микән? Сәйәси золомға дусар ителеүселәр көнөн булдырып ҡына, репрессияларға эләккәндәрҙең исемлектәрен китап итеп баҫтырып сығарып ҡына, ГУЛАГ тамуғын үтеп тере ҡалғандарға пенсияларын әҙерәк арттырып ҡына кешенең күңеленә инеп оялаған ҡурҡыу һәм шикләнеү, үҙ-үҙеңә һәм дәүләткә ышанмаусанлыҡ тойғоларын юҡҡа сығарып буламы икән? "Освенцим", "Бухенвальд" һүҙҙәре фашизм тантана иткән мәлдәрҙе иҫкә төшөрөп, бөтә донъяны һиҫкәндереп торһа, "Нюрнберг процессы" иһә шул ҡанһыҙ сәйәсәтте тормошҡа ашырыусыларҙың ғәҙел яза алыуын хәтерләтә. Кешелек донъяһы, әлбиттә, "Магадан" һәм "Черемхово", "Ванино" һәм "Беломорканал", "ГУЛАГ" атамаларын яҡшы белә, әммә 70 йыл үтһә лә һаман беҙҙең үҙебеҙҙең "Нюрнберг процессы" булғаны юҡ.**

**Таһир ИШКИНИН.**



## ИҒТИБАР!

Икенсе ярты йыллыҡҡа гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы бара. Тағы бер тапҡыр иҫкәртәбеҙ: гәзит-журналдарға яҙылыу яртышар йылға бүленеп үткәрелә башланы. Шуның өсөн, тотош йылға яҙылғанмын икән, тип яңылышып, икенсе ярты йыллыкка гәзитһеҙ тороп ҡала күрмәгеҙ.

Шулай итеп, "Киске Өфө" гәзитен республиканың һәр ауылында, һәр ҡалаһында алдырып уҡып була: почталарҙа **50665** индекслы "Киске Өфө" гәзитенә ярты йылға яҙылыу хаҡы - **237 һум 54 тин** тәшкил итә.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓9 апрелдә Республика йортонда Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов Президент Советының сираттағы ултырышын үткәрә. Ултырышта БР Президентының Башҡортостан Республикаһы халҡына һәм Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға 2006 йылға Мөрәжәғәтнамәһен тормошҡа ашырыу йомғаҡтары тикшереләсәк.

✓Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылыуының 450 йыллығы байрам саралары 10-12 октябрҙә үткәреләсәк, тигән ҡарарға килинде. Байрамға РФ Президенты Владимир Путин киләсәк икәне лә билдәле булды. Байрамда барлығы 60 илдән 400-ләп ҡунаҡ ҡатнашасаҡ. Ул көндә баш ҡалабыҙҙа төҙөлеп яткан юбилей объекттары ла үҙ ишектәрен асасаҡ.

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Беларустың Рәсәй Федерацияһындағы илселегенең Өфөләге бүлексәһе етәксеһе О. Исаевты кабул итте.

✓Латвияла "Латвия башҡорттары ҡоролтайы" рәсми теркәү үткән. Ҡоролтай идараһы рәйесе итеп Зимфир Кәлимуллин һайланған.

✓18-20 апрелдә Башҡортостан "Юлдаш" каналынан "Кредит тарихы" тигән телесериал күрһәтеләсәк. Искәндәр Әхмәтвәлиев ҡуйған фильмда Өфө театрҙары артистары Айрат Фәтихов, Рөстәм Сәлихов, Илдар Сәйетов һәм башҡалар ҡатнаша.

✓"Башкирэнерго" электр станцияларында эшләүсе профессиональ оҫталар конкурсына йомғаҡ яһаны. Беренсе урынды 4-се Өфө ТЭЦ-ы, икенсе урынды 1-се Өфө ТЭЦ-ы яуланы.

✓Белорет ҡалаһында үткән "Илһам шишмәләре" шиғриәт бәйгеһендә Ишембай ҡыҙы Рита Фәткуллинаның ижады Гран-при менән баһаланды. Байрамда БР Премьер-министр урынбаҫары, мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры Илдус Илешев ҡатнашты.

✓"Шүлгәнташ" ҡурсаулығының Әхтәм Иҫәнаманов һәм Рәйес Ғалин исемле атаклы солоксолары Польшала "Бебжа" милли паркында поляк ҡортсоларын боронғо һөнәр серҙәренә өйрәтә. Башҡорт ҡортсолары бөгөн донъяла солоксолокто белгән һәм һаклап ҡалған берҙән-бер оҫталар. Ә Польшала был һөнәр XIX быуат аҙағында уҡ юҡҡа сыҡҡан булған.

✓9 апрелдә Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры сәхнәһендә "Шаянуйын" Республика йәштәр юмор һәм көлкө фестивале үтәсәк.

✓ ***Киләсәктә филолог һөнәре заманса һөнәр булмаясаҡ, тип теләгән ынтылышымдан һүрелдерергә, заман талап иткән һөнәргә йүнәлтергә тырышһалар ҙа, хыялыма хыянат итмәйәсәкмен.***



ТӨРЛӨҺӨНӘН

## Арзан торлаҡ кемгә?

**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Рәмил Хәлимов белдереүенсә, быйыл Өфөлә 80 мең кв. метр социаль торлаҡ тапшырыласаҡ.**

Социаль торлаҡ структураһында күпселекте ҡаланың махсус программаһы буйынса төҙөлгән торлаҡ (быйылға планлаштырылған 50 мең кв. метр урынына 65 мең кв. метр) тәшкил итәсәк. Ҡалғанын ҡала предприятиелары үҙҙәренең хеҙмәткәрҙәре өсөн төҙөйәсәк.

Былтыр йыл аҙағында ҡабул ителгән ҡала социаль программаһы буйынса торлаҡ тәүге взнос индереү һәм 11-14 процентлы ипотека кредиты алыу шарты менән 1 кв. метрына 24,5 мең һум менән башлыса бюджет өлкәһендә эшләүсе хеҙмәткәрҙәргә бирелә. Ғаилә ағзаларының эш хаҡы бөтәһенеке бергә 27 меңдән кәм булмаҫҡа тейеш.

Өфө ҡала ипотека кредиты агентлығының генераль директоры Анатолий Мейзлер әйтеүенсә, быйыл баш ҡалалағы бер мең ғаилә әлеге программаның ҡатнашыусылары була ала. 158 ғаиләне программала ҡатнашыусылар иҫәбенә индерергә мөмкин дә инде, уларҙың документтары ҡабул ителеп, банкта кредит алыу һәләтлегенә тикшереү үткәрелгән. Шулай ҙа улар яңы фатирҙарының ишеген сентябрҙән дә иртәрәк асмаясаҡ әле. Ә бер өлөшө киләһе йылда ғына торлаклы буласаҡ, сөнки фатирҙар яңы төҙөлә башланы.

Ҡала социаль программаһы буйынса йорттар Дим, Затон, Инорс, Черниковка, Сипайлово һәм Колгуев микрорайондарында төҙөлә. Программа сиктәрендә 2008 йылда 100 мең кв. метр торлаҡ төҙөү планлаштырыла.

## "Ер агентлығы" асылды

**Баш ҡалала ер участкаһы алырға рөхсәт биреүсе документ юллау буйынса берҙәм структура - "Ер агентлығы" муниципаль учреждениеһы булдырылды.**

Был учреждение "Земкадастр" муниципаль учреждение предприятиеһы менән "Өфө ҡалаһының ер агентлығы" муниципаль учреждениеһын бергә ҡушыуҙан барлыкка килде. Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Рәмил Дилмөхәмәтов белдереүенсә, ике ведомствоны бергә ҡушыуҙың төп максаты - айырым кешенән алып, предприятие һәм ойошмаларҙың "ер мәсьәләһендә" һорауҙарын хәл итеүҙең һөҙөмтәлелеген күтәреү. Дөйөм алғанда, берҙәм ойошманы булдырыу ергә рөхсәт биреүсе документтарҙы юллау процесын аныҡ һәм сифатлы итеп ғәмәлгә ашырырға мөмкинлек бирә. Хәҙер кешеләр, әлекке һымаҡ, тейешле документ юллап, бер учреждениенан икенсенә йөрөп яфаланмаясаҡ, бөтөн мәсьәләләр сағыштырмаса ҡыҫҡа ваҡытта хәл ителәсәк, йәғни ергә ғаризаларҙы ҡарауға бер ай, документтарҙың тулы пакетын әҙерләүгә өс ай ғына кәрәк буласаҡ. Яңы учреждениеға ергә хоҡуҡ биреүсе документтарҙың бөтөн техник процесын яйға һалыу йөкмәтелгән. Ергә хоҡуҡ мөнәсәбәттәренә етәкселек итеү һәм уны контролдә тотоу функцияһын Өфө ҡала округы хакимиәте башҡарасаҡ.

ШУЛАЙ КӘРӘК!

# Олимпиада еңеүе - университетҡа имтиханһыҙ инеү, тигән һүҙ

- Мин алдыма бәләкәй генә маҡсат ҡуйып, шуларға яйлап-яйлап ирешәм. Олимпиадала беренсе урын алыуым миңә ҡанат ҡуйҙы, хәҙер инде Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Республика гимназия-интернатына уҡырға инергә, тигән хыял менән йәшәйем. Халҡымдың данлы тарихы менән ғорурланам, 1-2 синыфта уҡығанда уҡ нәҫелебеҙҙең шәжәрәһен төҙөгәйнем. Әҙәби китаптар уҡыуым, тел дәрестәрен яратыуым, мәҙәниәтебеҙҙе, тарихыбыҙҙы яҡшы белеүем олимпиадала еңергә ярҙам итте, - ти Динара Ибәтуллина.

Унынсы синыфтарҙың эштәре һөҙөмтәләре буйынса Сибай ҡалаһының 13-сө гимназияһынан Дилә Йософова, Дыуан районының Мәсетле 1-се мәктәбенән Гүзәл Сәғәҙиева I урынға лайыҡ булды. Ҡыҙҙар араһында йәш хәбәрселәр ҙә байтаҡ ине. Мәҫәлән, Йылайыр районы Һабыр урта мәктәбенән Зарина Бағышаева киләсәктә журналист һөнәрен һайларға уйлай, шуға ла башҡорт теле һәм әҙәбиәт дәрестәрен айырыуса ярата һәм ныклы үҙләштерергә тырыша.

Ә ун беренсе синыфтар араһында Илеш районы Йәркәй 1-се урта мәктәбенән Регина Тажиева , Бөрйән районы Байназарҙан Гүзәлиә Байназарова, Ишембай ҡалаһы 2-се башҡорт гимназияһынан Зөлфиә Солтанғужина I урынға сыҡты.

- Олимпиадала 9 кластан башлап ҡатнашам. Өс йыл буйы әҙерлек үтеүемдең һөҙөмтәһе - бөгөнгө еңеүем. Киләсәктә филолог һөнәре заманса һөнәр булмаясаҡ, тип теләгән ынтылышымдан һүрелдерергә, заман талап иткән һөнәргә йүнәлтергә тырышһалар ҙа, хыялыма хыянат итмәйәсәкмен. Быйылдан алып башҡорт теленең бөтә мәктәптәргә индерелеүенә шатланып бөтә алмайым, тимәк, телебеҙҙең киләсәге бар, тел уҡытыусылары һәр заманда ла кәрәгәсәк әле, - ти Гүзәлиә Байназарова.

Ә бына Зөлфиә Солтанғужина юғары белемле белгес дипломына эйә булғас, белем биреү системаһына үҙгәрештәр индерергә иҫәп тота.

- Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән "бишле"гә уҡыған ҡайны бер уҡыусылар дәрестән сығыу менән үҙ-ара русса һөйләшә башлай. Телде белеү улар баһалама өсөн генә кәрәк, тип уйлай ахыры, - ти Зөлфиә.

**Рәлиә БИКТИМЕРОВА.**

### ШУЛАЙ ИТЕП...

**Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса төбәкара олимпиадала I урынға сыҡкан ун беренсе синыф уҡыусылары юғары уҡыу йортона имтиханһыҙ инеү хоҡуғын алһа, II - III урын яулағандар филология факультетына уҡырға ингәндә ошо предметтан имтихан бирмәйәсәк.**

...ГӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# Тарихын белгән юғалмаҫ

**Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылыуының 450 йыллығына арнап, баш ҡала мәктәптәре уҡыусылары араһында ойошторолған бәйгеләргә йомғаҡ яһалды. Еңеүселәрҙе бүләкләү тантанаһы баш ҡаланың 48-се башҡорт лицейында ойошторолдо.**

Конкурсанттарҙың эштәре "Инша", "Кроссворд", "Һүрәт", "Иң матур шәжәрә ағасы", "Минең ғаиләмдең тарихы", "Оригиналь ғаилә гербы", "Ғаилә альбомы", "Өләсәйем һандығы серҙәре" номинацияһында билдәләнде. Мәҫәлән, ғаилә шәжәрәһен төҙөүгә 110 уҡыусы үҙ эшен тәҡдим иткән.

Улар араһында Орджоникидзе, Октябрь, Калинин районы вәкилдәре айырыуса ҙур әүҙемлек күрһәткән. Мостай Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһы уҡыусыһы Сурағол Буракаев, 48-се башҡорт лицейы уҡыусыһы Айгөл Игликова, 122-се башҡорт гимназияһы уҡыусыһы Айгөл Ғайсиналарҙың эше иң-иңе тип танылды. Шулай уҡ Фатима Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһынан Йәмилә Ғәйетбаева, башҡорт йәкшәмбе мәктәбенән Эльмира Әсәҙуллина, 103-сө мәктәптән Самат Сөнәғәтуллиндарҙың иждад емеше лайыҡлы баһа алды.



**Әлиә УСМАНОВА.**

## Хактар, хактар...

**"Симакс" йәмәғәтселек фе-керен өйрәнеү үҙәге ай һайын ҡала баҙарҙарындағы хаҡтарҙы сағыштырып тора. Өфөлә март айында һыйыр итенең килоһы уртаса 150 һум кимәлендә булды.**

Суска итенең (корейка) килоһы Үҙәк баҙарҙа 135 һум торһа, Колхоз баҙарында 145 һумға һатылды. Йомортканың иң арзаны (ун данаһы - 26 һум) "Радуга" сауҙа комплексында, ә иң ҡиммәте Колхоз баҙары менән "Юрматы"ла (ун данаһы 31 һум) булды.

"Радуга" сауҙа комплексында балыҡ арзан хаҡҡа һатылды. Бында минтайҙың килоһы - 55, ә терпуга 58 һум булһа, Колхоз баҙарында уларҙың хаҡы 65,5 һәм 76 һумға тиклем барып етте.

Аҡ май менән көнбағыш майын "Радуга" менән "Ильин" сауҙа комплекстарынан килоһын 75 һәм 36 һумға һатып алыу хужабикәләргә отошло ине, сөнки бүтән баҙарҙарҙа аҡ май 10, ә көнбағыш майы 6 һумға ҡиммәтерәк булды. "Радуга"ла шәкәрҙең килоһы ни бары 16,4 һум булһа, Үҙәк баҙарҙа -23, башҡа баҙарҙарҙа уртаса хаҡы 18,5 һум тәшкил итте.

Беренсе сортлы макарон ризыктарын да "Радуга" сауҙа комплексынан килоһын 13 һумға ғына алырға мөмкин булды, ә Үҙәк баҙарҙа уның килоһы өсөн тағы 4 һум өҫтәргә тура килер ине.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

☑ Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге сираттағы кәңәшмәлә аҙғы һыу баҫыуға әҙерлек мәсьәләләре тураһындағы мәғлүмәт тыңланды. Һыу баҫа торған урындарҙа ашығыс саралар күреүсе штаб төҙөлгән, зыян күреүселәргә ярҙамға килеү өсөн 8 автомобиль, 7 катер, 6 мотокәмә, 3 резина кәмә, 24 водолаз һәм 55 кешенән торған бригада әҙерләнгән. Һыу баҫа торған урында йәшәүсе кешеләрҙе ваҡытлыса күсереү урындары ла билдәләнгән.

☑ Күҙаллауҙар буйынса, Ағиҙел йылғаһы 930 см-ға, Кариҙел - 950 см, Дим 750 см-ға күтәреләсәк.

☑ "Изге йөрәк" мәрхәмәтлек марафоны сиктәрендә Өфө ҡала округы Советы депутаттары 1-се һәм 9-сы балалар йорттарына 780 мең һумлыҡ матди ярҙам күрһәткән.

☑ 9 апрелдән Өфөлә ҡаланың урамдарын санитар таҙартыу һәм төҙөкләндереү буйынса айлыҡ башлана. Ул 31 майға тиклем дауам итәсәк. 21 апрелдә һәм 5 майҙа дөйөм ҡала өмәләре уҙасаҡ.

☑ Быйыл Өфө эргәһендә "Мега Өфө" исемле ҙур сауҙа үҙәге төҙөлешө башланасаҡ. 130 мең кв. метрлы комплекста "ИКЕА" магазины, супермаркет, боҙ катогы, бутиктар, кафе һәм ресторан буласаҡ. 2008 йылдың көҙөнә төҙөлөп бөтәсәк комплекста 3 меңләп кеше эшләйәсәк.

☑ 8 апрелдә Башҡорт дәүләт филармонияһында Белорет районы Йөйәк ауылының шәжәрә байрамы уҙғарыла. 16 сәғәттә башлана.

☑ 11-14 апрелдә Башҡорт дәүләт университетының спорт комплексында Башҡортостан юғары уҡыу йорттарының "Бокс наркотиктарға ҡаршы" универсиадаһы буласаҡ.

☑ Өфө ҡала округының "Мираҫ" бейеү һәм йыр муниципаль ансамбле йыр һәм балет артистарына конкурс үткәрә. Йырсыларҙы тыңлау 13 апрелдә 10 сәғәттә Өфө сәнғәт училищеһында үтә. Ә хореография буйынса конкурс 14 апрелдә 10 сәғәттә Ҡала мәҙәниәт һарайында буласаҡ.

☑ 14 апрелдә Башҡорт дәүләт филармонияһы бинаһында II Ҡурайсылар съезы үтәсәк.

СОБХАНАЛЛА!

**Башҡорт дәүләт университетында хәҙер ҡытай телен дә өйрәтәләр. Уҡытыусыбыҙ Хуэй Хао Ҡытайҙың үҙенән килгән. Ыҡсым ғына кәүҙәле был апай йәш кенә әле. Беҙ уға "Хао Лаоши", йәғни "уҡытыусы Хао" тип өндәшәбеҙ - Ҡытайҙа кешеләр бер-берейһенә мөрәжәғәт иткәндә, исемгә кеше шөғөлләнгән һөнәрҙе лә ҡушып әйтә. Хәйер, беҙҙең ауылдарҙа ла башҡорт инәйҙәре "уҡытыусы Рәсимә" йәки "һатыусы Рауза" тип һөйләйҙәр бит. Шуға күрә беҙгә бындай өндәшеү ят түгел.**

# Ҡытай теле...

## архивҡа юл асыр

Һәр көн дәресебеҙ берберебеҙҙе сәләмләүҙән башланып китә.

- Ни хао?
- Ни мень хао!

Башҡорт телендәге "Нихәл?" тигән һүҙҙәргә оҡшаған, шулай бит? Әлеге көндә һүҙлек запасын арттырыу өҫтөндә эшләйбеҙ. Шунһыҙ телде өйрәнеү ҙә, белеү ҙә мөмкин түгел.

Дәрестәр бик ҡыҙыҡлы үтә. Ғөмүмән, Хао Лаоши беҙгә телде өйрәтеү менән бергә, Ҡытай иленең халҡы, уның мәҙәниәте, йолалары, йәшәйеше хаҡында ла бәйән итә. Беҙ иһә күберәк ҡытай студенттары хаҡында ҡыҙыҡһынабыҙ.

Ҡытай студенттары беҙгә ҡарағанда хәллерәк йәшәй икән. Уларҙың стипендияһы беҙҙең аҡса менән алты меңгә барып етә. Бәлки шуға Ҡытайҙа фән дә, иҡтисад та алға киткәндер? Беҙҙең ил студенттары һәм аспиранттарының был аҡса төшөнә лә кермәй. Улар уҡыу, фән тураһында түгел, нисек көн итеү тураһында уйларға мәжбүр. Быныһы, әлбиттә, икенсе мәсьәлә.

Хао Лаоши әйтеүенсә, Ҡытайҙа студенттар ун туғыҙ-егерме йәштә генә юғары уҡыу йортона инә. "Беҙ Ҡытай студенттарынан айырылабыҙмы?" тигән һорауға уҡытыусыбыҙ ыңғай яуап бирҙе. Ҡытай студенттары дәрескә бөтөнләй һуңламай икән. Студенттар ғына түгел, ғөмүмән, бөтә ҡытайҙар һуңлауҙың нимә икәнлеген белмәй. Беҙҙең студенттар иһә бөтөнләй икенсе тәрбиә алған. Дәрескә кәмендә бер минутҡа һуңлаусыларҙың күп булыуын нисек аңлатырға һуң юғиһә? Ә Ҡытайҙа һуңлап йөрөү оятҡа ҡалыу менән тиң. Студенттар араһында дәрестең уртаһына килеп инеү кеүек күренеш тә юҡ икән. Сөнки был күренеш уҡытыусыны ихтирам итмәү һымаҡ ҡабул ителә.

Ҡытай телен башлап өйрәнеү ауыр, әлбиттә. Был телдең фонетикаһы бик ҡатмарлы. Мәҫәлән, бер ижектән торған һүҙ төрлөсә уҡылыуы мөмкин. Хао Лаошиның таҡтаға яҙған иероглифтары ла беҙгә таяҡсалар йыйылмаһы булып күренә. Тырышлыҡ менән был ауырлыҡты үтербеҙ, тип ышанам.

Университетта ҡытай телен өйрәнеү мәсьәләһе буйынса әллә күпме бәхәс булды. Ҡайһы берәүҙәр был телде өйрәнеүҙең әллә ни әһәмиәтен күрмәйҙәр.Тарихсылар әйтеүенсә, ҡытай архивтарында башҡорт халҡы тарихы буйынса бик күп документтар өйрәнелмәй ята. Телде өйрәнеү халҡыбыҙ тарихындағы яңы биттәрҙе асырға ярҙам итәсәк. Унан һуң ҡытай теленең киләсәктә абруйы күтәрелеүе мөмкин. Техника, фән өлкәһендә Ҡытай алға киткән ил булараҡ, яҡын көндәрҙә донъя баҙарында төп урындарҙы алып тормаҫ, тимә. Нисек кенә булмаһын, тормош менән бергә генә түгел, унан саҡ ҡына алда атлай белеү мөһим.

**Резеда КҮЗБӘКОВА,**
**БДУ студенты.**

ШАҢДАУ

# АТА-ӘСӘ АҢЛАМАЙ,

## ә балаһына бер ни кәрәкмәй

**"Киске Өфө" гәзитенең 12-се һанында Ләйсән Мараҡанованың "Башҡорт теленә... өйрәнәм" мәҡәләһен уҡығас, оҙаҡ ҡына уйланып йөрөнөм.**

Эйе, башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыуҙы мәктәп программаһына индереү фактын уҡыусылар ҙа, ата-әсәләр ҙә төрлөсә ҡабул итте. Ата-әсәләр башҡорт телен өйрәнеүҙең кәрәклеген аңлап та етмәй. Улар тел өйрәнеүҙең әһәмиәтен аңламағас, балаларҙан уны яҡшылап үҙләштереүҙе талап итмәй һәм шунлыҡтан балаларҙа был предметҡа битараф ҡараш нығына.

Сит тел өйрәнгәндә иң мөһим шарт булып шәхси мотив тора бит. Уҡыусыларҙа башҡорт телен өйрәнеүгә шәхси мотив юҡ. Сөнки улар өсөн башҡорт теле сит тел түгел. Улар аңлауынса, сит тел булып инглиз, француз, немец телдәре генә өйрәнелә ала. "Һеҙ республикала йәшәүсе төп халыҡтың телен белергә тейеш", - тип әйтеү ҙә һөҙөмтә бирмәй. Башҡорт телен белмәһәң, уҡыу йортона инә, яҡшы эшкә урынлаша алмаясаҡһың, тип берәү ҙә әйтмәй. Шулай тип әйтерлек шарттар тыуҙырырға ине республикала.

Шуныһына хайран ҡалам: бөгөнгө мәктәп уҡыусыһы республика тарихын, мәҙәниәтен бөтөнләй белмәй һәм белгеһе лә килмәй. Улар өсөн республикала Өфөнән башҡа - ҡала, уның ете районынан башҡа район юҡ. Улар электән үк башҡорт халҡының тарихын, мәҙәниәтен белеп үҫһә, ҡараш икенсе булыр ине.

Аптырайым, ни өсөн быға саҡлы уҡ республикаға исемен биргән халыҡтың тарихы, мәҙәниәте тейешле кимәлдә мәктәптәрҙә өйрәнелмәгән?

Телдең ҡулланыу даирәһен киңәйтергә, телебеҙҙе башҡалар ҙа өйрәнһен, ятаһын өсөн икенсе шарттар, икенсе алымдар ҡулланырға кәрәк. Эште яйлап, уртанан һындырмай башҡарыуға ни етә? Тел уҡытыу өсөн етерлек әсбаптар, видеояҙмалар, методик ҡулланмалар кәрәк. Һәм иң мөһиме - телде өйрәнәсәк йәмғиәт үҙе мәктәптә башланған үҙгәрештәргә әҙер булырға тейеш. Уның өсөн оҙайлы һәм планлы рәүештә башҡарылған әҙерлек етешмәй.

**Ләйсән БАЙҒУСҠАРОВА.**



ҠУЛЛАНЫУСЫ ӘЛИФБАҺЫ

# Аһ, БЫЛ КРЕДИТТАР!

**Мөһим кредит шарттары менән яҡшылап танышып сыҡҡас, йәнә ҡайһы бер ваҡ мәсьәләләргә лә иғтибар итергә кәрәк. Йыш ҡына беҙ уларҙы һанға һуҡмай, уңайһыҙ хәлгә ҡалабыҙ.**

Әгәр ҙә барыһын да ваҡытында һәм теүәл эшләргә күнекмәгәнһегеҙ икән, нисек итеп кредитты һуңламай түләү хаҡында алдан уйлап ҡуйыу мөһим. Килешеүҙә күрһәтелгән ваҡыт һеҙҙең тап ошо көндә бурысығыҙҙы бирергә кәрәк икәнлеге хаҡында аңлатмай. Билдәләнгән көнгә тиклем кредитты түләп ҡуйыу әллә күпме күңелһеҙ хәлдәрҙән ҡотҡарасаҡ. Өйөгөҙ янында урынлашҡан банкоматтар хаҡында белешегеҙ - һеҙгә ваҡытында бурысығыҙҙы ҡайтарыу өсөн улар менән ҡулланыу бик ҡулай буласаҡ. Әлбиттә, аҡсаны иҫәпкә күсереп тороу күпкә еңелерәк булыр ине, тик уның да кире яғы бар: аҡса күсергән өсөн, банк һеҙҙән ниндәйҙер күләмдә комиссия аласаҡ.

Әгәр ҙә һеҙ ваҡытында түләп өлгөрмәнегеҙ икән, банк беренсе тапҡырға штраф һалыу менән генә сикләнә ала. Бер нисә тапҡыр түләмәй ҡалған осраҡтарҙа, банк бөтә сумманы тиҙ арала ҡайтарыуҙы талап итәсәк. Банк талаптарын үтәүҙән баш тартаһығыҙ икән, ул һеҙҙе судҡа бирә ала. Бурысығыҙ шулай уҡ икенсе ойошмаға һатылыуы мөмкин, ул осраҡта һеҙҙе бөтөнләй таныш булмаған кешеләр менән аңлашыу көтә.

Бөтә бындай түләмәүҙәр һеҙҙең банк тарафынан асылған кредит тарихында теркәлеп бара. Таҙа кредит картаһы - ышанысла һәм һүҙендә тора белгән кешенең намыҫы менән бер. Шуға күрә бер тапҡыр булһа ла ваҡытында түләмәү намыҫыңа күләгә һалыу тигән һүҙ. Тағы ла кредит алырға теләгегеҙ булһа, бурысығыҙҙы мәлендә түләп, үҙегеҙҙе тик яҡшы яҡтан ғына күрһәтеү хәйерле. Сөнки бәләкәй генә яңылышлыҡтар ҙа һуңынан һеҙҙең ниәтегеҙҙе боҙоуы ихтимал.

Бер-ике йылдан кредит бюролары асыу планлаштырыла. Унда түләй алмаған, йәки бурыстарын ҡайтарырға ашыҡмаған кешеләр хаҡында мәғлүмәт туплаНасаҡ. Дөйөм мәғлүмәт базаһы булдырылғас, хатта коммуналь хеҙмәт һәм телефон өсөн бурыстары булған кешеләрҙең исемлеген төҙөү ҡарала. Түләмәүсе башҡа бер ҡасан да кредит ала алмаясаҡ. Әгәр ҙә инде суд бер нигә ҡарамаҫтан бурысты түләүҙе талап итһә, бар мөлкәтегеҙҙән яҙыу ҡурҡынысы янай.

Күптәребеҙ кредит алғанда бурысы өсөн яуаплылыҡ алған кеше (поручитель) эҙләй. Шул ваҡытта ул кеше лә бурысҡа аҡса алыусы булараҡ сығыш яһағаны иҫебеҙҙән сыға. Килешеүгә ҡул ҡуйған был кеше бөтә нәмәгә лә әҙер булырға тейеш. Банк унан да бурыс ҡайтарыуҙы, йәки проценттарҙы түләүҙе талап итә ала. Шуға күрә бурыс өсөн яуаплылыҡты алғанда был мәсьәлә хаҡында ныҡлап уйлау мөһим. Тағы ла бер кәмселек - яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алыусы кредит ала алмай. Сөнки кешенең бурысы һеҙҙең дә бурыс булып иҫәпләнә.

**Илдар ҒӘБИТОВ,**
**иҡтисад фәндәре кандидаты.**

Б Ә Л Ә К Ә Й  Ҡ А М У С

БЕЛМӘҺӘҢ-



БЕЛ

### Вулкандар

Ер шарында эреле-ваҡлы нисә вулкан булыуын һәм уларҙың ҡайһылары урғылыуҙан туҡтамауын, ҡайһылары мәңгелеккә һүнеүен белеп бөтөрлөк түгел.

Беҙҙең эраға тиклем 1200 йылда Грецияның Эгей диңгеҙе янындағы Тир утрауында Сантонин тип исемләнгән ҡот осҡос вулкан урғыла. Донъя ғалимдары уны Атлантида ҡитғаһын һәләк итеүсе вулкан, тип иҫәпләй. Уның атмосфераға 65 куб. километр тупраҡ ташлауынан утрауҙың үҙәк өлөшө 300 метр тәрәнлектә күмелә. 13 километр диаметрында барлыҡҡа килгән соҡорҙо диңгеҙ баҫа, сөнки вулкан диңгеҙҙә цунами ҡалҡытып, 100 метр бейеклектәге тулҡындар хасил итә һәм был гигант тулҡындар сәғәтенә 200 километр тиҙлектә тирә-яҡҡа тарала.

Сальвадорҙағы Исалько вулканы иһә бөгөн планеталағы иң әүҙем вулкан һанала. Бына 200 йыл инде ул 10 минут һайын 1885 метр бейеклеккә атылыуҙан туҡтамай.

Был утрауҙағы Килауэла вулканының бейеклеге 1247 метрға етә. Уның ҙурлығы 4,5 квадрат километр. Ә тәрәнлеге 230 метрға еткән кратеры ҡайнап торған ҡуҙлы күл хасил итә. Һуңғы 10 йылда ғына ул 50 тапҡыр атылып, береһе 867 көн буйы туҡтамаған.

Шулай уҡ был утрауҙағы Муана-Лоа вулканы донъяла иң ҙурҙарҙан һанала, сөнки ул тау буйлап һуҙылып ята. Үҙе бер туҡтауһыҙ төтәп, гөрһөлдәгән тауыш сығарып, ялпылдап янып ята. Һауаға атылған саҡта ут бағанаһы 4168 метрғаса күтәрелә. Көмбәҙенең киңлеге 102, оҙонлоғо 103 километрға етә. Кратерының майҙаны 10,5 кв. километр, тәрәнлеге 150-180 метр. Муана-Лоа өс йылға бер тапҡыр уяна.

Италияның Сицилия утрауындағы Этна вулканы әле лә ваҡыты-ваҡыты менән уянып ала. 1983 йылдағы урғылыуында Этна атмосфераға 2,5 килограмдан ашыу алтын, 9 килограмм көмөш, ртуть, цинк, баҡыр һәм башҡа бик күп тау тоҡомдарын ырғыта.

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# "Ҡатыныңды рәнйетмә!" - Бәйғәмбәрҙең васыяты был

**Һәр кешенең хәләл ефете менән мөнәсәбәте үҙенсә яйға һалына. Ә ғаиләлә үҙ-ара мөнәсәбәттең Ислам диненә ярашлы урынлашыуы - иң яҡшыһы һанала.**

Иргә ҡатыны менән ниндәй мөнәсәбәттә булырға кәрәк һуң?

Иң беренсе, яғымлы мөнәсәбәттә бул, ҡайһы бер етешһеҙлектәренә күҙ йомоп ҡарай бел. Ҡатыныңдың тәжрибәһеҙлеген, тиҙ тоҡаныусанлығын ғәфү ит, ҡайһы сакта уның әҙәп ҡағиҙәһен тотмай, рәнйеткес һүҙҙәр әйтеүенә иғтибар итмә. Ҡөрьәндә: "Ҡатынығыҙҙың бөтөн эштәренә лә һәр саҡ яҡшы мөнәсәбәттә булығыҙ", тиелә.

Ҡатының баҫалҡы булһа, уны йәберләмә. Әгәр бер нисә ҡатының булһа, уларҙы бер-берәһенә өлгө итеп ҡуйма, һәр берәһенә тиң ҡараштә бул. Бәйғәмбәр ҙә үлер алдынан көслө затҡа: "Ҡатынығыҙҙы рәнйетмәгеҙ",- тигән васыят әйтеп ҡалдырған. Бәйғәмбәр киләсәк быуын ирҙәре фәһем алһын тип, ҡатындарының етешһеҙлегенә сабырлыҡ, түҙемлек күрһәткән, булдыҡһыҙлыҡты кисерә белгән. Әнәс ибн Малик, мәҫәлән, уның тураһында:"Кешеләр араһында Алла илсеһе ҡатындарына һәм балаларына ҡарата иң яҡшы мөғәмәлә итеүселәрҙең береһе ине", тип һөйләгән.

Ир хәләл ефете менән ҡыҙыҡ нәмәләр тураһында һөйләшеп-көлөшеп алырға, уның күңелен күтәрергә, ҡыуандырырға бурыслы. Бәйғәмбәр ҙә үҙен күңелле тотоп, йыш ҡына төрлө мәҙәк һөйләп, ҡатындарының кәйефен күтәрер булған. Бер хәҙистә: "Ғаиләһенә ҡарата мәрхәмәтле диндарҙың ғына холҡо яҡшы һәм иманы камил була", тиелә.

Шулай ҙа ир үҙенең ҡатынын саманан тыш иркәләп, холҡо боҙолорлоҡ кимәлгә еткереп осондорорға тейеш түгел. Әгәр ҡатыны кеше араһында үҙен әҙәпһеҙ тота башлаһа, ир уны "ауыҙлыҡларға" тейеш. Әгәр бешмәгәнләнеп, бәйелеһеҙгә әйләнә башлаған ҡатынын ваҡытында ҡулға алмаһа, уны тыйыу ауырға төшәсәк. Ерҙә лә, күктә лә йәшәйеш ҡәтғи тәртипкә буйһона һәм шул сик аша сыҡкан насар нәмәләрҙең барыһы ла кешенең үҙенә әйләнеп ҡайта. Шуның өсөн ҡатынға ҡарата мөнәсәбәттә "алтын урталыҡ" табыу мөһим. Бөтөн нәмәлә лә хәҡикәт юлынан барырға кәрәк. Ҡатын-ҡыҙҙар араһында мәкерле, тупаҫ, ҡыҙыу холҡло, тәрбиәһеҙ һәм наҙандар булыуын иҫәпкә алыу мөһим. Уларҙың зыян ҡылыуынан һаҡланыу өсөн шәриғәт тәрбиәһенә әйәрергә кәрәк. Тәбиғәте менән ҡатын-ҡыҙҙың күңеле йомшаҡ. Ул боҙоҡ күңеллегә әүерелә башлаһа, мәрхәмәтлегең, наҙлы һүҙең һәм ирҙәрсә аҡылың менән еңеп, тура юлға төшөр.

Әгәр ҡатыныңдың характерында насар эҙемтәләргә юлыҡтырыр шикле нәмәләр тоя башланаң, бер ни һиҙмәгән кеше булып ҡыланма. Ваҡытында сик ҡуй. Ир кешегә үтә көнсөл һәм шикләнеүсән булырға ярамай. Бәйғәмбәр ҡатындың тоғролоғон тикшереү өсөн иргә төн уртаһында, ҡапыл ҡайтып инеүҙе тыя.

**(Аҙағы 7-се биттә).**

*МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ*

# Хилйә ән-нәбәүийә,

## йәки Мөхәммәт Бәйғәмбәр ниндәй ҡиәфәттә булған?

**Былтырғы йыл донъя мосолмандары өсөн күңелһеҙ башланды. Европа матбуғаты Мөхәммәт Бәйғәмбәрҙең карикатураһын ҡумәртәләп ташҡа баҫып сығарҙы. Был ҡылыҡҡа яуап төрлөсә булды. Кемдәрҙер урамға сығып, флаг яҡты, бойкот иғлан итте. Алдынғы ҡарашлылар иһә, провокацияға бирелмәй, "наҙан" Европаға, тәү сиратта, Данияға Мөхәммәт ғәләйһиссәләмдең кем булғанлығын аңлатыу алымдарын тапты. Улар Бәйғәмбәр хаҡында 5 000 000 тиражлыҡ гәзит баҫтырып таратты. Йәғни физик, ҡорал, ут көсө менән түгел, ә һүҙ, аҡыл көсө менән лайыҡлы эш башҡарҙы.**

Ислам әхлағы Мөхәммәт Бәйғәмбәрҙең һүрәтен төшөрөүҙе ҡәтғи тыя. Шуға күрә Уны һүҙ ярҙамында ғына, каллиграфия һәм матур яҙыу аша ғына һүрәтләп, оло ихтирамын белдерә. Бәйғәмбәрҙең каллиграфик һынланышы "Хилйә ән-нәбәүийә" тип атала. Уның әһәмиәтен Бәйғәмбәр үҙе үк әйтеп ҡалдырған: "Кем дә кем мин вафат булғандан һуң хилйәмде күҙ алдына килтерә, был мине күреүгә тиң булыр. Һәм кем мине күреп, мине ҡабул итә, шуға Аллаһы Тәғәлә йәһәннәм утында янырға ирек бирмәҫ, һәм ул Ҡиәмәт көнөндә шәрә килеш яңынан тыуҙырылмаҫ".

Ғәрәп теленән "хилйә" һүҙе, ҡыҫҡаса, Мөхәммәт Бәйғәмбәрҙең каллиграфик һүрәте, уның матурлығы һәм яҡшы сифаттары, тигәнде аңлата. Быңдай һүрәттәргә Бәйғәмбәргә ҡарата маҡтау һүҙҙәре лә өҫтәлә. "Хилйә ән-нәбәүийә" Бәйғәмбәрҙән изге фатиха алыу, шулай уҡ бәлә-ҡазаларҙан һаҡланыу сараһы ла тип иҫәпләнә. Шуға ла мосолмандар "Хилйә ән-нәбәүийә"гә ихтирам менән ҡарай, теге донъяла Бәйғәмбәр менән бергә буласағына һәм Ҡиәмәт көнөндә уның ярҙамына ирешәсәгенә ышана. Уны өйҙә, магазинда, мәсеттә йәки эштә иң лайыҡлы урынға ҡуялар.

Ул тәүҙә "насх" шрифты менән яҙылған һәм ҡуләме үтә лә бәләкәй булған. Уны хатта кеҫәгә һалып йөрөткәндәр. Ләкин "Хилйә ән-нәбәүийә"не XVII быуаттың каллиграфия оҫтаһы Хафиз Ғосман ҙурыраҡ форматта эшләй башлай. Әйткәндәй, хилйәне эшләү каллиграфия менән шөғөлләнеүселәр өсөн иң юғары баҫҡыс иҫәпләнә.

Хилйә башлыса Бәйғәмбәрҙең кейәүе һәм иң яҡын кешеләренең береһе Ғәли хәҙрәттең һөйләүҙәренән сығып ҡорола. Хилйәнең башҡа төрҙәре лә бар. Улар бер-береһенән яҙыу стиле менән айырыла. Бәйғәмбәрҙең Ғәли хәҙрәт һөйләгән варианттағы каллиграфик һынланышы һүрәттәгесә уҡыла.



**Рәхмәтле һәм Рәхимле Аллаһ исеменән**

**Ғүмәр хәҙрәт,** Хоҙай уға рәхмәтен бирһен.

**Әбү Бәкр хәҙрәт,** Хоҙай уға рәхмәтен бирһен.

*"Ул оҙон буйлы ла, ҡыҫҡа буйлы ла түгел ине. Үҙ ырыуында ул урта буйлы кеше ине. Уның сәстәре бөҙрә лә, үтә тура ла түгел ине, тик әҙ генә бөҙрәрәк ине. Уның йөҙө ҡара-ҡыҙғылт, әҙ генә йомро һәм йыуан, күҙҙәре ҡара, каштары - ҡуйы һәм оҙон, һөйәктәре - ҙур, ә яурындары киң ине. Кендегенән алып күкрәгенә тиклем һыҙылған нәҙек кенә һыҙыҡтан башҡа тәнендә бөтөнләй йөнө юҡ ине. Аяҡтары менән ҡулдарындағы бармаҡтары сағыштырмаса йыуан ине. Атлағанда ул ҡыя баҫып һәм аҫҡа табан төшкән юлдан атлаған һымаҡ атлап йөрөнө, аяҡтарын һөйрәмәне, ерҙән аяҡтарын ҡапыл айырып, оҙон аҙымдар менән атлар булды. Берәй кемгә ҡараш ташлағанда ул башын ғына түгел, бар кәүҙәһен бора торғайны. Арҡаһында уның һуңғы Бәйғәмбәр булыуын дәлилләүсе миң бар ине.*

**Ғәли хәҙрәт,** Хоҙай уға рәхмәтен бирһен.

**Ғосман хәҙрәт,** Хоҙай уға рәхмәтен бирһен.

**Беҙ һине ғәләмдәргә рәхмәт итеп кенә ебәрҙек.**

**Ҡөрьән Кәрим 21-107.**

*Кешеләр араһында ул иң ышаныслыһы, йомшаҡ тәбиғәтлеһе, яҡшыһы, дуҫлыҡҡа хыянат итмәүсеһе ине. Уны тәүге тапҡыр күргәндәр ҡапыл юғалып кала ла, аңғәмәләшкәс һәм дуҫлашкас уға ҡарата оло һөйөү уты менән тоҡана ине. Уны маҡтарға теләүселәр, ғәҙәттә, "Уға тиклем дә, унан һуң да ундайҙарҙы күргәнем булманы", тиҙәр ине.*

(Тирмизи, Шамаиль, 276-278, Ибн Сад, Табакат,1\121).

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Меңәр йыллап ата-бабалар йолаларына хыянат итмәй йәшәгән мосолман туғандарыбыҙ йыл һайын Бәйғәмбәрҙең тыуған көнөн оло байрамға әйләндерә. Улар был изге айҙы "Ҡотло тыуған ай" тип атай. Аҙна, ай дауамында Бәйғәмбәргә ҡарата хөрмәттәрен йыр-моң, мәжлес, өгөт-нәсихәт, доға, мәсеттәрҙә күмәкләп намаҙ уҡыу аша белдерәләр. Сөнки имандың төп нигеҙҙәренең береһе - Мөхәммәт Бәйғәмбәргә ҡарата ихтирам, һөйөү йөрөтөүҙә.**

**Шәфҡәт ИМАНҒОЛОВ.**

*ҺҮҘ АРАҺЫНДА*

# Ирҙәргә алтын ярамай



**? "Мосолман ирҙәренә никах алтын балдағы кейергә яраймы?"**

Мосолман ирҙәрен күркәмләүсе әйберҙәр тағыу хуплана. Ҡөрьәндә "Хоҙайҙың кешеләр өсөн булдырған биҙәүестәрен, рәхәтләнтеп яҡшыларын кем тыя?" тиелә.

Шулай ҙа мосолман ҡатынҡыҙҙарына рөхсәт ителгән, ләкин мосолман ирҙәре өсөн тыйылған ике нәмә бар. Ул - алтын һәм саф ебәктән тегелгән кейем. Бер мәл Мөхәммәт Бәйғәмбәр уң ҡулына тотҡан ебәктән тегелгән кейемде, һул ҡулындағы алтынды юғары күтәреп: "Быларҙың икеһе лә минең өммәтемдәге ирҙәр өсөн тыйылған әйберҙәр",- тигән. Мөхәммәт Бәйғәмбәр йәшәгән заманда быға бәйле тағы бер ваҡиға билдәле. Бәйғәмбәр бер көрәштәшенең бармағындағы алтын балдаҡты систереп ала ла: "Ҡайһы берҙәрегеҙ Тамуҡ мөйөшөнә теләмәксе, уны бармағығыҙҙа йөрөтәһегеҙ",- тигән. Алтын запонка, ҡәләм, сәғәт, портсигар һәм шуларға оҡшаш бүтән әйберҙәр Ислам буйынса ирҙәргә тыйылған нәмәләр иҫәбенә инә. Мосолман ирҙәре өсөн алтын биҙәүестәр тағып йөрөү һәм саф ебәктән тегелгән кейемдәр кейеүҙе тыйыу мөһимлеге буйынса спиртлы эсемлектәр эсеүҙе тыйыуға тиң. Ғөмүмән, ирҙәр өсөн теләһә ҡайһы ваҡытта, бигерәк тә намаҙ уҡығанда, алтын әйберҙәр тағыу тыйыла. Ә инде никах балдағына килгәндә, мосолман ирҙәренә көмөш балдаҡ кейеү тәҡдим ителә.

✓ ***Иң сетерекле хәлдәрҙә лә, айырылашайыҡ, тимә, был һүҙҙе үҙ-ара мөнәсәбәттәр киҫкенләшкәндә әйтергә мөмкин. Сығырынан сығыр сиккә еткәндә лә үҙен лайыҡлы тота белеүе - ирҙәрҙең яҡшы сифаттарының береһе.***



*ЙОЛАҢДАН ЙҮН ТАП!*

**2006 йылдың 22 декабрендә Рәсәй Фәндәр Академияһы Тарих, тел, әҙәбиәт институтында башҡорт халҡының этногенезына һәм этник тарихы проблемаларына бағышланған Бөтә Рәсәй фәнни-ғәмәли конференцияһы булып үтте. Конференция барышында тарих фәндәре кандидаты Ринат Йосопов сығышында "Х быуатта башҡорттар ултыраҡ һәм күсмә тормошта йәшәгән. Йыланға, балыҡҡа, торнаға табынғандары ултыраҡ тормошта йәшәгән, ер эшкәртеү, һунарсылыҡ, балыҡсылыҡ менән шөғөлләнгән", тигән һүҙҙәргә иғтибар иттем. Ғалимдың һығымталарына таянып, башҡорт ырыуҙарының торнаны һәм йыланды тотем итеп алыуының сәбәбен асыҡлап киткем килә.**



# Торналар бейегәнен күрҙем...

## Торна тураһында

Эйе, Ринат Йосопов хаҡлы. Ултыраҡ тормошта йәшәгән башҡорттар ниндәйҙер үҙенсәлектәренә ҡарап, йәнлектәрҙе, ҡоштарҙы тотем итеп алған, йырҙар сығарған - рухи байлыҡ тыуҙырған. Ошондай рухи байлыҡтың бер гүзәл өлгөһө - "Сыңрау торна" көйө. Ул илаһи көйҙөң тарихын былайыраҡ итеп һөйләйҙәр. Имеш тә, башҡорттарға төнөн дошман ябырылғанда торналар тауышы халыҡты уятҡан, дошманды ҡыуып ебәргәс, халыҡ торнаға табына башлаған. Торнаны бер башҡорт ырыуының тотем итеп алыуының сәбәбе, минеңсә, бөтөнләй икенсе.

Торналарҙың бейегәнен күргәнем булды. Атайым атын егеп, берәй ергә китергә булһа, мотлаҡ унын артынан эйәрә торған ғәҙәтем булды минең. Был юлы ла атайым менән май айында атта-арбала китеп бара инек. Уҡымай инем әле, биш йәштә инем. Арбала бәүелеп килә торғас, йоҡлап киткәнмен. Атайымдың "Уян әле, ҡыҙым, уян", тип өндәшеүенә уянып киттем. Ҡулы менән төртөп күрһәткән яҡҡа ҡараным. Юлдан хәтһеҙ генә ситтә, һирәк ҡарағайҙар артындағы уйһыулыҡта торналар түңәрәк яһап тора - хас кешеләр һымаҡ. Уртала шундай ыҡсым, нәфис хәрәкәттәр яһап, ике торна бейей. Бер аҙ бейегәс, муйындары менән бер-береһенә һарылышты. Ошо илаһи күренеште күрһәткән атайыма мәңге рәхмәтлемен.

Икенсе тапҡыр ошо Дыуан-Ҡариҙел урман массивында тағы күрҙем торналар бейеүен. Кешеләрҙең ғәҙәттәре, йолалары үҙгәрҙе, ә торналар бейеүе мин бала ваҡытта нисек итеп күрһәм, һаман шулай.

Ошо ваҡыт араһында мин торналар тормошо менән ҡыҙыҡһынып, әҙәбиәт табып уҡығайным. 4-5 йәшлек ваҡыттарында улар йәшлек ҡоронда була. 4 йәштә үҙҙәренә иш табып, мәңгелеккә ғаилә ҡора. Ниндәйҙер сәбәп менән берәүһе һәләк булһа, тере ҡалғаны бер ваҡытта ла бүтән иш эҙләмәй.

Ултыраҡ тормошта йәшәгән башҡорттар үҙ ауылы янындағы күлдәргә, һаҙлыҡтарға килеп ояლаған ҡоштар тормошон ныҡлап өйрәнгән. Нисәүһе ишләнгән, нисәүһе йылы яҡҡа киткән, нисәүһе ҡайтҡан икәнен күҙәткән. Торналар тормошоноң бик матур ойошторолғанын күргән, һоҡланған. Ишле торналар бала сығара, бала ашата, йәй буйы бала тәрбиәләй. 4-5 йәшлектәре үҙҙәренең ҡоронда иш һайлай. Бер йәшлек бала, ике-өс йәшлек үсмер торналарға иштәрен юғалтҡандары күҙ-ҡолаҡ була, тәрбиәләй. Торналар, аҡҡоштар һымаҡ, ишен юғалтҡас, суицид ҡулланмай, ә үҙенең торналар тубында ҡала, уға хеҙмәт итә.

Халҡыбыҙ торналар тормошон биш мең йыл элек тә, ун туғыҙынсы быуатта ла белгән. Яуҙарҙа ҡыйыулығы менән таң ҡалдырған башҡортҡа ла суицид сит нәмә булған. Рокоссовскийҙың һуғышта "Умирать надо с умом" тигән әйтеме билдәле. Ошондай йәшәү рәүеше - башҡорт халҡының йәшәү рәүеше ул. Ер-һыуы, тыуған тәбиғәте, Уралы тураһында йырҙар сығарып, яратып, яҡлап, һаҡлап йәшәгән ултыраҡ башҡорт торналарҙы аҡыллы ойошторолған йәшәү рәүеше һәм, бигерәк тә, мөхәббәттә тоғролоғо арҡаһында үҙ күңеленә яҡын иткән. Шуның өсөн торнаға гүзәл көй бағышлаған, уны тотем итеп алған.

## Йылан ырыуы

Башҡорт халҡының бик ҙур һәм боронғо ырыуы - легендар Ҡорҡот-ата, Ҡоңрат бейҙәре менән тәүге мең йыллыҡта уҡ бөтә төрки донъяһында билдәле йылан ырыуы башҡорттары ни өсөн йыланды тотем итеп алыуын да ҡарап үтәйек. Башҡорттоң боронғо йылан ырыуы вариҫтары бөгөнгө Баҡалы, Илеш, Краснокама, Дүртөйлө, Бәләбәй, Саҡмағош, Йәрмәкәй, Шаран райондарына йәшәй. 1834 йылғы халыҡ иҫәбен алыу материалдарында Бөрө өйәҙендә 40 мең, Бәләбәй һәм 1920 йылда Татарстанға биреп ҡалдырылған Бөгөлмә өйәҙҙәрендә 50 меңгә яҡын йылан ырыуы башҡорттары йәшәгән булһа, әлбиттә, бөгөн дә унда уларҙың бүләбүләсәрҙәре, тыуар-тыуасалары йәшәй. Уларҙың теле лә бик үҙенсәлекле: "ҡыҙыл быҙау" тип йөрөтәләр уларҙың телен.

1920-1940 йылдарҙа йылан ырыуы башҡорттары Башҡортостандың көнбайыш, төньяҡ өлөшөндә йәшәгән бүтән башҡорт ырыуҙары кеүек үк, бер аҙ татар теле йоғонтоһонда булһа ла, йәғни телдәренә йомшаҡ "ч" өнө килеп инһә лә, улар һөйләшендәге төп үҙенсәлек - "ҙ" өнө тороп ҡалған һәм тик башҡорт телендә генә булған сингармонизм күренеше һаҡланған. 70-80 йәшлек ололар бөгөн дә ҙауыт, ҙәкиә тип һөйләшә.

Бөйөк телсе, Башҡортостандың тәүге филология фәндәре кандидаты Таһир Баишев төҙөгән диалектологик картала йылан ырыуы башҡорттары ла билдәләнгән. 1928 йылдан 1946 йылға тиклем башҡорт теле диалекттарын өйрәнеү маҡсатында 15 лингвистик экспедиция ойоштоpола. Хатта 1928, 1929 йылдарҙағы экспедицияларҙы СССР Фәндәр академияһының ағза-корреспонденты Н.К. Дмитриев үҙе етәкләй. Таһир Баишев тарафынан бына ошо экспедиция материалдарын эшкәртеп төҙөлгән карта 1955 йылда Мәскәү университетында нәшер ителгән "Башкирские диалекты в их отношении к литературному языку" тигән китабында бирелгән.

Ә ырыу исеме ниңә "йылан", ни өсөн ул ырыу йыландарҙы тотем итеп алған? Ҡасандыр, 2 меңме, 4 меңме йыл элек, ошо ырыу халҡына баҫҡынсылар һөжүм итә, һуғыш китә. Баҫҡынсылар ғәйәт күп була. Һуғыш барған ергә башҡорттарҙың ырыу башының 16 йәшлек улы ла ынтыла. Уны шул ерҙәрҙә йәшәүсе ҙур-ҙур йыландар һуғыш барған ергә ебәрмәй уратып ала. Ырыу һуғышсылары тар-мар ителә, ләкин ырыу тарҡалмай, сөнки халыҡ ырыу башының йыландар һаҡлап алып ҡалған улы тирәһендә туплана, үҙ ерҙәрен һаҡлап алып ҡала, шунда йәшәүен дауам итә.

Йыландарҙың аҡылы, һиҙгерлеге - ул иҫ киткес хәл. Минең менән дә бер саҡ ошондай хәл булды. Баҡсамда кемдер ырғытҡан ҙур пластик шешә эсенә туҙбаш йылан инеп ятҡан. Улым шуны һауыты-ние менән алған да ҡайтҡан. Улымды "Нишләп уны йәшәгән урынынан алып ҡайттың?" тип шелтәләнем дә, икенсе көнөнә йыланды тағы баҡсама алып киттем, бүтән былдай тотҡонлоҡҡа эләкмә, тип, уны шешәнән сығарҙым. Яҙын баҡсала эшләп йөрөгәндә арып китеп, йөҙтүбән ергә ятып торҙом да, башымды ҡалҡытһам, бер метр ҙа юҡ арала әлеге йыланым ерҙән бер-ике ҡарыш башын күтәреп, миңә ҡарап ята. Шуныһына иғтибар иттем: күҙенең ҡараһы бүтән күп хайуандарҙыҡы кеүек вертикаль түгел, ә түп-түңәрәк. "Ә, һаумы, иҫәнләшергә килдеңме? Нисек ҡышланың?" - тинем уға. Шулай бер-беребеҙгә ҡарашып, бер аҙ ваҡыт уҙғас, ул шыуышып китеп барҙы. Иғтибарлабыраҡ ҡараһам, йыланым ҡауын һалып киткән икән. Мин шуны күреп алмағас, күрһәтергә, иғтибар иттерергә килгәндер, күрәһең.

Йыландарҙың аҡыллылығы, һиҙгерлеге тураһында мин ошондай мәҡәлә уҡығайным. Уны афған һуғышында булған бер рус кешеһе яҙған. Бер взвод совет һалдаттары тау башында оборонала ята. Бер һалдат һауыт алып, тауҙан аҫта ағып ятҡан йылғаға һыу алырға төшөп китә. Йыуынып, һауыттарына һыу алып, тауға менә башлаһа, быны йыландар уратып ала. Ыҫылдашып тик ята былар. Күпмелер ваҡыт үткәс берҙәм генә таралышып шыуышып китәләр. Һалдат тауға күтәрелә һәм аптырап ҡала: ҡалған һалдаттарҙың барыһын да дошмандар һуйып киткәндәр. Баяғы йыландар был егеттең ғүмерен һаҡлап ҡалған, тимәк.

Шулай итеп, әле йылан ырыуы башҡорттары йәшәгән Баҡалы, Илеш, Краснокама, Дүртөйлө, Бәләбәй, Саҡмағош, Йәрмәкәй, Шаран райондарындағы халыҡ үҙҙәренең йыланлылар икәнен белә. Ни өсөн ата-бабаларының йыланды тотем итеп алыуҙары тарихын да беләләр. Тарихи хәтер ул ҡәҙәре үк юйылып бөтмәгән әле. Мин элегерәк Ҡариҙел, Аскын, Борай районындағы туғандарға йыш барып йөрөй инем. Бабайҙарым "Ана, беҙҙең беҙҙең ысын башҡорт ҡыҙыбыҙ килгән", тип ҡаршылар ине. Телдәренең татарсараҡ булыуына ишаралап, мин дә шаяртам:"Татар бабайҙарыма килдем шул", тигән булам. Шунан тегеләр гөлтләп тоҡанған булып китерҙәр ине: "Юҡ, балам, беҙ татар түгел. Беҙ ер хужалары, төп башҡорттар, диалект телебез генә шулай беҙҙең", тиерҙәр һәм миңә тарих һөйләй башларҙар ине. Иншалла, ул төбәктәрҙәге тарихи хәтер йәш быуында ла уяныр. Ана ҡалай дәррәү килеп Шәжәрә байрамдары үткәрә башлағандар был төбәктәрҙә. Йылан ырыуы башҡорттарының оҙон-оҙаҡ ултырып һөйләй торған тарихы бар. Ул тарих мотлаҡ һөйләнер.

**Сәимә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА.**

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# "Ҡатыныңды рәнйетмә!" - Бәйғәмбәрҙең васыяты был

**(Дауамы. Башы 6-сы биттә).**

Бөгөнгө заман ирҙәренең яман ғәҙәте бар, улар бер төркөм дуҫтарын өйөнә эйәртеп ҡайтып, табын ҡороп, шау-гөр килеп гәпләшеп ултырырға ярата. Был мәлдә ҡатыны менән ҡыҙына өй тулы ир-атты һыйларға тура килә. Замана ҡатын-ҡыҙҙарының күлдәге лә башлыса асыҡ-ярыҡ модала тегелә. Уларҙың шундай күлдәктә ситят алдында йөрөүе ирҙең үҙенә лә оҡшамаясаҡ.

Ҡатыныңа кейем-һалымға аҡсаны сикләмә, саманан тыш күп әйбер һатып алырға ла ғәҙәтләндермә. Уға күңеле теләгән кейемде ҡасан теләй, шул ваҡытта һатып алырға мөмкинселек бир. Хәҙистә лә: "Ғаиләң өсөн сарыф иткән аҡсанан мең тапҡыр бүләк алырһың", тиелә.

Ҡатынды спиртлы эсемлек һатыуҙан, кеше талап йәки урлап алынған аҡсаға ашатып-эсереү, кейендереү гонаһ. Ислам дине таралғанға тиклем үк әле ҡатын-ҡыҙҙар алыҫ ерҙәргә эшкә юлланған ирҙәренә тыйылған юл менән аҡса тапмауҙарын, ундай аҡсаға бүләк һатып алмауҙарын үтенгән. Сөнки улар баҡыйлыҡҡа киткәс, гонаһ өсөн тамуҡ утында ғазапланып янғансы, фани донъяла ярлылыҡта йәшәүҙе хуп күргән.

Берәй хилафлығы өсөн ҡатындың битенә һуғыу дин тарафынан ҡәтғи тыйыла. Ғөмүмән, "Һин һиңә ир, мин ғаилә башлығы", тиеп, ҡатыныңды йәберләмә. Бәйғәмбәр ирҙең хәләл ефетен физик йәберләүен тыя. Гүзәл заттың тәне аҙ ғына ла йәрәхәтләнергә тейеш түгел, ти.

Күңелһеҙ ваҡиғалар тураһында иҫенә төшөрмә, юҡҡа-барға тәнҡитләмә, эштән бик арып ҡайтһаң да ҡатыныңа иғтибарлы бул. Уның үтенестәрен ғәмәлгә ашырасағыңа ышандыр.

Көнкүрештәге ваҡ мәсьәләләргә (мәҫәлән, аш-һыу әҙерләү, фатирҙы йыйыштырыу һ.б) ҡыҫылмай, мөһим эштәр менән шөғөлләнергә тырыш. Хужабикә булараҡ, йортта ни теләй, шуны үҙенсә эшләргә мөмкинлек бир, бик кәрәк булғанда ғына тәнҡитләп ал.

Ҡатының иркәләүеңде, үҙенә генә иғтибар бүлеүеңде теләһә, асыуланма. Асыуланыу аҡылды томалай, яуызлыҡҡа юл аса. Иң сетерекле хәлдәрҙә лә, айырылашайыҡ, тимә, был һүҙҙе үҙ-ара мөнәсәбәттәр киҫкенләшкәндә генә әйтергә мөмкин. Сығырынан сығыр сиккә еткәндә лә үҙен лайыҡлы тота белеүе - ирҙәрҙең яҡшы сифаттарының береһе.

Өҫ-башың һәр саҡ бөхтә булһын.

Күп нәмәләрҙе ҡатының менән кәңәшләшеп эшлә.

Уның туғандарын яҡшы һүҙ менән генә иҫкә ал. Уларҙы яманлау - гонаһ, яманлашыу аңлашылмаусанлыҡҡа килтерә.

Ирҙәргә күп ҡатын алырға ярай, тип уның алдында башҡа ҡатын-ҡыҙҙарға текләп ҡарама. Күп ҡатын алыу Шәриғәт ҡанундары сиктәрендә билдәле бер шарттарҙа ғына рөхсәт ителә.

Эштән мин генә арып ҡайтам, тип уйлама, бигерәк тә яңы өйләнешкән мәлдәрҙә шулай тип мыжыма. Ғаиләнең тарҡалыуына ҡайһы саҡта ҡатынына көс позицияһынан ҡараған йәки бөтөнләй йомшаҡ характерлы, ихтыярһыҙ ирҙәр сәбәпсе була.

Ҡатыныңдың ҡулынан килмәҫтәй эштәрҙе үтәүен талап итмә. Уның әхләки йөҙөн юғалтмауына иғтибарыңды бүл.

Матурлығын мәҙәни-әхләки кимәленең юғарылығы менән баһала, тышҡы йөҙөнөң матурлығынан кәмселектәр эҙләмә.

Башҡалар алдында уның намыҫын яҡларға тырыш, сөнки ҡатын-ҡыҙ ирҙең был тормоштағы иң ҡиммәтле байлығы.

*✓ Яҙылған шиғырымдан ҡәнәғәт булһам, башҡа яҙмай торам. Ҡәнәғәтһеҙлек тойғоһо тыуғас ҡына, яңы әҫәр яҙырға һәләтле икәнемде тоям.*



**Эйе, Баймаҡ районының Буранбай ауылында тыуып үҫкән шағир, Шәйхзада Бабич исемендәге республика йәштәре премияһы лауреаты Рәйес ТҮЛӘКОВ та Өфөлә донъя ҡуйҙы. Ижад итеү - бик ҡатмарлы процесс. Хыял донъяһына ижадсы яңғыҙ ғына сәфәр ҡыла. Ғөмүмән, ижад шаһиттарҙы, күҙәтеүселәрҙе, бигерәк тә цензураны, тышҡы баҫымды өнәп етмәй - тик намыҫы ғына уға тоғро юлдаш була. Беҙ, ана шул ижадтың өлгөрөп еткән емешен татып ҡарағандар, ижадсы тураһында нимә беләбеҙ һуң? Ижадсының күңел төбөндә ниндәй кисерештәр һаҡлана? Уларҙы, әлбиттә, әлеге лә баяғы, ижадсы үҙе генә белә. Вафаты алдынан бер-нисә ай элек шул кисерештәренең аҙмы-күпмеһе тураһында беҙҙең менән дә уртаҡлашҡайны ул. Әңгәмәһен генә түгел, "Китап" нәшриәтендә баҫылып ятҡан китабын да күрә алмай, яҡты донъя менән хушлашты шағир. Ләкин шағирҙарҙан йыр ҡала, ижад гәүһәрҙәре ҡала. Һүҙ - Рәйес ТҮЛӘКОВҡа.**

# ШАҒИРҘАР БИТ

## ҡалаларға килеп үләләр...

### ШАҒИР БУЛЫУ ТҮГЕЛ, ШИҒЫР ЯҘЫУ ҠЫУАНЫС

"Ағиҙел" журналында Назар Нәжми: "Мин үҙемде шағир тип иҫәпләмәйем",- тип яҙып сыҡҡайны. Ул Рауил Бикбаевтың "Үҙеңде шағир тип иҫәпләмәйенсә, шиғыр яҙып булмай", тигән һүҙҙәре менән бәхәскә лә ингәйне. Ысынлап та, нимәгәлер ныҡ итеп ышанмайынса, уға тотоноп булмайҙыр ул. Үҙеңдең шағирлек һәләтеңә, шиғыр яҙа алыу һәләтеңә тулыһынса ышанмай тороп, һинән бер нәмә лә килеп сыҡмауы бар. Ә "шағир" тигән һүҙ - ул бары тик ярлыҡ ҡына. Мине, мәҫәлән, шағир тип әйтеү-әйтмәүҙәре мөһим түгел. Ә бына һәйбәт шиғыр яҙһам һәм уның ысынлап та шулай икәненә ышанһам, күҙ алдына килтергән төҫтәрҙең бөтәһен дә ҡуллана алдым, тип уйлаһам, ныҡ шатланам, ысын ҡыуаныс кисерәм.

### БАҺАЛАУҒА ҠУРҠЫП ҠАРАЙЫМ

Был ҡыланыу түгел. Яҡшы яҡҡа баһалауҙың кешене ойотоуын үҙ елкәмдә татығаным бар. Баһалауға ыңғай ҡараштамын, тигән кешеләр түбәнге аң кимәлендә тыныслана, ойой. Хуплау кешелә: "Әһә, мин маҡсатыма ирештем",- тигән хата фекер уята. Кеше хуплау өмөт итеп яҙһа ла, теләге ҡабул булғас, тыныслана. Ҡурҡыныс был. Башҡа алға барыр юлы юҡ, тимәк. Паскаль:"Кешенең иң бәхетле мәле бәхет хаҡында хыялланған һәм уға ынтылған мәле. Күҙаллаған бәхетеңә ирешкәс, ул ябай ҡәҙимгелеккә әйләнә", тигән. Яҙылған шиғырымдан ҡәнәғәт булһам, башҡа яҙмай торам. Ҡәнәғәтһеҙлек тойғоһо тыуғас ҡына, яңы әҫәр яҙырға һәләтле икәнемде тоям.

### СОЦИАЛЬ ҺӘЛМӘКЛЕК

Бик күп йылдар элек махсус рәүештә "Һәнәк" журналы өсөн шиғырҙар яҙғайным. Ҡол-Дәүләт мәрхүм уларҙы уҡып, ихлас көлгәйне (Бәлки, ул минең шиғырҙарҙан көлгәндер?)Үҙемдең самалау менән улар журналда баҫылғандай кеүек ине. Редакцияла миңә: "Ҡыҙыҡ шиғырҙар, ләкин социаль нагрузкаһы юҡ",- тинеләр. Ысынлап та, совет осорондағы социалистик реализм алымы социаль яҡтан һәлмәк әҫәрҙәр талап итте. Ошо тенденция башҡорт шиғриәтендә әле лә өҫтөнлөк итә. Мәҫәлән, татар шиғриәте ул яҡтан күпкә ирекләрәк һәм социаль көсөргәнешкә түгел, ә ябай кеше күңелендәге һиңылыштарға урынды күберәк бирә.

### ШИҒЫР НИСЕК ТЫУА?

Күңелде быуып торған кәртәләр емерелгән ваҡытта яҙам мин шиғырҙы.Чехов:"40 йәшкә тиклемге ғүмерен кеше бәләкәй саҡта ата-әсәһе, өлкән туғандары һеңдергән комплекстар менән көрәшеп үткәрә",- тигән. Кеше ҡаршылыҡтарға, ҡыйынлыҡтарға күберәк осраған һайын, йәшәүгә ынтылышы ла нығый. Ҡырҡ йәшкә тиклем ул ана шул комплекстарҙан арына. Әгәр ҙә үҙ өҫтөндә эшләһә, әлбиттә. Шул эске цензор, кәртәләр емерелгәндә әйтелмәйенсә күңелдә йыйылып килгән һүҙҙәр тойғоға күмелеп, ҡапыл йырылып китә лә, шиғыр тыуа. Күбеһенсә яңғыҙым уйланып ултырған саҡта була ул. Екатеринбург драматургы Николай Коляда:"Мин пьеса яҙыр алдынан түшәмгә ҡарап уйланып тик ятам",- ти. Уның кеүек аҙналар буйы уйланып ятҡаным юҡ, әлбиттә. Ләкин шиғыр тыуһын өсөн күңел тынлыҡ менән бәйләнешкә инеүе мөһим. Шул саҡта күңел елкенә башлай һәм шиғыр тыуа. Төндә килә, ғәҙәттә, бындай елкенеү. Әле йәшәп ятҡан Өфө ятағы бүлмәһенән дә тыныс урын юҡ бөгөнгө көндә. Сөнки ҡайҙа китте, шунда ултырып яҙа алмайым. Күңелгә ятышлы урын кәрәк. Тағы ла бер хикмәт бар: яҙыр алдынан өйҙө тәртипкә килтереп алам, шунһыҙ яҙырға ултыра алмайым. Бала саҡтан ҡалған ғәҙәттер ул. Иҫ белгәндән дүрт апай өйҙө шул тиклем таҙа тотто, ҡаныма һеңгән ул тәртип тигән нәмә.

### ЗАКАЗНОЙ ШИҒЫРҘАР

Заказ буйынса яҙған шиғырҙарым да бар. Башта улай мөмкин түгелдер, тип уйлай торғайным. Президент һайлауҙары алдынан "Йәшлек" гәзитенең ул ваҡыттағы мөхәррире Ғималетдин Яруллин Сибайға шылтыратты:"Тиҙ арала шиғыр менән тамамланған мәҡәләң кәрәк, президент һайлауҙары алдынан сығыштарҙы шулай башларға уйлайбыҙ",- тине. Тыныс аҡыл менән ултырып шиғыр яҙҙым. Уйлап яҙылған шиғыр яһалма була, тиҙәр. Бер ҙә яһалма түгел. Ысынлап та, күңел төбөндә ниҙәр бар, шуларҙы уйлап яҙҙым. Шиғыр баҫылып сыҡты. Халыҡ исеменән, халыҡ наказы формаһында яҙылғайны ул. Региональ, төбәк-ара гәзиттәрҙә баҫылып сыҡты, бер нисә район гәзитендә лә донъя күрҙе. Президентты ҡаршы алғанда һөйләнеләр, сәхнәләрҙән уҡынылар.

### ТОРМОШТАҒЫ ОБРАЗ ШИҒЫРҒА КҮСӘ

Тормошта берәй образлы ваҡиға күрһәң, ул күңелдә оҙайлы ваҡытҡа һаҡланып ҡала. Сөнки бөтә нәмәгә лә ябай итеп, натуралистик ҡараш менән ҡарай алмайым. Булмышым икенсе.

Бер көн телевизорҙан "Хайуандар доньяһында" тапшырыуын ҡарап ултырғанда гепардтың һунар итеүен күрһәттеләр. Ул бөтә көсөн, ихласлығын һалып табышын тотто. Ййлатып күрһәтелгән кадрҙарҙа уның табышын нисек ҡыуып тотоуы бигерәк тә һуш киткес итеп күрһәтелә. Гепардтың һығылмалы тәне, табышына тартыштым уны шиғырым менән.

### БЕРЕНСЕ ШИҒЫРЫМ

Бишенсеме, алтынсымы класта уҡығанда әҙәбиәт дәресенән шиғыр яҙып килергә ҡушып ҡайтарҙылар. Өйгә эште эшләргә ултырғас, иҫкә төштө. Бер ниндәй тулҡынланыуһыҙ (бәлки, тулҡынланғанмындыр ҙа) ултырҙым да яҙҙым. Үҙем пионер булғас, пионерияның биографияһы тураһында яҙҙым үҙ ғүмеремдәге тәүге шиғырҙы. Икенсе көндө дәрестә класташтарым өйҙә яҙып килгәндәрен уҡый башланы. Миңә уңайһыҙ булып китте. Сөнки мин шиғыр яҙып килгәнмен, ә иптәштәремдеке таҡмаҡҡа тартым. Ояла-ояла ғына уҡыным шиғырымды. Хәтерләүемсә, насар уҡ түгел ине ул. Уҡытыусы ситкә ҡарап, уйға батты. Бер ни өндәшмәй. Класташтарым да шып-шым. Мин бөтөнләй хафаға ҡалдым. Бөтәһе лә шым ғына минән көләләр һымаҡ. Ҡапыл уҡытыусы плагиатлыҡ, әҙәби ҡараҡлыҡ тураһында һөйләй башла-

Лед на проводах".

Көй шул тиклем тәьҫир итте, шаҡ ҡаттым да ҡуйҙым. Сибәр ҡыҙ осратҡанда ла йөрәк улай елкенмәҫ. Фалиж һуҡтымы ни! Ярай, индек, ашаныҡ-эстек. Миндә тамаҡ ҡайғыһы юҡ. Хужаларҙың малайына ла оҡшайҙыр инде, шул бер көйҙө ҡабатлап ҡуя ла ҡуя. Шул хәтлем бирелеп тыңлайым, хатта күҙ алдына килтерә алмайым: нисек инде, көй бында ҡала, ә мин сығып китәм. Төшкө ашты ашағас, төпкө бүлмәгә сығып, тыңлай башланыҡ яңы көйҙө. Бергә килгән Хәсән тигән егеттең ҡолағына шыбырлайым:"Урлайым пластинканы",- тим. Теге өндәшмәй. Шундай хәлдәмен, урлашмайынса һис мөмкин түгел. Пластинка әйләнеп бөткәйне генә, алып тиҙ генә эскә тыҡтым да ҡуйҙым. Үҙем бер ғәйепһеҙ кеше ҡиәфәтендә ултырған булам. Сөнки башҡаса мөмкин түгел, мин пластинканан айырылып ҡайта алмайым. Йыр тыңлар өсөн Аҡморонда ҡалып булмай бит инде! Хужа малай сығып,



***Халыҡта шиғриәткә ихтыяж бөтмәҫ ул, мине икенсе нәмә борсой: шағирҙар бөтмәҫме икән? "Донъяны матурлыҡ ҡотҡарыр",- тип ҡабатларға яратабыҙ ҙа ул, матурлыҡтың үҙен кем ҡотҡарыр икән? Бөгөн драма, проза әҫәрҙәренә ихтыяж һиҙелә. Ҡыҙғаныска ҡаршы, поэзия тураһында быны әйтеп булмай. Прагматиктар заманында романтик булыу, шағир булыу еңел түгел. Ысын булһа, бөгөн Америкала шағирҙарға иғтибар артҡан. Саҡ ҡына шиғыр яҙырға һәләте булған кешене унда берәй фирма үҙ ҡанаты аҫтына ала икән. Шағир булғаны өсөн түгел, шиғыр яҙа белгәне өсөн түләйҙәр икән уларға. Беҙҙә шағирҙар, кирәһенсә, ситләтелә. Юҡ кимәлендә улар бөгөн. "Литературная газета" һуңғы осорҙа шағирҙарҙың күпләү үлеүе тураһында яҙып сыҡты. Репрессиялар осоронда ла ундай уҡ күп һәләк булмаған улар.***

шланыуы иғтибарҙы йәлеп итә. Ләкин тәғәм итә алманы табышын, гиендар тартып алды. Баҡһаң, ҡырағай эт тоҡомдары үҙҙәре баҫтырып тота алмай, ә күмәкләп башҡаның табышын тартып алырға эшкинәләр. Ҡарап ултырғанда: "Бәй, тормошта ла йыш ҡына шулай була бит",- тип уйлап ҡуйҙым. Салауат Әбүзәровҡа арналған шиғырҙа мин шул күренеште файҙаландым. Мин уға, гепард кеүек, талантыңа таянып тапҡан табыш-шиғырҙарыңдан яҙма, тигән фекер әйттем:

"Тик матурлыҡ көҫәп юлға сыҡҡан
Бысраҡлыҡтар күреп өркөрмө?
Табышыңдан яҙма, дуҫым, ышан.
Байрам булып китер бер көндө,
Байрам булып китер бер көндө", - тип өмөтләндерергә

ны. Эш бының менән генә бөтмәне. Дәрестән ҡайтҡас, өлкән апайым мине:"Һин Рәшит Ниғмәтиҙең "Коммунист" тигән шиғырын үҙгәртеп яҙғанһың",- тип әрләне. Нахаҡты күтәрә алмайынса, ҡабат шиғыр яҙмаҫҡа вәғәҙә бирҙем үҙемә. Ләкин хеҙмәттән ҡайтып, ғашиҡ булғас, антымды боҙорға тура килде.

### СИНИЙ-СИНИЙ ИНЕЙ...

Үҙ ғүмеремдә бер тапҡыр урлашырға тура килде миңә шулай ҙа. Сөнки урлашмайынса булдыра алманым. Туғыҙынсыла уҡығанда Аҡморон ауылы тирмәненә он һалдырырға барҙыҡ. Төшкө тамаҡҡа бер ят кешеләргә барҙыҡ. Өйгә инер алдынан уҡ бер көй ҡолаҡҡа салынды:

"Синий-синий иней.

пластинканы эҙләй башланы. Әле генә шуларҙың сәйен эстем бит, шул тиклем уңайһыҙ. "Егеттәр, бирегеҙ пластинканы. Кем алды?"- тип мыжый. Беҙ күмәкбеҙ. Өндәшмәйбеҙ. Арабыҙҙағы олораҡ ағай: "Егеттәр, ҡуй, бирегеҙ, уңайһыҙ бит",- ти. Мин бер нәмә лә булмағандай, тирәяҡҡа ҡаранып ултырған булам. Бер тамсы ла ҡурҡыу юҡ, ояты ни тора! Үкенә башланым. Ләкин һуң, артҡа сигенер урын юҡ. Шым ғына сығып киттек. "Йыр тыңларға кил",- тигән булам Хәсәнгә. Ҡайтҡас, шул тиклем йырҙы тыңлағы килә, ләкин ҡурҡыта. Әсәйем бөтәһен дә беләләр кеүек. Пластинканы иплəп кенә мендәрҙәр араһына тығып ҡуйҙым. Кис ҡараһам, пластинка урталай сатнаған, ҡабат уйнатыуға эшкинмәй ине. Шул

*✓Кешенең аң, белем даирәһе киң булһа, ижадында туранан-тура сағылыш таба. Аҙ уҡыған, белемен камиллаштырмаған кешелә тема тарлығы, бер ҡатлылыҡ шунда уҡ үҙен һиҙҙертә.*

# АУЫЛДАРҘА ТЫУА,

вакиға иҫкә төшкән һайын, уңайһыҙ булып китә. Хужа малай алдында ғәфү үтенгем килә.

## "ҠАШМАУ" ПОЭМАҺЫ

Һәр әҫәр үҙенсә тыуа. "Ҡашмау" поэмаһының да үҙ тарихы бар. Бер көн Рауил ағай Бикбаев: "Берәй дуҫыңды ал да, баҡсаға барып ярҙамлашығыҙ әле",- тине. Рәмил Ҡол-Дәүләт менән икәүләп барҙыҡ. Эш араһында төрлө темаға һөйләшеп йөрөнөк. Бигерәк тә башҡорттарҙың йәшәү рәүеше, көнитмеше тураһында уйландыҡ. Бергәләп өҙгөләндек. Оҙаҡ та үтмәй, минең "Ҡашмау" поэмаһы баҫылып сыҡты, шунан Рәмил мәрхүмдең "Быуа"һы, Рауил ағайҙың "Система"һы донъя күрҙе. Шуныһы ҡыҙыҡлы: өсөбөҙҙөң поэма ла образлы һәм башҡорт халҡының аянысլы яҙмышын аса. Рауил ағай дауахана ла ауырыуҙарға ҡуйылған системанан башлап китә лә, ғөмүмән, тормош системаһы тураһында яҙа. Рәмил мәрхүмдең "Быуа"һы ла халҡыбыҙҙың аянысլы хәлен һүрәтләй. Тормош системаһының халыҡ юлына быуа быуып, уны ағыулауын тасуирлай. "Ҡашмау" поэмаһында ла башҡорт яҙмышы бәйән ителә. Өс поэмала ла төп образ - башҡорт халҡы. Рауил ағай менән Рәмил мәрхүм ҡайҙа һәм нисек яҙғандарҙыр, белмәйем, мин Трускавец ижад йортонда яҙҙым. Яҙыуын-яҙҙым, уҡып ишеттерергә кеше юҡ. Өфөгә ҡайтҡас та Әхмәр Үтәбай йәшәгән ятаҡҡа юлландым. Әмәлгә күрә, Рәмил менән Ғәбиҙулла мәрхүмдәр ҙә шунда ултыра ине.Килеп ингәс, һаулыҡ һорашып та тормайынса, ишек төбөндә тороп уҡыным поэманы. Минең сәйер ҡылығым аптыраттымы, поэма оҡшанымы, тын да алмай тыңланылар. "Дә-ә, Рәйес, ағайҙар рәтенә баҫтың былай булғас",- тине Рәмил. Ҙур маҡтау итеп ҡабул иттем һүҙҙәрен.

## ФОРМАМЫ, ЙӨКМӘТКЕМЕ?

Һәр яңы әҫәрҙең яралғыһы - идея. Йөкмәтке иһә, төрлө урындан йыйыла. Күңелдә ярала башлаған әҫәрҙе, әлбиттә, матур һауыҭҡа-формаға һалып бирер кәрәк. Һауытҡа һалғас та, әҙер әйберҙе матур итеп алып килеп, өҫтәлгә ҡуйыр кәрәк бит әле. Форма ла, йөкмәтке лә - икеһе лә мөһим. Форма менән йөкмәткенең берлеге тураһында һөйләргә ярата-лар. Быны менән мин бөтөнләй ризалаша алмайым. Мәҫәлән, трагик йөкмәткене көлкөлө стилдә биреү - үҙе мәсхәрә. Йөкмәтке менән форма араһындағы бәйләнеш хаҡында һүҙ йөрөтөргә мөмкин, тик берлек тураһында түгел. Мәҫәлән, күҙ йәштәре аша көләү көслө рухлы ижадсылар өсөн хас.

## УҠЫУ КӘРӘК, УҠЫУ КӘРӘК

Шиғыр яҙыу өсөн дә махсус белем кәрәк. Кешенең аң, белем даирәһе киң булһа, ижадында туранан-тура сағылыш таба. Аҙ уҡыған, белемен камиллаштырмаған кешелә тема тарлығы, бер ҡатлылыҡ шунда уҡ үҙен һиҙҙертә. Башта ул һәләтенә, хатта талантына таянып яҙа, ләкин, ниндәйҙер бер кимәлгә еткәс, үҫеш туҡтай. Элек былдай юғары талаптар булмағандыр ҙа, бәлки. Ләкин бөгөнгө әҙерлекһеҙ ижадсы үткәндәрҙе ҡабатлап, бер ниндәй яңылыҡ асмаясаҡ. Артыҡ күп уҡыу (дөрөҫөрәге, һайлай белмәй уҡыу) ҙа зыян килтереүе бар. Бөтә уҡығанды үҙеңә һеңдереп, үҙ тауышыңды юғалтыу ихтималлығы бар.

## "ЗӨЛХИЗӘ" ПОЭМАҺЫН ЯҘҒАН АҒАЙ

Минең шиғырҙар сәхнәнән уҡый торған шиғырҙар түгел. Сәхнәнән юморға ҡоролған шиғырҙарҙы уҡыу отошло. Тәрән образлы шиғырҙарҙы сәхнәнән уҡып булмай. Уҡыған хәлдә лә, тыңлаусыларҙың ҡайһы берҙәренең аңламауы мөмкин. Әҙәби әҙерлеге, шиғри зауығы булған кеше генә ҡабул итә уларҙы. Әҫәрҙәрем, тәү ҡарамаҡҡа, яңғыҙ уҡыусы өсөн яҙылғас, популяр булмауы ла мөмкин һымаҡ. Бакһаң, улай түгел икән. Бер ҡыҙыҡлы хәл гел иҫкә төшә. Ейәнсура районының Ибрай ауылында булырға тура килгәйне. Рамзайҙа (Рамаҙан Ҡолмөхәмәтов - шағир) туҡтағайным. Өйгә егеттәр йыйылды ла китте. Ауылда:"Зөлхизә" поэмаһын яҙған ағай килгән",- тигән хәбәр таралған икән. Шунан алда ғына, ысынлап та, поэманың бер нисә бүлеге баҫылып сыҡҡайны. Егеттәр менән клубҡа йыйына башланыҡ. Ҡараһам, минең куртка юҡ. Клубтан барып алып килделәр. Беҙҙән алда сыҡҡан егеттәрҙең береһе кейгән булған. "Зөлхизә" поэмаһын яҙған ағайҙың курткаһы",- тип маһайып йөрөй икән.

## МАТУРЛЫҠТЫ КЕМ ҠОТҠАРЫР?

Халыҡта шиғриәткә ихтыяж бөтмәҫ ул, мине икенсе нәмә борсой: шағирҙар бөтмәҫме икән? "Донъяны матурлыҡ ҡотҡарыр",- тип ҡабатларға яратабыҙ ҙа ул, матурлыҡтың үҙен кем ҡотҡарыр икән? Бөгөн драма, проза әҫәрҙәренә ихтыяж һиҙелә. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, поэзия тураһында быны әйтеп булмай. Прагматиктар заманында романтик булыу, шағир булыу еңел түгел. Ысын булһа, бөгөн Америкала шағирҙарға иғтибар артҡан. Саҡ ҡына шиғыр яҙырға һәләте булған кешене унда берәй фирма үҙ ҡанаты аҫтына ала икән. Шағир булғаны өсөн түгел, шиғыр яҙа белгәне өсөн түләйҙәр икән уларға. Беҙҙә шағирҙар, киреһенсә, ситләтелә. Юҡ кимәлендә улар бөгөн. "Литературная газета" һуңғы осорҙа шағирҙарҙың күпләү үлеүе тураһында яҙып сыҡты. Репрессиялар осоронда ла ундай уҡ күп һәләк булмаған улар.

## ШАҒИРҘАР АУЫЛДА ТЫУА

Үҙемде ауыл шағиры, тип һанайым. Ғөмүмән, ҡала шағирҙары бармы икән? Әнғәм Атнабай әйтмешләй:

"Шағирҙар бит ауылдарҙа тыуа,
Ҡалаларға килеп үләләр."

Ауылда йәшәгәндә тормош мәшәҡәттәренән бушап булмай. Шиғырҙарымдың күбеһе ҡалала яҙылды. Тауыҡ йоморҡа һалыр өсөн ышыҡ урын эҙләгәндәй, ижад кешеһе лә ижад итеү өсөн ҡулай урын эҙләй. Ауылда һәр кем иғтибар үҙәгендә, күҙ алдында. Башҡалар кеүек йәшәһәң, шағир булып булмай. Ситләтеп ҡарай башлайҙар шунда уҡ. Ә ҡалала эштән һуң, Диоген мискәһенә ҡасҡан кеүек, ижад итәһең.

**Радик ӨМӨТҠУЖИН яҙып алды.**

---

*ШУЛАЙ ИКӘН...*

## ЯҘМЫШҺЫҘ ЙӘН БУЛМАЙ...

**Дәрес ваҡытында йыш ҡына тәҙрәгә яҡын ағастың бер ботағынан икенсеһенә ҡунған ҡоштарҙы күҙәтергә ятабыҙ. Урамға сыҡҡы килә. Тәнәфестә синыфташыбыҙ Ғүмәрҙең бөгөн мәктәпкә килмәүенә борсолабыҙ, сөнки дәрестән һуң икенсе синыфтағы малайҙар менән футбол уйнарға тейешбеҙ. Ғүмәр беҙҙең команданың ҡапҡа һаҡсыһы. Уның юҡлығынан барыһы ла асыулы, кәйефһеҙ йөрөй.**

- Килмәгәс килмәне инде, тимәк Яҙмыш,- тинем уларҙы тынысландырырға тырышып.

- Ниндәй Яҙмыш булһын, ти, һәләкәт был,- тип ярһый малайҙар.

- Бер ниндәй ҙә һәләкәт түгел, бәләкәй генә етешһеҙлек,-тием тыныс ҡына.

- Уның ниндәй айырмаһы бар?

- Һеҙ аңламанығыҙ, мин барыһы ла алдан билдәләнгән Яҙмыш тураһында һөйләйем. Быны хәҙер йәки иртәгә беҙҙең менән ни булырын беребеҙҙең дә алдан белмәүебеҙ тураһында әйтәм. Беҙ алдан ниҙер планлаштыра алабыҙ, ләкин Аллаһы Тәғәлә барыһын да белә һәм бөтә нәмә Уның ихтыяры буйынса эшләнә. Әгәр беҙ Алла, Изге китап, фәрештәләр, бәйғәмбәрҙәр һәм Хөкөм көнө барлығына ышанабыҙ икән, Яҙмышҡа ла ышанырға тейешбеҙ. Беҙҙең менән ни булырын, йә булмаҫын Аллаһы Тәғәләнең белеүе - тәҡдир тип атала. Һәр кешенең үҙ тәҡдире, үҙ яҙмышы була.

-Тимәк Ғүмәрҙең килмәүе лә яҙмышмы?

-Әлбиттә.

-Ул килергә тейеш ине, ләкин Алла уның килә алмаясағын белгән. Ғүмәрҙең ниндәй ғәйебе бар икән?

-Беҙ бит ғәйеплеләрҙе эҙләмәйбеҙ. Ғүмәр футболда ҡатнашыр өсөн ҡулынан килгәндең барыһын да эшләне, ләкин вакиғалар ағышы Аллаһы Тәғәләнең ихтыярына буйһонған да ул килә алмаған. Яман менән яҡшы барлығын һәм һәр кешенең һайларға хоҡуҡлы булыуын да белергә тейешбеҙ.

- Ҡыҙыҡ. Имтихандағы һымаҡ. Билет һорауҙарына яуап биреп, ниндәй билдә ҡуйылырын көтөп йөрөгән кеүек...

- Шулай. Ләкин имтиханға әҙерләнмәй барып насар билдә алыуҙы, яҙмыш менән бутарға ярамай...

- Ҡарағыҙ әле, күмәкләшеп ҡауҙылар осоп бара,- тип ҡысҡырып ебәрҙе Марат. - Көҙ һалҡынайҙы, моғайын улар йылы яҡтарға осоп китергә әҙерләнәләрҙер. Улар тиҙҙән ҡыш етерен һәм ер шарының ҡайһы тарафтарына осоп китергә кәрәклеген ҡайҙан белә икән,- тине ул моңһоуланып.

- Беләләр инде, ҡоштарҙың да яҙмышы бар, ғөмүмән был донъяла һәр йән эйәһенең тәҡдиренә яҙылған үҙ яҙмышы бар...

---

*ДАУАМ ИТЕП...*

# ӘЙТЕР ҺҮҘЕН...

## әйтеп китте

**Ауылдашым Рәйес менән 1979 йылда тәүләп баш ҡалаға аяҡ баҫтыҡ. Көнө-төнө шиғыр утында яндыҡ. Рәйес бигерәк ныҡ дөрләне. Төн уртаһында төрткөләп уята ла, яңы ғына яҙған шиғырын уҡырға тотона. Тыңлап бөтөп, яҙғанына ҡарата фекереңде ишетмәйенсә, кире ятҡырмай. Яҙға табан бер көн ҡайтып инде лә: "Бөгөн "Совет Башҡортостаны" гәзитенә барып, Риф Тойғон, Аҫылғужа Баһуманов ағайҙар менән таныштым. Шағирҙар. Шиғырҙарымды уҡыттым. Аҫылғужа ағай шиғырҙарында "һәм" тигән һүҙҙе күп ҡулланаһың тип әрләне. Әле яҙғандарым бер ҡалын дәфтәр булды. Мостай Кәрим, Рауил Бикбаев ағайҙарға уҡытам да, әгәр ҙә улар ҙа "Һинән шағир сыҡмай", тиһә, ауылға ҡайтам да китәм. Ер һөрәм, күрше ауылда йәшәүсе бер һылыуға өйләнәм. Ауылда йәшәйем, күп итеп балалар үҫтерәм. Ҡабат "Өфө", тип ауыҙымды ла асмайым. Ағайҙар менән осрашҡанмылыр-юҡмылыр, Рәйес уҡыуын ташлап ауылға ҡайтып китте. Әммә бер йылдан тағы ла килде, был юлы Башҡорт дәүләт университетына уҡырға инде.**

**Бынан һуң Рәйес бик күп тапҡырҙар баш ҡаланан төңөлөп ҡайтып, бик күп тапҡырҙар кире килде. Сөнки ул бар булмышы менән шағир ине. Әҙәбиәткә кире ҡайтмаҫҡа килгән кеүек, Өфөгә лә әйләнеп ҡайтты. Рәйес Өфөгә, донъяға, әҙәбиәткә ауылдан ғына килмәне, ул беҙгә урта быуаттарҙан, халҡыбыҙ батырҙары Уралтауын, азатлығын бер кемгә лә бирмәй донъя шаңғыратып, йыһан сыңғыратып йәшәгән замандарҙан килде.**

**Килмәне, уны, ахырыһы, Тәңребеҙ үҙенең сикһеҙ ҡөҙрәте менән, Ваҡыт Машиналарына ултыртып беҙгә ебәрҙе. "Бар ҙа, ана, башҡорттарға әйт: "Нишләйһегеҙ? Үҙегеҙҙең ниндәй халыҡтың вариҫтары икәнлегегегеҙҙе оноттоғоҙмы ни?" тигәнде әйттерер өсөн ебәрҙе Тәңре. Шуға күрәлер ҙә, Рәйес был донъя ысынбарлығына ҡулайлаша алманы. Тырышҡан хәлдә лә булдыра алмаҫ ине. Ул үҙенең миссияһын - Тәңребеҙ йомошон үтәне һәм кире китте. Рәйестә боронғо башҡорттарҙың һынмаҫ рухы, бөгөлмәҫ ихтыяры йәшәй ине. Тик аҡсаға, мәрхәмәтһеҙлеккә ҡорола барған аяуһыҙ ысынбарлыҡҡа яраҡлаша беләме инде шағир. Беҙ уны һаҡлай алманыҡ һәм һаҡлай ҙа алмаҫ инек. Уның шиғырҙарын уҡығанда ҡулына ҡылысын, һөңгөһөн тотоп, ҡаршыһындағы меңәрләгән дошманын ҡырып алға табан барған яңғыҙ яугир күҙ алдына килә. Бер ҡулында һөңгөһө, икенсеһендә ҡылысы, тик ҡалҡаны ғына булманы шул ҡулында.**

**Һәр бер үлем фажиғәле, тиҙәр. Әммә Рәйестең арабыҙҙан китеүен фажиғә тимәҫ инем. Сөнки ул үҙ бурысын, Тәңребеҙ йомошон үтәп китте. Әйтер һүҙен әйтеп китте.**

**Бәндәнең йәне күпмелер ваҡыттан һуң донъяға сабый булып киренән ҡайта, тиҙәр. Кире ҡайтҡанда ла башҡорт булмышын һайлаһын ине шағир йәне.**

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**

**✓ Кемдең кемлеген, минеңсә, дүрт сифатына ҡарап билдәләргә мөмкин: белем кимәле, традицияларға тоғролоғо, рухиәтлек кимәле һәм намыҫ. Былар минең асыш түгел. Кешелек был хаҡта тарихи тәжрибәнән сығып күптән белә.**



# Уйланыуҙарым



**1 июль**

Шүлгәнташ мәмерйәһе - торғаны бер мөғжизә. Унның хаҡында күп нәмә беләм кеүек ине. Мәмерйәнең илаһи ҡөҙрәте хаҡында күп яҙҙым... Ә ул мин күҙ алдына килтергәндән дә ҡөҙрәтлерәк булып сыкты. Уның эске мөғжизәүи сере кеше психикаһын һәм уның эске рухи халәтен ҡуҙғытырға, асылын асырға ла һәләтле икән әле. Тетрәндем.

**18 ноябрь**

Миңә ҡалһа, демографик проблеманың социаль аспекттан тыш та сәбәптәре етерлек. Үҫешкән илдәрҙәге ҡатын-ҡыҙ ҙа әсә булыуҙан баш тартырға ғына тора. Нишләп улай һуң әле? Нәҫел үрсетеү - иң төп инстинкттарҙың береһе лә инде!

Балаһыҙлыҡ - үҙенсәлекле феномен. Тимәк, кеше үҙенең тәбиғи инстинктына "Юҡ!" тип әйтергә лә һәләтле. Төп инстинкттың юғала барыуы, күрәһең, тәбиғи процесс. Йәшәү шарттары яҡшыра, социаль институттар үҫешә барған һайын, кешеләр күләмгә түгел, сифатҡа - балаларҙы уҡытыу, тәрбиә биреүгә, матди яҡтан тәьмин итеүгә нығыраҡ иғтибар итә башланы. Хатта өсөнсө сорт тип аталған илдәрҙә лә тыуымдың кәмеүе ана шул хаҡта һөйләй.

Йәнә бер проблема алдыбыҙға баҫырға тора. Уныһы - бөгөнгө бай элитаның балалары. Уларҙың бөтә нәмәһе лә бар, хәстәрлекле нянялар, гувернантка, гувернерҙар уратып алған, һәр сөскөргәнен дауаларға әҙер докторҙар йүгереп тора. Улар донъя буйлап сәйәхәт итә, иң бай курорттарҙың пляждарында ла улар. Махсус мәктәптәрҙә уҡыйҙар, улар өсөн Европаның иң һыналған колледждарының ишектәре асыҡ.

Иң ҡурҡынысы шунда, бейек ҡоймалар, телекүҙәтеүҙәр ярҙамында йәмғиәттән арсаланған ошо балалар тиҙҙән беҙҙең араға килеп инәсәк. Ҡәҙимге кешеләр араһына улар ниндәй сүрәттә килер һуң? Был ябай һорау түгел. Тиҙҙән яҙмышыбыҙ ҡойма артында үҫкәндәрҙең ихтыярына бәйле буласаҡ.

Был яңы каста донъяны беҙҙеңсә һәм тәбиғи ҡабул итмәүе менән айырылып торасаҡ. Уларҙың йәшәү ҡиммәттәренә булған мөнәсәбәте беҙҙекенә оҡшамаған. Шул уҡ ваҡытта ҡулдарында иҫәпһеҙ мал. Тимәк, тормош хаҡындағы күҙаллауҙарын инҡар итеүселәрҙе улар тапап ҡына үтер ҡөҙрәткә эйә буласаҡ.

Ҡойманың был яғында ла проблема юҡ түгел. Тегеләрҙең байлыҡ психологияһы урынына, был яҡта хәйерселек психологияһы хөкөм һөрә. Етмәһә, ошо ике ҡатламдың да социаль комплекстарын бүтәндәр өҫтөнә ябырылдырыу мөмкинлектәре киң. Ана шул ҡойма нимәгә кәрәк ине беҙгә?

Нимәгә кәрәк ине дәүләт ярҙамында илде уртаға - ярлыларға һәм байҙарға бүлеү? Ғәҙелһеҙлек асылда ике ярымшарҙың да бер-береһенән ҡурҡыуына, ҡабул итмәүенә килтерҙе. Ярлылары- байҙарҙың һөмһөҙлөгөнән, байҙар ярлыларҙың эске ризаһыҙлығы һәм күрә алмаусылығынан ҡурҡа.

Баҡһаң, эш демографияла түгел. Донъяға килгәндәренең үҙенсәлеге һәм сифаты хаҡында ҡайғыртыу хәйерлерәк түгелме икән?

**20 июль**

Кеше менән кеше араһындағы мөнәсәбәт, мөхәббәт арҡаһындағы һыҙланыуҙар, хис-тойғолар ҡытлығы хаҡында йыш яҙам. Ә мөхәббәт кеүек үтә етди хистәр хаҡында, ғәмәлдә, айыҡ аҡыл менән яҙырға кәрәк. Дөрөҫ, классиктар йышыраҡ баш юғалтҡыс мөхәббәт өлгөләрен бәйән итеүсән. Уларса, ана шундай хистәрҙән дә юғарыраҡ тойғоларҙың булыуы мөмкин түгел. Романтиктарҙың йөрәге тап ана шундай мөхәббәт хаҡында хыялланып һыҙлана. Күптәр, китаптарҙа яҙылған тойғоларҙы кисермәһә, йәшәүеңдең мәғәнәһе лә булмаған, тимәк, тигән һығымтаға килә. Ә шуға тарының иһә? Ана шундай баш юғалтырҙай хистәр ҡойонона барып эләгеүселәр шул өйөрмәләге халәтен тетрәнеп иҫкә ала түгелме? Мөхәббәт, тимәк, психиканы ҡаҡшатыусы, башты томалаусы тойғо булып сыға. Ул алкоголизм сиренән еңелерәк түгел, аҡыл логикаһына буйһонмай, кешенең эске шәхсиәтен тарҡатыуға һәләтле. Ундай баш юғалтырлыҡ хистәргә йышыраҡ ҡатын-ҡыҙ дусар була. Минең әле бер тапҡыр ҙа тотош булмышты яулаған мөхәббәт уртаһында йәшәүе арҡаһында бәхетле булған кешене осратҡаным юҡ. Киреһенсә, ана шундай хистәр өйөрмәһенә эләгеүҙән һағышҡа, һыҙланыуҙарға дусар булғандарҙы осраттым. Хәйер, осратҡаным тип әйтеү генә бында аҙ, үҙемдең мөхәббәт ҡойононан ҡыйралып, яҙаланыуҙан алйып айнығаным бар. Ныҡышмалыҡ, көс һалып ҡына ҡотолоп була ундай "ҡоллоҡтан". Шулай булғас, мөхәббәтте бәхет тип атап буламы һуң? Әлләсе...

> ***Мөхәббәт, тимәк, психиканы ҡаҡшатыусы, башты томалаусы тойғо булып сыға. Ул алкоголизм сиренән еңелерәк түгел, аҡыл логикаһына буйһонмай, кешенең эске шәхсиәтен тарҡатыуға һәләтле. Ундай баш юғалтырлыҡ хистәргә йышыраҡ ҡатын-ҡыҙ дусар була. Минең әле бер тапҡыр ҙа тотош булмышты яулаған мөхәббәт уртаһында йәшәүе арҡаһында бәхетле булған кешене осратҡаным юҡ. Киреһенсә, ана шундай хистәр өйөрмәһенә эләгеүҙән һағышҡа, һыҙланыуҙарға дусар булғандарҙы осраттым. Хәйер, осратҡаным тип әйтеү генә бында аҙ, үҙемдең мөхәббәт ҡойононан ҡыйралып, яҙаланыуҙан алйып айнығаным бар. Ныҡышмалыҡ, көс һалып ҡына ҡотолоп була ундай "ҡоллоҡтан". Шулай булғас, мөхәббәтте бәхет тип атап буламы һуң? Әлләсе...***
>
> ***Бына нисәмә йылдар ана шул һорауға яуап эҙләйем...***

Бына нисәмә йылдар ана шул һорауға яуап эҙләйем...

**3 август**

"Йәшәү яҡшырғандан яҡшыра, күңелле була бара!" Телевизор экранынан төшмәгән Дума депутаттарының тышҡы ҡиәфәтенә күҙ һалһаң, бының шулай булыуына инана башлайһың. Дөрөҫ, "разночинецтар"ҙың власть коридорҙарына бәреп инеү осоро артта ҡалды хәҙер. Рәсми сығанаҡтарҙан күренеүенсә, Думала бөгөн 19 доллар миллионеры ултыра, йәнә унауһы - Федерация Советы ағзаһы. "Халыҡ хеҙмәтселәре"нең тышҡы ҡиәфәте ҡиммәтләнә барыу ғәжәп түгел. Үҙҙәренә ғашиҡ был сәйәсмәндәр аҡса йәлләмәй.

**14 август**

Биографиямды һағыш-һыҙланыуҙар, шатлыҡтар кисереп, үҙаллы яҙыуға өлгәштем. Үтә прагматик тип тә, бик бер ҡатлы тип тә әйтмәҫ инем үҙемде. Шулай ҙа тормоштоң кеше күҙенә сағылмаған сере барлығын һиҙенә инем. Зиһенем менән шул серҙең ижад кешеләре өсөн һирәкләп кенә булһа ла асылып-асылып китеүен дә аңғара инем.

Ғаләм мөғжизәһе Шүлгән мәмерйәһе донъяның йәнә бер сифаты барлығын ныҡлы төшөндөрҙө. Юғары ижади илаһиәт булған ерҙә абсолют хәҡиҡәтте, камиллыҡ һәм ысынбарлыҡ логикаһын инҡар итеүсе асыл да бар шул. Эйе, яҡтылыҡ һәм мәкер көрәше булған, бар, буласаҡ әле.

Шүлгәнгә барып ҡайтыуға ике ай үтте, күргән-ишеткәндәремдең айышына төшөнөргә, уға логик аңлатма бирергә, хатта аҡлау табырға тырышып, язаланам да язаланам. Яҡтылыҡ һәм күләгә, Голфстрим һәм Цунами кеүек, баштан аяҡ ҡойондора ла ҡойондора...

**20 август**

Путин РФ Конституцияһын хөрмәт итеүе, өсөнсө срокка президентлыҡҡа дәғүә итмәйәсәге хаҡында нисәмә ҡат әйтте. "Ҡалығыҙ, һеҙ булмаһағыҙ нишләйбеҙ!" тиҙәр башҡалар.

Бәлки ул вазифаһынан ҡәҙерле сағында матур итеп китеүсе илебеҙ тарихындағы берҙән-бер аҡыллы сәйәсмәндер? (Хәйер, 1825 йылда Бөйөк кенәз Константин үҙ ихтыяры менән тәхетенән баш тартҡан. Әммә ул быны император Александрға биргән йәшерен вәғәҙәһе арҡаһында эшләй).

Иң сағыу сәйәсмәндәрҙең популярлығы ла ваҡыт үтеү менән төҫһеҙләнә. Бөйөк Британия лидерҙары У. Черчилль менән М. Тэтчерҙы иҫкә төшөрәйек. Икеһе лә иҫ киткес популяр булып, вазифаларынан халыҡтың күңелен ҡайтарып китеп барҙы.

Ә Горбачев, Ельцин сәйәси биографияһын нисегерәк итеп башлап ебәргәйне! Ельцинды икенсе президент срогына буржуйҙар 2 процентлы рейтинг соҡоронан һөйрәп сығарҙы. Сығарыуын сығарҙылар... Ә ил нимәләр күрҙе?

Ә Путин инәлеүҙәргә бирешмәй. Юҡ, тип тик тора. Ә бәлки ул арығандыр? Бик ихтимал. Бөгөнгө необуржуазия реваншы ҡотороуға ғына торған шарттарҙа ил лидеры янында уның күҙенә холуйҙарса ҡарап тороусыларҙан тыш, үҙ өҫтөнә лә яуаплылыҡ алып, ил мәнфәғәте өсөн үҙаллы тырышлыҡ һалыусы, халыҡ, Ватан яҙмышы өсөн һыҙланыусы һәм уны көрсөктән сығарыу өсөн тормошҡа ашырырлыҡ идеялар менән янаусы сәйәси элита ла булырға тейеш бит. Президенттың соратниктарын әйтәм, халыҡтың ихтирамын яулаған намыҫлы кешеләр бармы араларында? Партиялар лидерҙары ла ташҡа үлсәйем генә лә баһа. Арырһың да шул. Рәсәй тиклем илде бер үҙең тиерлек һөйрәп ҡара ана.

**26 август**

Яҙышырмын инде, тип отпусканы көтөп алаһың да, йәйге эҫенән бәлйерәп тик йөрөйһөң. Өфөлә сыҙап ултырырлыҡ түгел. Кислород дефициты. Ярай әле баҡсала тын алыу еңелерәк. Фәһим мырҙамдың улы Рауил менән ейәнем Искәндәр күңелде күтәрерлек малайҙар, шөкөр. Әле туп тибәләр, әле - баскетбол. Тик еләк ашатып булмай, йыйып, йыуып, арттарынан инәлеп йөрөйөм:"Ашағыҙсәле, малайҙар!.." Юҡ, итле туҡмас, былау булһын. Төйәләр генә икмәкләп тороп. Ирҙәрсә инде!

Ике китап уҡып сыҡтым. Алла Докучаеваның "Яд маскарада", Камил Йыһаншиндың "Скитники" китаптары. Икеһенең дә әҙәби оҫталығына һоҡландым. Сюжет һәм интригалар ҡора белеү оҫтаһы А. Докучаева хәл-ваҡиғалар эсенә ниндәйҙер сер һәм көтөлмәгәнлек һала белә. Геройҙарының яҙмышы психологик яҡтан тәбиғи килеп сыға. Үҙе яратҡан детектив жанрын Алла Анатольевна ярайһы яҡшы үҙләштергән. Интригалар формаһы, уларҙың хәл ителеш ысулдары бер ерҙә лә ҡабатланмай.

К. Йыһаншин үҙенсә стиль һәм формалар менән эш итә. Уның геройҙары рухиәт аша күңел сафлығына, Алланы яратыуға йөҙ тотоусы скитниктар. Улар үҙ инаныстарын һаҡлау маҡсатынан тайғаға килеп һыйынған. Бер-береңә иғтибар, йәлләү тойғоһо, аяулылыҡ аша рухи камиллыҡ эҙләй улар. Йыһаншин прозаһының илаһи поэтикаһын Есенин шиғриәте менән сағыштырып булалыр. Яҙыусының төп илһам сығанағы - тәбиғәт һәм тәбиғилек. Былар Йыһаншиндың эстетик эклектикаһы дәрәжәһендә. Алла Докучаеваны сюжет ҡороу, характерҙар бәрелеше оҫтаһы тип атарға мөмкин булһа, Йыһаншин прозаһы роман жанры ҡанундарынан алыҫ шулай ҙа. Уның был әҫәрен дискрет проза тип баһалау дөрөҫөрәк булалыр. Рәсәй әҙәбиәтендә, шул рәүешле, яңы жанр барлыҡҡа килә буғай...

**4 сентябрь**

Рәсәй донъя иҡтисады киңлектәренә сығырға ынтыла. Ләкин беҙ унда ни рәүешлерәк күренербеҙ? Илебеҙ халҡының өстән ике өлөшө бер ниндәй запасһыҙ ғүмер итеүсе көнлөксө бит. Получканан получкаға, пенсиянан пенсияға саҡлым тартылып һуҙылабыҙ ҙа баһа. Ошондай шарттарҙа беҙҙең сәйәсмәндәр мораль, әхләк хаҡында ла һүҙ ҡуйыртып маташа. Дөрөҫ, минең быуын рухи яҡтан да, матди яҡтан да көслө держава кешеһе булыуға күнеккән. Бөгөн иһә йәштәрҙең киләсәге хаҡында уйланыу кәйефте ҡыра. Ата-әсәле, белемле йәштәр, бәлки, ғаилә ҡороу, торлаҡ мәсьәләләрен хәл итеү сараһын һәм юлдарын эҙләр. Беҙҙә ата-әсәһенең замана сирҙәре менән ыҙаланыуы, шул сәбәптән вафат булыуы арҡаһында сараһыҙлыҡҡа дусар йәштәр ҙә бар. Уларҙың киләсәге ниндәй булыр? Төшөнкөлөккә бирелеп, ата-әсәһе юлына баҫмаҫмы? Һөнәрле кешеләр өсөн дә ҡыйын әле ул торлаҡ мәсьәләһе. Усаҡ тергеҙер өсөн ғүмерең дә етмәүе ихтимал.

Тотош халыҡтың милли байлығы һаналған ер аҫтындағы ҡаҙылма байлыҡты хосусилаштырыу ғәҙелһеҙ булыуын берәү ҙә телгә алырға теләмәй. Шулай ҙа халҡыбыҙҙың үҙ мәнфәғәттәрен яҡлау даирәһе бар әле ул. Беҙ күңелебеҙ һәм рухыбыҙҙы, кешелек мәртәбәбеҙҙе талап, аҡса туплаған хәшәрәт кешеләрҙең оятһыҙ йоғонтоһонан һаҡларға өйрәнергә тейешбеҙ. Ер өҫтөндә байлыҡ булған, буласаҡ, ана шуға ҡомһоҙҙар нәфсеһен һуҙып торған, әммә кешелек иң һуңғы цивилизация эсендә генә лә әллә ни саҡлым мәҙәни, философик, гуманистик-гуманитар юҫыҡтағы ҡаҙаныштарға ла өлгәшкән. Мәсекәй буржуйҙарҙың өлгөһөнә тартылыуҙан былай, шундайҙарҙың нәфсеһенә ауыҙлыҡ кейҙерерлек закондар сығарыуҙы талап итеп өйрәнергә кәрәк. Капитализм закондар ауыҙлығы эсендә генә кеше төҫөн алыуға һәләтле.

**22 октябрь**

Берәү ҙә мәшәҡәтһеҙ йәшәмәйҙер. Миңә ҡалһа, тормош уны кеше алдына килеп тыуған хәлдән сығыу юлдарын эҙләргә өйрәтеү маҡсатынан да ҡуя. Мәҫәлән, берәү берәүгә ғашиҡ булды, ти. Ләкин ҡайнар мөхәббәт бер көн килеп селпәрәмә килә. Кешенең эске аңы, һыҙланыу кисереүҙән, мөхәббәт - ул ғазап, тигән һығымтаға килә. Һәм хәтергә мөхәббәт ләззәт кенә түгел, һыҙланыу ҙа тип яҙып ҡуйыла, түгелме?..

Күрәһең, кешенең эске аң халәте - уның фәрештәһе лә. Ул кешене яңылыштарҙан аралау функцияһын үтәүсе. Әммә бындай яҡлаусы ҡойма эске аң хужаһының ихтыярынан тыш эшләнәләр. Шуға ла мәшәҡәт, проблемаларҙы үтә ҡуйыртып ҡабул итмәҫкә тырышырға кәрәктер. Ҡайһы бер проблеманың сиселеше мөмкин булмаған осраҡтар була. Быға күнә белеү - үҙе бер мәртәбә. Һәр ауыр ваҡиғаның сәбәбе була. Үҙ ҡылыҡтарыңды анализларға, һығымталар яһап, үҙеңде үҙгәртергә өйрәнергә кәрәк. Дөрөҫ, үҙ-үҙеңә баһа биреү һәләтенә һәммә кеше лә эйә булмай. Быны тик уҡымышлы, зыялы кеше генә эшләй ала.

Кемдең кемлеген, минеңсә, дүрт сифатына ҡарап билдәләргә мөмкин: белем кимәле, традицияларға тоғролоғо, рухиәтлек кимәле һәм намыҫ.

Былар минең асыш түгел. Кешелек был хаҡта тарихи тәжрибәнән сығып күптән белә. Шул уҡ ваҡытта бәхетле, мөхәббәтле, етеш йәшәргә хыялланмаған кешене осратыуы ҡыйын. Ошо юлда, етмәһә, кеше

**Тамара ҒӘНИЕВА**

***✓ Торғонлоҡтоң иң ауыры беҙҙе 51 йәштәр тирәһендә ҡарауыллай. Был йәштә кеше ҡурҡыуға төшә, күңеленә паника эйәләй. Быны мин үҙ тәжрибәмдән сығып әйтәм.***



өсөн иң ҡыйыны - үҙе кеүек үк бәндәләр менән уртаҡ тел табырға өйрәнеү.

Билдәле француз яҙыусыһы, "Бәләкәй принц" тың авторы, Антуан де Сент - Экзюпери ҙа бит ерҙәге иң ҡиммәтле нәмә кешеләрҙең бер-береһе менән аралаша белеү һәләте, тигән һығымтаға килә. Тормош яралғандан бирле бәндәләр күп нәмәләргә өйрәнгән, асыштар яһай, ижад менән мауыға, ә шулай ҙа, үҙең кеүектәр менән уртаҡ тел табыу һәләте - иң һирәк таланттарҙың береһе булып ҡала килә.

**1 декабрь**

Беҙҙең халҡыбыҙ һәм илебеҙҙең төп үҙенсәлеге - рухи ҡанундарға тоғролоҡ һәм тормоштоң асылын эҙләү кеүек идея менән ғүмер итеү ул. Дин талап иткән оят, намыҫ, гонаһ кеүек төшөнсәләрҙең көндәлек тормош нормаһы булыуҙан алыҫлашыуы - күп кенә бәйелһеҙлеккә юл аса ла инде.

Ә бит кешене хайуандан нәҡ ана шул ояла белеү, гонаһтан ҡурҡыу тойғоһо айыра. Донъя бер уңыштан икенсе уңышҡа табан тайпылышһыҙ атлаусы сәйәсмәндәр, чиновниктар һәм менеджерҙарҙың тигеҙ сафтарынан ғына ғибәрәт түгел.

Әүерелмәләрҙең ныҡлы үрсегән осоро. Уларҙы бөтә өлкәләрҙә лә табырға мөмкин. Кемдәрелер аҡ халат кейгән, кемеһелер Минфинда әүеш-тәүеш итә, ҡайһыларылыр погон тағып алған, берәүҙәренең кеҫәһендә депутат мандаһы, икенселәре - сәйәсмән ишараты, кемеһелер төшөмлө хужалыҡ етәксеһе...

Әйткәндәй, һәр кемдең үҙ таныш әүерелмәһе бар, унан башҡа бер генә йомошондо ла йомошлармын, тимә. Дәүләт зарплатаһы ғына алыуҙарына ҡарамаҫтан, иномаркаларҙа йөрөйҙәр, бисәләре сынйаһау кейенә, сит илдәрҙә ял итәләр, коттедждарҙа йәшәйҙәр, балалары сит илдә белем ала. Код, паролдәр, танышлыҡ сылбыры - ныҡлы көйләнгән. Уны тиҙ генә табырмын, шылтыратып һөйләшермен, ҡабул итерен көтөп алырмын, тимә. Ә уларҙан башҡа бер генә мәсьәләне лә хәл итеп булмай. Һәр хәлдә, уларҙың ярҙамынан тыш, коридорҙар "туҙанын мул һемерәсәкһең", шуға ла уның кеүек танышың булыуҙы бәхет тип баһалаясаҡһың. Мөнәсәбәттәрҙәге былдай оятһыҙ форма халыҡты ришүәтселеккә, бил бөгөүгә, баш эйеүгә мәжбүр итә. Нәҡ ошондай хәшәрәттәр дәүләт һәм власҡа ҡарата ышанмаусанлыҡҡа, өмөттәр һүрелеүенә килтерә лә инде.

Ана, президент Путин да Энергетика комплексын үҫтереү буйынса уҙғарылған кәңәшмәлә зарланып әйтеп ҡуйҙы: "Беҙҙә бер генә талап та еренә еткереп үтәлмәй". Тимәк, президент 2005 йылда уҡ телгә алған ваҡ һәм эре чиновниктарҙан торған "һәләтһеҙ каста" бирешергә йыйынмай.

Ә шулай ҙа беҙҙең йәмғиәттең былдай намыҫһыҙ күренештәрҙән ҡотолорлоҡ көсө бар әле. Ер йөҙөндә бынан да йәнһеҙерәк ваҡиғалар булмағандыр шул? Рим дәүләтендәге ҡолдар баҙарын, крепостной крәҫтиәндәрҙе мал һарайында ҡамсылау, баш күтәргән башҡорттарҙы ҡаҙыҡҡа ултыртыу, аяуһыҙ репрессияларҙы ғына иҫкә алайыҡ. Гуманизм йүнәлешендәге эволюция, заманаға һәм замандаштарға ҡарата мәрхәмәтле мөнәсәбәт - кешелектең һәм Аллаһтың төп идеяһы ул. Былар һәр осорҙоң уйсан һәм намыҫсан кешеләренең төп йәшәү принцибы булып ҡала килә.

**7 декабрь**

Йыл тамамланып килә. Алда нимәләр көтә икән беҙҙе? Билдәле ки, бәндә яҙмышы бигерәк сәйер ул - берсә, этеп йығып танауҙы ҡан ялата, икенселәй, һис уйламаған ерҙә күккә лә күтәргеләй. Уңыш-уңышһыҙлыҡ, бәхет-бәхетһеҙлекте аралаштырып, яҙмыш кешенең рухи көсөнә һынау үткәргән кеүек. Әммә яҙмыштың осош-ҡолауҙарынан былай, күнегелгән ритмдан тайпылырға мәжбүр итеүсе паузалары ауырыраҡ кисерелә. Был алда ниндәйҙер ыңғайымы, киреме үҙгәрештәр көткәнен тоҫмаллай алмай ыҙаланыу осоро.

Ошондай ваҡыт туҡталған кеүек хәлгә тарыу оҙаҡҡа һуҙылһа, бынан тик көслө кешеләр генә күңел имгәнеүенә дусар ителмәй килеп сығыуға һәләтле. Былдай торғонлоҡ кешенең йә мораль яҡтан өлгөрөп етмәүенән, йә шәхестең үҙенең ваҡыттан алғараҡ китеүе һөҙөмтәһендә, заманаһың уның идеяларын ҡабул итергә әҙер булмауы сәбәпле барлыҡҡа килә.

Торғонлоҡтоң иң ауыры беҙҙе 51 йәштәр тирәһендә ҡарауыллай. Был йәштә кеше ҡурҡыуға төшә, күңеленә паника эйәләй. Быны мин үҙ тәжрибәмдән сығып әйтәм. Баҡһаң, был өлкәнәйеүгә күсеш осороноң ошондай албырғатҡыс һиҫкәндереүле халәте киләһе осорҙо планлаштырыу, холоҡ-фиғелде йәшкә ярашлы формалаштырыу өсөн алдыңа килеп баҫҡан туҡталка икән. Тимәк, ҡартлыҡтың күңелһеҙ һулыумы, емешле эшмәкәрлекме булырын кеше артабан үҙе планлаштырырға тейеш.

Яңы йәшәү ритмына ҡулайлашыу өсөн, мәҫәлән, көндәлек алып барырға кәңәш итәм. Унда эске кисерештәрегеҙҙе яҙып барығыҙ. Был, берҙән, ауыр уйҙарҙан арындыра, икенсенән, фекер сарлана, ана шул рәүешле мейенең эшмәкәрлек һәләте дауам итә. Дуҫтарҙың һанын ҡырҡа кәметергә кәрәк. Сөнки, үҙегеҙ беләһегеҙ, дуҫтарҙың күбеһе беҙҙән нимәлер көтә, үҙҙәре иң ҡуйырға йә әҙер түгел, йәки теләмәй. Балалар һеҙҙең кисерештәрҙе аңлау йәшенә етмәгән, шуға ла уларҙан нимәлер көтөү урынһыҙ. Дуҫтарығыҙҙың иң тоғроларына ла күңелегеҙҙе игәгән икеләнеүҙәр хаҡында һөйләмәҫкә тырышығыҙ. Һеҙҙең бер генә ярҙамсығыҙ бар - ул үҙегеҙ.

Иң мөһиме, депрессияны үтә "наҙлап", күңел төшөнкөлөгөнән "ләззәтләнеү"гә күндермәҫкә тырышыу. Мин, мәҫәлән, үҙемде ологайыу төшөнкөлөгө соҡоронан көскә һөйрәп сығара алдым...Ауыр кисерештәремде бүтәндәр һиҙмәне, тиерлек.

Ғүмер йылғаһы тәҡдир ярҙары буйлап киләсәккә табан йәнә ағып китәсәк әле. Беҙҙең поезд әле үтеп китмәгән, ни бары платформаһын ғына алыштырған ...

**20 декабрь**

Фәнил мырҙамдың йәтим балаларының береһе Регинаны ауылдан алып килдем. Һатыусылыҡҡа уҡып сыҡҡайны, һөнәр күңелгә ятмай ти әле ул. Бүтән һөнәре юҡ. Ә беҙҙең ауылда уны нимә көтһөн? Алма беш, ауыҙыма төш, тип йәшәр заман түгел. Атаһы юҡ, әсәһе юҡ. Үҙе әллә йомшаҡ, әллә йәтимлектән эсенә йомолған, бик пассив. Бәлки минең кредом, тормош ауырлығын тик егәрлелек менән генә еңеп була тигән инанысым уның аңына һеңер, алдағы тормошон планлаштырырға ярҙам итер. Башы бар кешегә минең янда йәшәү - университет була алалыр ул. Байтаҡ дөмбәҫләне мине был донъя. Бүтәндәргә тәжрибә уртаҡлашыр һабаҡ бирҙе. Уның йәшендәге ҡыҙҙы елкәгә ултыртып йөрөр көс юҡ, әлбиттә, минең хәҙер. Һәммәһе лә үҙенең ҡулында.

**31 ғинуар**

Бына инде 2006 йыл да тамамланды. Тиран һәм донъя террорсыһы, АҠШ президенты Буш киноға төшөрттөрөп тороп икенсе бер тиран, Ираҡ президенты Саддам Хөсәйенде аҫтырҙы. Урта быуат ҡанһыҙлығын донъяға күрһәттеләр. Ярай әле, Рәсәй яҙалауҙың был тиклем аяуһыҙлығын ҡабул итмәүе хаҡында белдерҙе. Ысынында, беҙ үҙебеҙ ҙә күп яҙалар күргән, күп хаталар яһап гонаһ күтәргән ил ул. Иң мөһиме, үткәндәрҙән һабаҡ алыу һәм киләсәкте кешелекле мөнәсәбәттәр принцибына таянып тоҫмаллау. XX1 быуатта урта быуат яҙаһын ҡулланыуҙан да ғибрәтле ҡырағайлыҡ булыуы мөмкинме ни?!

2006 йыл, бүтән бер ҡасан да әйләнеп ҡайтмаҫ өсөн мәңгелеккә инеп ирене. Ләкин беҙҙең хәтерҙәрҙә йәшәрлек ваҡиғалар ҡалдырҙы. Искәндәрскалоладҙың аяғын һындырып ыҙаланыуы ғына ҡыйын булды, ә былай бик ҙур мәшәҡәттәргә тарытманы, шөкөр, Эт йылы. Белмәйем, йәнә нисә осрашып булыр икән һуң Эт йылы менән?..

Республикабыҙ ҙур төҙөлөш майҙанына әүерелде. Матурлыҡ, уңайлыҡтар оптимизм уятмай ҡала була тиме ни?! Хатта ғорурлыҡ уята ул.

Яңы "Мөхәббәткә генә ышанам" тигән китабымды йәмәғәтселек йылы ҡабул итте. Бигерәк тә үҙем хөрмәт иткән кешеләрҙең ризалыҡ белдереүе кәйефемде күтәрә. Минең төп маҡсатым - кешеләрҙе күңел ҡәҙерен белергә өйрәтеү. Күңелебеҙҙең мөмкинлектәрен киңерәк файҙаланһаҡ, бирешмәбеҙ. Сөнки күңелдең мәкер, яуызлыҡ, нәфсе кеүек сифаттары юҡ.

**(Аҙағы. Башы 10-13-сө һандарҙа).**

ҺАБАҠТАР

# ЯБАЙ КЕШЕНЕҢ... ҠАТМАРЛЫ ФЕКЕРҘӘРЕ



**Беҙгә тыумыштан бирелгән ифрат һәләтле, егәрле, эшлекле мейе яңынан-яңы фекерҙәр, тәҡдимдәр тыуҙырып ҡына тора. Ҡәҙерен, әһәмиәтен белеп, дөрөҫ баһалап, ваҡытында файҙалана алһаҡ, беҙҙән дә аҡыллы, уңышлы кеше булмаҫ ине. Кеше башында ниндәй генә уйҙар, фекерҙәр тыумай. Ҡайһылары, башты ҡатыра торғас, үҙенән-үҙе һүрелә, юҡҡа сыға. Шул уй-фекерҙәрҙең осон эләктереп, берәй һығымтаға алып барып еткерә алған кеше хикмәтле булалыр ул.**

Ҡөрьән Кәрим: "Аллаһы Тәғәлә хикмәтте үҙе теләгән бәндәһенә бирә. Кемдә хикмәт, шуға күп яҡшылыҡ та бирелә", - ти. Мөхәммәт бәйғәмбәребеҙ хәҙис шәрифтәрендә: "Хикмәт - иманлы бәндәләрҙең юғалтҡан нәмәһе. Бәндә уны иҫ белгәндән, ғүмере буйы эҙләй. Ҡасан, ҡайҙа тапһа ла, үҙләштерә алһа, кешеләр алдында шул хикмәтен асырға хаҡлы",- тигән.

Эйе, хикмәт бәндәнең аңына, йәненә, тәненә тыумыштан һалынған уңыш бөртөгө. Әммә ул сәскә атыу өсөн уңай шарттар тыуыуы зарур. Донъяға заманына, йәмғиәтенә күрә аҡыллы, һәләтле бәндәләр тыуып тора. Ләкин аҡыл, һәләт әҙәмдең йәшәү дәүерендә асылыуы һәм раҫланыуы, баһаланыуы мөһим. Ошонда йәмғиәттең үҫеш кимәле күренә лә инде, йәғни алдынғы аң үҙ емешен дөрөҫ баһалай аламы, таныймы, ҡабул итәме? Үҙенә бирелгән хикмәтте ғүмере буйына эҙләүселәр, табып та, үҙләштерә алмаусылар, үҙләштереп тә, йәмғиәттән инҡар ителеүселәр бихисап.

"Ер шар кеүек түңәрәк", тип, мәлһеҙ ҡысҡырып, утҡа инеүселәрҙең ниндәй ғәйебе булған? Байтаҡ аҡыл эйәләренең сихырсы, диуана, хыялый тип, нахаҡҡа эҙәрлекләнеүҙәре лә мәғлүм. Тимәк, заманының һәләтле шәхесе йәшәгән дәүерендә тейешенсә баһаланмауы ла ихтимал. Ундайҙарҙы киләһе быуындар баһалай. Үҙ ваҡытында ҡулланылмаған аҡыл, аң, һәләт, иҫкереп, актуаллеген юғалтыуы - бәхәсһеҙ. Ваҡытында нигеҙһеҙ инҡар ителеп, юҡҡа сыҡҡан бөйөк идеяларҙың иҫәбе бармы икән? Булһа, күпме, кем белә?

Йәндә бар аҡыл, һәләт асылмауы ла мөмкин. Аң ялҡаулығы - әҙәмгә хас ауырыу. Етеш, ел-ямғырһыҙ шарттарҙа тыуып-үҫеп, ҡайғы-хәсрәтһеҙ, ғәмһеҙ ғүмер итеүселәр ҙә юҡ түгел. Үҙ тормошон тулыландырыу ниәте менән йә үҙенә мәшғүл табыу өсөн дә кешенең һәләте асылып китеүе мөмкин. Күп осраҡта әҙәм үҙендә ниндәй хикмәт бар икәнен дә белмәй йәшәй.

Минең дә хикмәтем моң, музыка, сәнғәттә булғандыр, тип уйлайым. Бәләкәйҙән көй, тамаша ярата торғайным. Туғыҙ йәшемдә үҙаллы гармунда уйнарға өйрәндем. Дәрестәрҙән һуң, кеше ҡайтып бөткәс, фототүңәрәккә йөрөү һылтауы менән барып, аулаҡ пионер йә уҡытыусылар бүлмәһенә инеп, баянда уйнарға өйрәндем. 1-се Республика интернат-мәктәптә унынсы класта Айрат Ҡобағошов, Рафиҡ Хәлиловтар менән "Баянсылар триоһы" ойоштороп, телевидениеға төшөүгә өлгәштек. Шул юл менән барыуымды дауам итһәм, үҙ хикмәтемде үҙләштереп, ниндәйҙер үрҙәр байҡар инем. Бәлки ул ваҡытлыса мауығыу ғына булғандыр. Төп шөғөлөм итеп ул һәләтемде үҫтермәгәс, фараз итергә генә ҡала.

Дәүеремдең космосҡа ынтылған елдәре юлымдан ҡайырып, инженер-механик булырға насип итте. Ғүмерҙә тоҡомда булмаған, аңға ла, ҡанға ла һеңмәгән һөнәрҙе үҙләштереүе еңел булманы. Әлеге лә баяғы зирәклек, ныҡышмалылыҡ ярҙам иткәндер. Рухы көслө кеше, ғүмеренең ҡайһы өлөшөндә булһа ла, барыбер үҙ асылына ҡайта ала. Иң үкенеслеһе, үҙ хикмәтеңде эҙләп, дөрөҫөрәге, юғалтып йөрөгән ваҡыт әрәм була. Кире ҡайтарып йә яңынан башлап булмай ғүмерҙе.

Кеше тетрәндергес шарттарға, уйҙарға, кисерештәргә, хәлдәргә дусар булғанда һәләтлелек даирәһе киңәйеүе мөмкин. Шомға һалырлыҡ ғибрәтле хәлдәр кисереү, уларҙы хәл итеү, еңеп сығыу тәндән, йәндән, аңдан өҫтәмә яңы көс, дәрт, һәләт талап итә. Хатта мәжбүр итә! Ошондай саҡта кешенең йәшерен һәләте асыла ла инде. Быға кеше үҙе лә аптырап ҡуя.

Шуға күрә, бөгөнгө тормоштоң ҡайғы-хәсрәттәренән, ауырлыҡтарынан, донъя михнәтенән ҡасырға маташыуҙар бер ниндәй ҙә ыңғай һөҙөмтә бирмәйәсәк. Уларҙы ваҡытлыса ғына мәшәҡәттәр тип ҡарап, үҙ файҙаңа әйләндереү хәйерлерәк. Киләһе көнгә өмөт менән ышанып йәшәгәндә, әҙәм аҡылы хәл итә алмаҫлыҡ ҡыйынлыҡтар, ҡаршылыҡтар юҡ тормошта. Ғәмәлдә, ошо фекерҙе аңлап, үҙ итеп, бар һәләтеңде эшкә ҡушыу ҙа күп осраҡта бар кешене хайран итерлек еңеүҙәргә алып килә. Тыумыштан бирелгән зирәк аҡылы, тормошта тупланған бай тәжрибәһе иң ауыр, фажиғәле һынауҙарын да лайыҡлы кисерергә ярҙам итә әҙәм балаһына.

Тик ултырыуға "бисмилла" кәрәкмәй. Минән булмай ул, тип, ҡыл да ҡыбырҙатмай, йәмғиәткә талаптар ҡуйып ултырыусылар ҙа байтаҡ. "Тауҙай талаптарың менән күбәләй эшең дә булһын", тигән боронғолар. Ғүмерен мәғәнәһеҙ тип иҫәпләгән кеше йәшәүгә лә дәртһеҙ, һәләтһеҙ. Һауанан алып әйтелгән һығымта түгел, үҙ башымдан кисергән, күргәндәрҙән сығып, ышаныслы дәлилдәр килтерә алам.

**Нимә ул йәшәү мәғәнәһе, нимә ул бәхет, тигән мәңгелек кеше аңын албырғатҡан һорауҙарға яуап бик ябайҙыр ул. Йәшәү мәғәнәһе - үҙ хикмәтеңде эҙләүҙә, ә бәхет - шул хикмәтеңде табып, үҙләштереп, кешелеккә мәнфәғәтең тейеүҙә. Хикмәт тыумыштан бирелһә, тәжрибә тормоштан алына. Даланһыҙ кеше юҡ.**

**Урал МОСТАФИН.**
Баймаҡ ҡалаһы.

**(Дауамы бар.)**

✓ ***Организмды элекке хәленә ҡайтарыу шәкәрһеҙ диеталар, йәшелсә-емеш ашау ярҙамында мөмкин. Ашҡаҙан үҙе эшләп сығарған алкоголдән арыныу процесын бик ауыр кисерә.***



*ҮӘТ ӘЙ!*

## Шәкәр яратҡандар...
### алкоголгә тиҙерәк бирешә

**Барлыҡ татлы аҙыҡ файҙалы түгел икәнлеген барыбыҙ ҙа белә. Шуға күрә шәкәрҙе күп ҡулланыу организмдың ҡаҡшауына, төрлө патологияларға килтерә.**

Америка ғалимдарының асышы иһә был фекерҙе тағы нығыраҡ баҙыҡландыра: баҡтиһәң, алкоголдең беренсе стадияһы шәкәр яратыу нигеҙендә тыуыуы мөмкин икән. Алкоголизм сиренә һәр бер "тамаҡ ялғау" артынан татлы һыу, шәкәрле сәй эсергә яратыусылар дусар була, ти ғалимдар. Ашалған аҙыҡтан һуң эселгән татлы сәй ашҡаҙанда тиҙерәк эшкәртелә, әммә организмдан оҙаҡ ҡына сығарылмай, шунлыҡтан ул эстә яйлап ҡына әсей башлай. Әсегән матдә спиртҡа әйләнә, ашҡаҙандағы аҙыҡ менән бутала. Унан һуң был масса эсәккә эләгә һәм спирт еңел генә ҡанға тарала. Шулай итеп, организм үҙе спирт эшкәртергә өйрәнә һәм алкоголгә өйрәнеүҙең тәүге стадияһы башлана.

Организмды элекке хәленә ҡайтарыу шәкәрһеҙ диеталар, йәшелсә-емеш ашау ярҙамында мөмкин. Ашҡаҙан үҙе эшләп сығарған алкоголдән арыныу процесын бик ауыр кисерә.

Шәкәрҙе бал менән, шоколад, торт, кәнфит кеүек шәрбәтле аҙыҡтарҙы еләк-емеш менән алмаштырыу бик ҡулай. Шәкәрҙе алмаштырыусы матдәләр ҙә бар: сахарин, аспартам, цикламат, полиол, ксилит. Уларҙың зыяны ла юҡ түгел, әлбиттә. Мәҫәлән, Америкала - цикламат, Канадала сахарин ҡулланыу тыйылған. Әйткәндәй, сахарин йөрәк эшмәкәрлеген боҙоуы, анемия ауырыуын тыуҙырыуы мөмкин. Ксилит күреү һәләтен ҡаҡшата.

Ләкин, нисек кенә булмаһын, шәкәр организмға килеп торорға тейеш. Емеш-еләктән, йәшелсәнән, балдан тыш, фруктоза һәм глюкоза сөгөлдөрҙә, кишерҙә бар. Балдан башҡа, атап үтелгән бар аҙыҡтарҙы ла көндәлек рационда күпләп ҡулланырға ярай.

**Шәкәр ҡулланмауҫылар ашһыуынан бер нисә рецепт тәҡдим итәбеҙ:**

**1. Ҡырғыс аша үткәрелгән кишерҙе киптерелгән емеш-еләк ҡушырға һәм ҡаймаҡ менән өҫтәлгә бирергә.**

**2. Туралған кәбеҫтәгә ҡырылған кишер ҡушырға һәм аҡ эремсек менән бутап, шулай уҡ өҫтөнә ҡаймаҡ һалырға.**

**3. Ҡаймаҡлы аҡ эремсеккә киптерелгән емеш-еләк ҡушырға.**

**4. Балға лимон һутын, грек сәтләүеген өҫтәргә.**

**Был аш-һыу төрҙәре бар аҙыҡҡа ла шәкәр өҫтәү ғәҙәтен яйлап ҡына һүндерер. Һуңынан шәкәр һәм башҡа татлы аҙыҡ һеҙгә үтә ҡырҡыу тәмле булып тойоласаҡ.**

*СӘЛӘМӘТ БУЛ!*

# Тәбиғәт йоҡонан уяна,
## һин дә уян һәм иркен тын ал



**Ҡасан да булһа күңел төшөнкөлөгөн, рух ҡаҡшауын барыһы ла кисергәндер. Кисергәндер, тием, сөнки бөгөнгө көн ҡуҙлегенән сығып фекер йөрөткәндә, стресс йә депрессия кеүек күңел ауырыуҙарына дусар булмаған кешене күргәнем юҡ. Кемдер уны яҙ миҙгеле менән бәйләй, кемдер тормоштоң үтә лә ҡатмарлы, һикәлтәле булыуына... Ғөмүмән, нимә ул стресс? Нисек унан ҡотолорға? Был һорауҙар хаҡында мөмкин тиклем аҙыраҡ уйланырға кәрәк, тиғән фекерҙә психологтар. "Миңә ауыр, мин стресс кисерәм", тип уйлаған һайын беҙгә тағы ла ҡыйыныраҡ була бара.**

**Белгестәр үҙ-үҙеңә шундай һорауҙар бирергә кәңәш итә:**

1. Һеҙ нимәнән ҡурҡаһығыҙ? Бәлки, һеҙҙе кемдер рәнйеткәндер?

2. Эшһеҙлектән дә кеше стресс кисереүе мөмкин. Һеҙҙең күңелегеҙгә яткан эш төрө бармы? Булмаһа, күптән инде тотонорға ваҡытыр?

3. Ҡасан һеҙ һуңғы тапҡыр ял иттегеҙ, йылмайҙығыҙ, тышта йөрөнөгөҙ? Ҡасан һеҙ һуңғы тапҡыр... ғашиҡ булдығыҙ?

4. Һеҙ етерлек кимәлдә йоҡлайһығыҙмы?

Әгәр ҙә был һорауҙарға яуап биреү ҡыйынлыҡтар тыуҙыра икән, тимәк тормошоғоҙҙа ниҙер үҙгәртергә күптән ваҡыт...

"Үткәндәрҙе онотоу, киләсәк тураһында уйламау хатта көслө кеше өсөн дә еңел түгел. Шуға күрә бөгөнгө көн менән йәшәргә тырышығыҙ. Бар нәмәгә лә рәхмәтле булырға кәрәк. Үҙегеҙҙе был матур, ғәжәйеп донъяның бер бизәге итеп күрегеҙ һәм һеҙгә йәшәүе еңелерәк буласаҡ", тип яҙа Дейл Карнеги.

Белгестәр әйтеүенсә, стресс кисереүҙең төп сәбәбе - үҙеңдең көсөңә, кәрәклегеңә ышанмауҙан килә. Ҡурҡыу, ышаныс тойғоһон юғалтыу, хәлһеҙлек, эс бошоу кеүек күренештәр күңел тупаҫланыуына килтерә. Кеше башҡаларҙы ғына түгел, үзен дә аңламай башлай. Күңел һәм ығы-зығылы тормош араһында упҡын хасил була. Йыш ҡына быңдай осраҡтарҙа эскелеккә бирелеү, наркотиктар менән мауығыу кеүек күренештәр тыуа. Йә иһә уҡыу һәләте түбәнәйә, һаулыҡ, хәтер ҡаҡшай, йәшәү сифаты насарая. Стресс кисереүсе кешеләргә психологтар түбәнгеләрҙе кәңәш итә:

1. Йоҡлар алдынан көнө буйы булған бөтә насар күренештәрҙе хәтереңдән "ҡырҡып" ал.

2. Иртәгәге көн мотлаҡ тағы ла матурыраҡ һәм бәхетлерәк була, тип планлаштыр.

3. Үткәнеңде хәтереңдән юйырға тырыш. Киләсәк хаҡына бөгөнгө көн менән йәшә.

4. Иртән тороу менән был донъяла йәшәүеңә ҡыуан һәм тормошҡа рәхмәттәр уҡы.

5. Үҙеңде ярат - стресс һине урап үтәсәк.

Яҙылғандарға өҫтәп, йәнә шуны әйткем килә - беҙҙең илдә стресс барыбер ауырыуға һаналмай. Кемегеҙҙең, йәнем әрней, тип, дауахана юлын таптағаны бар? Беҙгә уның өсөн генә кеше маҙаһыҙлап йөрөү оят эш һанала, хатта психолог ярҙамы кәрәк булған кеше йәмғиәт өсөн ҡурҡыныс шәхес булараҡ ҡабул ителә. Ә бына Көнбайыштың күптәр аҙна һайын тиерлек психотерапевтка бара - шул араҙыҡ ваҡыт эсендә йыйылған ҡайһы бер күңелһеҙ уйҙарҙан арыныр өсөн.

Һеҙ яҙ тауышын ишетәһегеҙме? "Сулп, сулп!" Тамсыларҙың моңло тауышы берсә иркәләй, берсә сикәнән еңелсә үбеп алған кеүек. Сағыу ҡояштан күҙҙәр сағыла. Тиҙҙән йылы яҡтарҙан һандуғастар, сыйырсыҡтар ҡайтыр... Ҡалын ҡарҙан арынып өлгөрмәгән ер уянып, кирелеп яткан төҫлө, ялаңғас ағастар ҙа оҙон ботаҡтарын ҡояшҡа ҡарай һуҙған. Тимәк, бар тәбиғәт ҡайтанан терелә, йоҡоһонан арына. Кешеләр ҙә уның менән бергә уянһын, кирелһен, күкрәк тултырып иркен тын алһын ине...

**ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...**

**Стресс, депрессиянан ҡотолоу юлы бармы? Ошо һорауҙар менән бер нисә кешегә мөрәжәғәт иттек:**

**ЛӘЙЛӘ, студент:**

- Көнө-төнө уҡыуҙан шул тиклем ялҡтым. Ҡыбырларға ла хәлем юҡ кеүек. Көнө буйы әлһерәп йөрөп, уйларға, үҙеңдең күңел торошоңа иғтибар итергә ваҡыт тапмайым. Ана шуныһы үҙгемә үткәрҙе. Бер ҡайҙа ла өлгөрмәгән, бер нәмә лә эшләй алмаған кеүекмен. Йыш ҡына кәйефем юҡ. Күңел төшөнкөлөгөнән арыныу өсөн дискотекаларға барам. Ҡолаҡ тондорғос музыка ла үҙ фекерҙәремде ишетеүҙән мәхрүм итә, әммә уны тыңлаһам, транс хәленә ингән кеүекмен. Бер нәмә лә тоймайһың, бер ни ҙә кәрәкмәй...

**АЙРАТ, табип:**

- Әлбиттә, стресс кисергән мәлдәр булды - тормош бит. Әммә бер ҡасан да үҙ-үҙемә бикләнеп, юғалып ҡалманым. Дуҫтарым менән йышыраҡ аралашырға, саф һауала йөрөргә, күберәк йәшелсә-емеш ашарға тырыштым. Һәм, иң мөһиме, күңел тыныслығын һаҡланым. Табип булараҡ, ошоларҙың барыһын да кешеләргә тәҡдим итер инем. Йәнә күңел болоҡһоуын... мөхәббәт тарата. Икенсе енес менән аралашыу йәшәүгә йән өрә. Тереклектең гармонияһы ла ҡатын-ҡыҙ һәм ир затының һөйөүенән тыуа бит. Иң мөһиме - битарафлыҡ хисен еңергә. Быныһын инде мин кеше булараҡ әйтәм.

**АЙНАЗА, һатыусы:**

- Яңы ҡалаға күсеп килгәс, эш, йәшәү урыны менән бәйле ҡыйынлыҡтар кисерҙем. Шунда тәрән депрессияның ни икәнлеген тәүгә белдем дә инде. Бер кем менән дә һөйләшкем килмәй, кәйефем юҡ, етмәһә, тышҡа сыҡһам, аяҡтарым үҙенән-үҙе аҙыҡ-түлек магазинына тарта. Шулай итеп, бер йыл эсендә ете килоға арттым. Хәҙер яңыяңы үҙ ярҙарыма ҡайтып киләм, шикелле. Ҡыҙыҡлы эш таптым, әллә күпме һәйбәт таныштарым барлыҡҡа килде. Шул эш миңә яңы һулыш өрҙө лә инде.

**ФӘНҮР, тәфтишсе:**

- Һуңғы ваҡытта телефондан һөйләшә алмайым. Былай ҙа эшем тынғыһыҙ, өҫтәүенә, ҙур мегаполис шарттарында йәшәйем. Өйгә бар нәмәнән - кешеләрҙән, машиналар ағымынан, светофорҙарҙан, ялтйолт иткән магазин уттарынан күңелем биҙеп, ялҡып ҡайтам. Саҡ ҡына тынысланып, ял итеп алайым тиһәм, кеҫә телефоны яңғырай башлай. Уны һүндереп, ситкә тығып ҡуйһам, ябай телефон шылтырарға тотона: һин ҡайҙа, ниңә телефоның һүнгән, берәй нәмә булдымы әллә, һ.б. Хәҙер кешене бөтә ерҙән дә эҙләп табып була. Шул йәһәттән бөгөн кеше үҙен төрлө кәрәкмәгән һөйләшеүҙәрҙән, аралашыуҙан һаҡлап ҡала алмай. Кешенең күңел биләмәһенә һорауһыҙ-ниһеҙ үтеп инеү бер ни тормай хәҙер. Ана шул стресс кисереүгә килтермәйме ни? Заман, тормош үҙгәрҙе, ә кеше - юҡ. Кеше тәбиғәте ундай көсөргәнешкә түҙә алмай. Нисек был хәлдән ҡотолорға - риторик характерҙағы һорау...

Ләйсән МАРАҠАНОВА
әҙерләне.

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

## Үткән менән бөгөнгөнө...
### хәтер бәйләй

**Хәтер - йәшәлгән ғүмер сағылышы ул. Беҙ хәтер ярҙамында үткән көндәр менән бөгөнгөнө, киләсәкте бәйләй алабыҙ. Хәтер ептәре киләсәк һәм үткәндәрҙе ялғай алмай, өҙөләр сиккә етһә, бөтә йәшәлгәнкисерелгәндәр юҡҡа сыға... Был ауырыу тәү сиратта өлкәндәр өсөн айырыуса ҡурҡыныс тыуҙыра.**

Ни өсөн хәтер юғала? Белгестәр был сир түбәндәге сәбәптәр ар-ҡаһында үҫеүә, тип иҫәпләй:

1. Баш мейеһенең ҡан тамырҙары юлы ябыла һәм мейегә ҡан тейешенсә кимәлдә барып етмәй. Һәҙемтәлә, хәтер ҡаҡшай.

2. Альцгеймер ауырыуы йәки өлкән йәштәгеләрҙең аҡыл көсһеҙлеге: нейрондар араһында бәйләнештең насарайыуы мейе күҙәнәктәренең яйлап үлеүенә килтерә. Был хәл ретроградлы амнезия ауырыуын тыуҙырыуы мөмкин.

3. Мейе һелкенгән осракта ла хәтер юғалыуы мөмкин. Йыш ҡына башты төкөтөү хәтер юғалтыу ауырыуын көсәйтә генә.

4. Һәр ваҡыт стресс хәлендә йәшәү ҙә хәтерҙе
ярайһы уҡ
н ы ҡ ҡаҡшата: мейе организмды һаҡлау маҡсатында ҡайһы бер мәғлүмәттәрҙе "юҡҡа сығара".

5. Химик матдәләр менән ағыуланыу, атап әйткәндә, мәҫәлән, марганец һәм уның тоҙҙары менән, ваҡытлыса хәтер юғалтыуға килтереүе мөмкин.

6. Бөтә психик ауырыуҙар ҙа, мейенең биохимик үҙгәрештәре менән бәйле булғанлыҡтан, хәтер ҡаҡшауына килтерә.

7. Хәтер туранан-тура йоҡо менән бәйле. Әгәр ҙә кеше етерлек кимәлдә йоҡламаһа, ул ябай ғына мәғлүмәтте лә иҫләй алмай аҙаплана.

8. Ҡайһы бер киҙеү вирусы штаммдары инфекцияһы хәтерләү һәләтен юҡҡа сығара ала.

9. Балаларҙа һәм студенттарҙа хәтер ҡаҡшау артыҡ күп уҡыуҙан һәм мейе көсөргәнешенән тыуа.

**Ғалимдар фекеренсә, кеше күп уйлауҙан түгел, эште теүәл үтәйем тип, көсөргәнеүҙән арый. Шуға күрә көсөргәнештән ҡотолмай тороп, хәтерҙе нығытыу өсөн ниндәйҙер дарыуҙар эсеү, күнегеүҙәр һәү һөҙөмтәһеҙ буласаҡ.**

✓ ***"Яңынан биш йылдан кем булырға теләйем?", "Яңынан биш йылдан нимә эшләйәсәкмен?" "Яңынан биш йылдан нимәләргә эйә булырмын?" тип яҙып ҡуям һәм ошо һорауҙарымды ҡуйған маҡсаттарым менән сағыштырып барам.***



*ДОНЪЯ – ҠУЛАСА*

# АБЫНЫУЫ ЕҢЕЛ...

## төҙәтеүе ауыр

**Һуңғы ваҡытта йышайып киткән көнкүреш енәйәттәренең сәбәбен эшһеҙлек, аҡсаһыҙлыҡҡа һылтарға күнектек. Әммә был аҡланыуҙың бер сараһы ғына, күрәһең. Көн һайын иртән бер хәбәр ишетәһең: кемдеңдер ишек алдынан кистән йыуып эленгән әйберҙәрен, икенсенең санаһын, арбаһын, өсөнсөнөң бер нисә тоҡ бойҙайын, сүкешен, ҡыпһыуырын, көрәген алып киткәндәр. Ауылда бер ни йәшереп булмай. Был урлыҡ кем тарафынан ҡылынғанын да белеп тора халыҡ, әммә... милицияға хәбәр итергә ашыҡмай. Кемдер ҡағыҙ волокитаһына сумырға, кемдер судлашып йөрөргә теләмәй. Шул уҡ ваҡытта бурҙарға йәне көйгән, уларға ниндәйҙер сара күрергә маташҡан кешенең дә әллә ниндәй хәлгә ҡалыуы ихтимал бит...**

Һөйөклө ҡатыны, яңы тәтелдәй башлаған улын ҡалдырып, Альфред өләсәһенә ярҙам итергә юллана. Уны эргәһенә йәшәргә алырға теләп күпме тапҡыр мөрәжәғәт итһә лә, ҡарт әбей ризалашмай. "Һеҙҙе борсоп, бәйнәт булғым килмәй. Унан сит ерҙә нисек йәшәрмен? Бында үҙ йортом, үҙ баҡсам, тауыҡтарым", - тип ҡырталашты өләсәһе.

Баҡсаны иҫкә төшөрөү менән Альфредтың йөҙө боҙолдо, асыуы ҡабарҙы. Ни тиклем тырышһа ла, өләсәһе янына йыш ҡайтып йөрөй алмай. Оло кеше түҙемһеҙ була бит, ул ҡайтҡансы картуф ултыртам, йәки икенсе эш эшләйем тип аҙаплана. Шуға күрә алданып та бөтә, бахырҡай. Эсергә яратҡан Рәмил: "Картуфыңды үҙем ултыртам, инәй", - тигәс, ышанған. Уныһы әшнәләре менән килеп, картуф орлоғо алып, баҡсаға сығып киткән. Өләсәһе һуңынан өҫтәл әҙерләп, көмөшкә һатып алып быларҙы һыйлаған. Етмәһә, рәхмәттәрен уҡып, бәхеттәр теләп тороп ҡалған. Тик бар кешеләрҙең картуфы күтәрелеп, өләсәһенең баҡсаһында бер ни үҫмәгәс, Альфред шикләнә башлай. Өләсәһенән барыһын да һөйләткәс, Рәмилгә йүнәлә. Уныһы: "Һин ҡарамаған өләсәңде мин ҡараған өсөн рәхмәт әйт әле тәүҙә!" - тип ҡысҡыра башлай.

Альфред һуңынан барыһын да ишетә. Баҡһаң, Рәмил эсергә яратҡан әшнәләре менән өләсәһен алдаған икән. Картуф орлоғон сығарып, көмөшкәгә алыштырғандар, етмәһә, әбей әҙерләгән өҫтәл артына инеп һыйланғандар. Унан тағы эсергә эҙләп сығып киткәндәр. Һуңынан бер ҡатлы әбейҙе төп башына ултыртыуҙары тураһында маҡтанып һөйләп йөрөгәндәр. Өләсәһе пенсия алған һайын килеп, ун һумлап булһа ла аҡса теләнселәп алып сығып киткән Рәмилде хәтеренә төшөрөп, Альфредтың асыуы ҡабарҙы. Ә ишек алдынан урланған ярылған утын, һыу флягаһы, арбаһы... Участка милиционерына әйтергә кәрәк, тиһә, өләсәһе: "Ярай, ул да әҙәм балаһы бит. Аңлар. Ас йөрөйҙөр", - ти ҙә ҡуя. Хәйер милиция ла был ир затының күптән эшләмәһә лә, ниндәй аҡсаға эсеүе тураһында белә инде.

Ә ни эшләргә? Бөтөп барған ауылда тик ҡарт-ҡоро һәм уларҙың елкәһендә ултырған эскеселәр генә тороп ҡалды. Йәштәр ҡайтмай. Берәй яңы ғаилә барлыҡҡа килеү менән ата-әсә уларҙы тиҙерәк ситкә сығарып ебәрә. Сөнки тиҙ арала йә йорт хужаһы, йә хужабикәһе эскелеккә һабыша. Ә урам буйлап күпме ир һәм ҡатын бергәләшеп эсеп йөрөй. Альфред үҙе лә ҡасандыр йыш "төшөрә" торғайны бит. Чечен ғәрәсәтен күреп ҡайтҡан егет тыныс тормошта үҙенә урын таба алмай интекте. Өләсәһенең уны өҙөлөп яратыуы, матур һүҙҙәр менән йыуатыуы ғына упҡындан алып ҡалды. Унан һөйөклө кәләше менән танышыу, сабыйының тәүге ауаҙын ишетеү - барыһы ла тормоштоң йәмен табырға, киләсәккә өмөт менән ҡарарға ярҙам итте. Чечен һуғышы тураһында кинофильмдарҙы, тапшырыуҙарҙы ла ҡарауҙан баш тартты. Әкренләп һуғыш тауышы, үлемесле яраланған иптәштәренең ыңғырашыуы яман төш кеүек кенә булып ҡалды. Шулай ҙа бер ҡайҙа ла эшләмәй, башҡаларҙың елеген һурған әтрәгәләмде күрһә, ҡулында автоматы булмағанға үкенеү тойғолары ла кисергәне булды. Бигерәк тә ауыл буйлап ас-яланғас йөрөгән балаларҙы күрһә, уларҙың ата-әсәһен алама, ҡыйшайған өйҙәре менән бергә шартлатырға әҙер ине.

Бына өләсәһенең зәңгәр төҫкә буялған бейек күтәрмәһе. Хәҙер йәш ҡыҙҙарҙай йүгереп килеп тә сығыр әле. Өләсәһенең болоҡһоу йөҙөн күреп, шунда уҡ ниҙер булғанын аңланы. Аҡыллы әбей сәй эсеп алғас, әкрен генә һүҙ башланы. "Улым, ишек алдындағы һыу багы юғалды. Ҡалған юғалған әйберҙәр тураһында иҫкә лә алғым килмәй. Был һыу багын атайыңдың төҫө итеп һаҡлай инем. Ул эшләп биргәйне... "

Быны ишеткән Альфредтың күҙ алдары ҡараңғыланды, асыуынан йөрәге күкрәгенә һыймай, дарҫлап тибә башланы. Белә бит кемдең эше икәнлеген, белә! "Улым, ҡыҙма! Мин дә беләм кем урлағанын... Рәмил менән ипләп кенә һөйләшеп ҡарағайнһым... Ир кеше һөйләшһә, яҡшыраҡ булыр ине, тием дә..." - тине өләсәһе. Оло кешенең бөтә нәмәне әйтеп бөтөрмәүен яҡшы аңланы Альфред. Урамға сығып киткәнен һиҙмәй ҙә ҡалды. Тәүҙә юлда бер танышын осратты. Уныһы йортона саҡырҙы. Күптән көмөшкә эсмәгән Альфредтың башы әйләнде, бар мәшәҡәттәре онотолғандай булды. Танышы Рәмилдең уның да әйберҙәрен урлауын белдерҙе. Быны ишеткән Альфред ишекте тибеп асып, күптән күрә алмаған кешеһен эҙләргә йүгерҙе. Уныһы ҡаршыһына осраны ла ҡуйҙы. Альфред Рәмилде осора һуҡты. Унан елкәһенә тибеп ебәрҙе. Артынан йүгереп килгән танышы уны саҡ айырып алды.

Артабан ул ни булғанын хәтерләмәй. "Өләсәйемдең йәшле күҙҙәрен күреп, "Барыһына ла мин ғәйепле" - тип һыҡтауын ишетеп, аңыма килдем". Күрәһең, алған яра ла ҡуҙғалған булғандыр, аңым томаланған",- ти ул.

Рәмил ошо көндән һуң ныҡлап ауырып китә. Ул элегерәк тә туҡмалып, башын яралаған булған икән. Баш ауыртыуына сыҙай алмайынса, интегеп, ыҙаланып, бер аҙнанан вафат була. Уның туғандары барыһында ла Альфредты ғәйепләй, судҡа бирә. Альфред ҡатынын, өләсәһен оло ҡайғыға һалып, ҡулға алына. Суд-медицина экспертизаһы, ысынлап та, яраның үлемгә килтереүе ихтимал булыуын белдерә.

Суд бик шау-шыулы үтте. Сөнки Рәмил һәләк булһа ла, барыһы ла Альфредтың ғәйепле булмауын таный. Шулай ҙа һәр кемдең закон алдында тиң булыуын онотторға ярамай. Судья Альфредтың эшендә тик ыңғай яҡтан ғына билдәләнеүе, бәләкәй балаһы булыуы, Чечен ғәрәсәтен үтеүен иҫәпкә алып, шартлы хөкөм сығарҙы.

Суд залынан иреккә сығарылған был кешенең хистойғоларын ситлектә ултырып сыҡҡан кеше генә аңлар, моғайын. Әммә уның уйсан ҡарашы, ҡайҙалыр төбәп әйткән һүҙҙәре мәңгелеккә йөрәккә уйылып ҡалды. "Һуғышта барыһы ла асыҡ: йә дошманың - һине, йә һин уны үлтерәһең. Ә бында... Был гонаһымды бер ҡасан да юя алмам кеүек..."

**Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА.**
Баймаҡ районы.

*АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО*

## Ҡала мәҙәктәре

### ҮҘЕҢ УРОДИНА...

Элек Өфөнөң Ленин урамынан трамвай йөрөй торғайны. Водителдәрҙең үтенесе буйынса "Родина" кинотеатры туҡталышы бөтөрөлә. Ни өсөн тигәндә, пассажирҙар төшөргә әҙерләнгәндә водитель: "У кинотеатра выходите?" тип һорайһы урынға: "У Родины выходите?" тип һорай һәм был "уродины" һүҙе кеүек ишетелгәнгә пассажирҙарҙың ҡайһы берҙәре: "Һин үҙең урод, иҫәүән", тип, вагон тултырып шаулашып, ирешә башлар булған икән...

### ТАКОЙ ПЮРЕ НЕ НАДО

Берәү ҡала баҙарына килеп, картуфын һатып бөткәс, бер кафеға инеп тамаҡ ялғарға булған. Менюҙағы аш-һыуҙарҙың исемлегендә пюре ғына арзан булғас, официантка ике тәрилкә пюре, икмәк, сәй килтерергә ҡушҡан. Тегеһе ике тәрилкә пюре, йәғни иҙелгән картуф бутҡаһы килтергәс, ауылда картуф ашап бүккән ир кафены яңғыратып: "Мне не надо такой пюре. Такой пюре у меня дома полный подпол", тип ҡысҡырып ебәргән...

### ЫСЫН КЕШЕ КЕҮЕК БИТ ӘЙ...

Бер ир ҡалаға килеп, йомошон йомошлап бөткәс, ҡатынының, матур кофта алып ҡайт, тигән үтенесен иҫенә төшөрөп, универмагҡа ингән. Матур кейенгән бер егеттән: "Ҡатын-ҡыҙҙар кофтаһы нисәнсе ҡатта һатыла?", - тип һораһа, тегеһе бер нөктәгә текәлгән килеш тик тора, ти. Һаңғырауҙыр, тип һорауын ҡысҡырып ҡабатлаған. Быны ишеткән бер ҡатын: "Ул бит манекен, ә кофта бына ошонда һатыла", тип, уны ҡатын-ҡыҙҙар кейеме бүлегенә алып килеп, кофта һайлашырға ярҙам иткән. Ир күҙебашы буялған ҙур күҙле кассир ҡыҙ эргәһенә килеп баҫҡан һәм уның гел бер үк хәрәкәттәр менән шалтыр-шолтор аппаратҡа баҫҡылап, һатып алыусыларҙың аҡсаһын касса ҡумтаһына һала барыуын күҙәтеп торған. Шунан: "Манекен булһа ла, күҙ ҡарашы тере кешенеке кеүек бит әле ул", тип кассир ҡыҙҙың алһыу битенән йомшаҡ ҡына итеп һыйпап алайым тиһә, "манекен" урынынан ырғып торған да: "Что за наглость?", тип, бының битенә ҡундырған.

**Айгөл АХУНОВА.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# Һынауҙар булып тора

**Ҡарар ҡабул иткәндә кәрәкле һәләттәреңде аҡрынлап камиллаштыра башлау мөһим. Уның өсөн үҙеңде шулай тип көйлә:**

Мин ниҙе булһа ла тиҙ генә хәл итергә өйрәнә башлайым. Тиҙ генә ҡарар ҡылған һайын көслөрәк була барған "хәл иткес мускул"ым бар, тип күҙ алдына килтерәм. Ҡайһы берәүҙәр, ашханаға ингәс, 15 минут буйы нимә ашарға тип уйлана һәм ниһәйәт бер тәрилкә спагетти ала. Ә мин нимәләр ашарға кәрәклеген 30 секунд эсендә хәл итәм. Ғөмүмән, бөгөндән башлап бөтөн ваҡ-төйәк нәмәләрҙе 30 секунд эсендә хәл итә башлайым.

Теләһә ҡайһы нәмәне хәл итер алдынан үҙ-үҙемә: "Бының эҙемтәләре нисек булыр?", "Үҙем һәм яҡындарым бәхетле булырмы?" тигән һорауҙы ҡуям. Шул рәүешле үҙемә ни кәрәклеген аныҡ аңларға өйрәнәм.

"Яңынан биш йылдан кем булырға теләйем?", "Яңынан биш йылдан нимә эшләйәсәкмен?" "Яңынан биш йылдан нимәләргә эйә булырмын?" тип яҙып ҡуям һәм ошо һорауҙарымды ҡуйған маҡсаттарым менән сағыштырып барам. Шулай иткәндә, хыялыңды тормошҡа ашырыу еңелерәк була.

Әгәр алдымдағы ауыр мәсьәләне сисеүҙе оҙаҡҡа һуҙырға тура килһә, уның төрлө варианттарын яҙам һәм уларҙы тәжрибәле кешеләр менән уртаҡлашырға кәрәк түгелме, тип уйлайым. Иң мөһиме, ни тиклем генә ауыр мәсьәлә булмаһын, уны мотлаҡ билдәле бер ваҡыт эсендә хәл итәсәгемде аныҡ беләм.

Һинд тарихы буйынса, ерҙә тормош булдырыу өсөн Алла тәүҙә ҡабырсаҡты диңгеҙ төбөнә һалған. Ваҡыты-ваҡыты менән эсенә һыу уртлап, бер аҙҙан кире сығарыу менән мәшғүл булған ҡабырсаҡтың тормошонда бер ҡыҙыҡ та булмаған.

Бер аҙҙан Алла бөркөттө барлыҡҡа килтергән һәм уға бөтөн ер шарын иңләп осоп йөрөргә азатлыҡ биргән. Бөркөт өсөн күктә бер ниндәй ҙә сик булмаған, ләкин был азатлыҡ уға ауырға төшкән. Ни өсөн тигәндә, ерҙән ашар ризыҡ эҙләп, көнө буйы бейектә осоу бөркөттө йонсотҡан. Ә себештәрен ашатыу өсөн аҙыҡ эҙләп осоу тағы ла ауырыраҡ булған. Шулай булһа ла бөркөт быңдай тормошона риза булған.

Аҙаҡ Алла Кешене барлыҡҡа килтергән һәм, ҡабырсаҡ менән бөркөткә күрһәтеп, уның ниндәй тормош алып барырға теләүен һораған.

Ҡабырсаҡ үҙенең мөмкинлектәрен киңәйтеүҙе ҡулынан ысҡындырыусы кешене символлаштыра. Ундай кеше ғүмере буйына бер үк эш менән генә мәшғүл була. Бөркөт тормошон һайлаусылар ҙа үҙҙәренә еңел булмаған юлды һайлай. Ләкин улар нимәне булһа ла өйрәнеүҙәренә, рухи үҫеүенә, тәжрибә туплауына ҡыуанырға тейеш, сөнки ундайҙарҙың күберәк белгән һайын аң кимәлдәре юғарыраҡ күтәрелә бара һәм рухтары ла азат була. Ә тормош юлында осраған ауырлыҡтарҙы сираттағы бер һынау тип кенә ҡарарға кәрәк.

**Бодо ШЕФЕР.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ИМАН НУРЫ БАЛҠЫП КИТТЕ

## Әбйәлил һылыуҙары иман өлгөһө күрһәтә

**"Әбйәлил йәштәре" ойошмаһы Башҡортостанда йәштәр менән эшләүсе иң әүҙем берлектәрҙән иҫәпләнә. Ойоштороусылар йәштәрҙе берләштереү, таныштырыу, өйләндереү, хәмерһеҙ ҙә күңел асып булғанлығын аңлатыу кеүек эштәр алып бара, бергәләп күңел асыуҙар, спорт саралары ойоштора. Сираттағы сара - "Камил инсан" һылыуҡайҙар бәйгеһе күптән түгел булып үтте. Бәйгенең төп маҡсаты - башҡорт һылыуҙары "90-60-90" стандартлы мода ҡурсағы түгел, ә милләтебеҙҙең булаcаҡ әсәләре, инәйөләсәйҙәре, киләсәк быуынды, йәмғиәтте тәрбиәләүсе икәнлеген раҫлау. Өс сәғәткә һуҙылған көсөргәнешле әхлаҡ бәйгеһе һуңында еңеүселәр ҙә асыҡланды: Илнара Мөхәмәтдинова - "Һомғоллоҡ", Гөлгөнә Вәлиева - "Нәзәкәтлек", Гүзәлиә Хилалова - "Ҡулдарынан бал тама", Ләйсән Хәйруллина "Зауыҡлылыҡ" номинацияларында еңеүсе тип билдәләнһә, Әлфиә Сабитова III урынға, Дилбәр Ғәбитова II урынға сыҡты. "Камил инсан" исеменә һәм I урынға Гөлназ Ғиззәтуллина лайыҡ булды. Саранан һуң бер нисә кешенең фекерҙәрен тыңланыҡ.**



**Дилбәр ҒӘБИТОВА, II урын яулаусы:**

- Ысынында мине берҙәм булыуыбыҙ хайран ҡалдырҙы. Сара һуңында урындарҙы билдәләй башлағас ҡына беҙ, ҡыҙҙар, үҙ-ара ярышҡан икәнебеҙҙе аңланыҡ. Сара башҡорт йәштәрен тағы ла нығыраҡ берләштерҙе. Сөнки тамашаны Бөрйән, Учалы, Архангел, Баймаҡ йәштәре лидерҙары ла ҡараны.

Маҡсат бит изге: мосолман кейеме кейгән, әхлаҡле ҡыҙҙарға йәмғиәттең, бигерәк тә йәштәрҙең иғтибарын йәлеп итеү. Сөнки тәү ҡарамаҡҡа этник составы яғынан мосолман республикаһы булған Башҡортостаныбыҙҙа ла яулыҡлы ҡыҙҙарға сәйер ҡараш хөкөм һөрә. Йәнәһе, замандан артта ҡалған әҙәм йөрөй яныбыҙҙа. Әммә пепси, гламур, аҙғынлыҡ, шәрәлек, рухи ярлылыҡ заманында тап ошондай ҡыҙҙар ысын мәғәнәһендә азат һәм саф икәнлеген, беҙҙең киләсәгебеҙҙе, рухыбыҙҙы һаҡлай һәм яҡлай икәнен раҫлар ваҡыт етте. Унан һуң, ошондай ысын ҡатын-ҡыҙ исемен йөрөткәндәрҙең ҡурсалауға мохтаж икәнен дә онотмайыҡ. Мәҫәлән, әлеге сараны күп йәштәр ыңғай ҡабул итте, ләкин тамаша залындағы 300-ҙән артыҡ кеше араһында бәйгенең маҡсатын аңламаусылар ҙа бар ине, сәхнәлә беҙ уларҙың кире энергия көсөнөң ауырлығын һиҙҙек.

**Айгиз ҒАБДУЛЛИН, жюри ағзаһы:**

- Мин үҙем ун йылға яҡын Төркиәлә уҡыған кеше булараҡ, шуны әйтә алам: был, ысынлап та, әхлаҡ талаптарына яуап биргән бәйге булды. Тән матурлығын түгел, ә йән-йөрәк матурлығын, әхлаҡте пропагандалаусы бынамын тигән сара өсөн ҡыуанып ултырҙым. Бөгөн хатта Төркиәлә бындай ярыштар юҡ. Әлбиттә, сит илдәрҙән килгән туристар, ҡатын-ҡыҙҙар өсөн махсус рәүештә мосолман ҡатын-ҡыҙ кейемен күрһәтеүҙәр ойошторола унда. Ут күршебеҙ Татарстанда былтыр "Иң сибәр мосолман ҡыҙы" тигән конкурс уҙғарылғайны. Мәскәү, Рәсәй кимәлендә лә хупланды был идея, яҡын арала "Мосолман ҡатын-ҡыҙҙары модаһы" бәйгеһе ойошторорға иҫәп тоталар. Белеүемсә, был эштә билдәле дизайнер Вячеслав Зайцев та ярҙам итергә теләк белдергән.

Бығаса Башҡортостанда мосолман, башҡорт ҡыҙҙары араһында бындай форматтағы бәйге булғаны юҡ ине. Ләкин шуны аңлау мөһим: әхлаҡте, әҙәплелекте, иманлылыҡты тап ошондай "светский" йәштәрҙе йәлеп итерлек саралар ярҙамында рекламалау, аңлатыу - заман талабы ул.

Сараға килгәндә, икенсе йылдан башлап "Камил инсан"ды, географияһын киңәйтеп, әйтәйек, башҡа район ҡыҙҙарын да йәлеп итеп, талаптарҙы ҡатыраҡ ҡуйып, жюриға һәм тамаша ҡылырға тик ҡатын-ҡыҙҙарҙы ғына саҡырып ойошторғанда яңы ынтылыш үҙен аҡлаясаҡ һәм популярға әйләнеп китәсәк. Йәғни, ҡатнашыусыларҙы ир-егеттәрҙең боҙоҡ уйҙарынан, кире энергияһынан ҡурсалау кәрәк. Бөгөн тышҡы матурлығын һис йәлләмәй бар ғәмгә асып күрһәтеп йөрөгән ҡатын-ҡыҙҙы күргән һайын, шундай уйға ҡалам: уның эске матурлығы менән эштәр нисек икән, йән сафлығы, әхлаҡ, иман тигәнде беләме икән?

**Азалия ҒӘЛЛӘМОВА, ойоштороусы:**

- Рәсәй Эске эштәре министрлығы вәкилдәре белдереүенсә, бөгөн Рәсәйҙә 14 йәштән алып һәр һигеҙенсе ҡыҙ рәсми рәүештә фәхишәлек менән мәшғүл. "Мисс Европа", "Мисс Евразия", "Мисс Россия" кеүек конкурстарҙа ҡатнашҡан 15 ҡыҙ ошо бер нисә йыл эсендә генә был яҡты донъя менән хушлашҡан. Кемдер үҙ-үҙенә ҡул һала, кемдеңдер ғүмерен күрә алмаусылары ҡыя, һ.б. Йәғни "90-60-90" стандарттары артынан ҡыуыу, күңел-йән бушлығы, ялған идеалдар булаcаҡ әсәләрҙе һындыра ла.

Беҙ ундай ялған ҡиммәттәрҙән ҡасып, үҙебеҙҙең яҡтылыҡты тоҡандырырға ниәт ҡылдыҡ. Ҡапыл башыбыҙға "Камил инсан" конкурсы идеяһы килде. Бығаса беҙ дүрт йыл дауамында "Яҡты-күл һыуһылыуы" менән "Ҡараташ бөркөтө" конкурстары уҙғара инек. Быйыл яңы кимәлгә сығыу өсөн тапалмаған идея эҙләнек һәм ошондай форматтағы сараға ҡарар ҡылдыҡ. Беҙ бар йәһәттән дә - йылмайыуы, йәне, үҙ-үҙен тотошо, кейеме буйынса ла матур ҡыҙҙы һайларға тейеш инек. Финалистарға ҡарағыҙ: улар шул тиклем саф, ихлас, һылыу, уңғандар, әхлаҡлеләр. Барыһы ла өләсәйәсәйҙәренән килгән иман менән тирәйүнде нурландыра. Әхлаҡте пропагандалау өсөн ҡулайлы ысул был.




Яҡшылыҡты аҡыллы, әхлаҡле кеше шунда уҡ аңлай. Сарабыҙға бағыусылар табылыуы ошоға ишара. Мосолман ҡатын-ҡыҙҙары кейеме, дини атрибутика, китаптар, хәләл аҙыҡ-түлек менән һатыу иткән "Ясмин" магазиндары селтәре беҙҙең төп бағыусыбыҙ булды. "Камил инсан"дың иң сағыу мәле йәш дизайнер Римма Байтимерованың мосолман ҡыҙҙары өсөн теккән кейем коллекцияһы күрһәтелеүе булғандыр. Башҡорт ҡыҙҙарының сәхнәгә саф мосолманса кейенеп сығыуы, сүрәләр уҡыуы күптәрҙе уйға һалғандыр. Ҡатын-ҡыҙҙар өсөн мосолман кейемен тегеүсе йәш дизайнер билдәләүенсә, "Халыҡ күрергә тейеш: күп осраҡта әхлаҡле кейенгән ҡыҙҙар мини-итәктәр менән һығылмалы джинси салбарҙарҙа йөрөүселәргә ҡарағанда күпкә һөйкөмлөрәк һәм сағыураҡ. Бындай стилдәге кейемдәр ысынлап та ҙур ихтыяж тыуҙыра башланы".

**Марат АБДУЛЛИН яҙып алды.**

АҠЫЛ – ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# Насар ҡылыҡ...

## үҙе яза

Талант ҡиммәтле таш кеүек: уны шымартыу өсөн ни тиклем күберәк көс һалһаң, ул шул тиклем матурыраҡ буласаҡ.
**(Ли Якокка).**

Пессимистың оптимистан айырмаһы бар, әлбиттә. Пессимист, ярты юл үткәндән һуң: "Барам, барам, әле тағы әллә күпме бараһы бар", - ти ҙә, хәлдән тайып йығыла. Ә оптимист үҙенә шулай ти: " Әй, шәпмен дә инде, күпме юл үткәнмен, тағы аҙ ғына үтәһе ҡалды!"
**(В. Леви).**

Башҡаларҙы ғәфү иткән һайын, көслө кеше тағы нығыраҡ көсәйә.
**(В. Терещенко).**

Маҡсатҡа ынтыл, ләкин бөгөнгө көн менән йәшә.
**(Тимо Санталайнен).**

Яҡшы етәкселек булған ерҙә насар мөнәсәбәттәр булмай.
**(Билдәһеҙ автор).**

Бәхетһеҙ, ҡыҙыу һәм асыулы ир - бәхетһеҙ осраҡ ҡорбаны. Әйткәндәй, бындай кеше күп ашарға һәм эсергә ярата.
**(Дейл Карнеги).**

Әгәр ҙә бер нәмәнән дә ҡурҡмаҫҡа теләйһең икән, донъяла бар нәмәнән ҡурҡырға мөмкин икәнде хәтереңә төшөр.
**(Сенека).**

Үҙ аҡылындағы һәр кем үҙенән яҡшыраҡтар эргәһендә булырға тырышыр.
**(Платон).**

Яҡшы етәкселек итергә өйөңдә өйрән.
**(Хилон, боронғо аҡыл эйәһе).**

Дуҫтарың араһындағы түгел, дошмандарың араһындағы бәхәсте хәл ит. Дуҫтарың араһына ҡыҫылһаң, бер дуҫың дошманға әйләнәсәк. Ә дошмандарыңдың бәхәсенә ҡыҫылһаң, бер дошманың дуҫыңа әйләнер.
**(Биант, боронғо аҡыл эйәһе).**

"Балеринаны күтәреү ауырмы?" тигән һорауға танылған бейеүсе Марис Лиепа "Ауырлыҡ ауыр түгел, ә холоҡ ауыр" тип яуап биргән.
**(Балтасар Грациан).**

Яҡтылыҡ биргәне өсөн Ялҡынға рәхмәт уҡығанда күләгәлә баҫып тороусы Шәмде лә онотма.
**(Рабиндранат Тагор).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер итексе танылған рәссам Апеллесҡа уның картинаһында итек һүрәтенең дөрөҫ эшләнмәүе тураһында әйтә. Апеллес уның был тәнҡитен ҡабул итә. Ләкин итексе, ҙур белгес һымаҡ ҡыланып, рәссамдың бөтөн картинаһын тәнҡитләй башлағас, Апеллес түҙмәй: "Әй, итексе, итектең кимәлен онотма", - тип уны туҡтата".**

**«Киске Өфө» гәзитен ойоштороусы:** Өфө ҡала округы Советы һәм хакимиәте «Вечерняя Уфа» гәзите редакцияһы
**Баш мөхәррире:** Гөлфиә ЯНБАЕВА.
**Мөхәрририәт:** Вячеслав ГОЛОВ, Әхмәр ҮТӘБАЙ, Радик ӨМӨТҠУЖИН, Рәлиә БИКТИМЕРОВА

**Телефондар: 253-25-44; 252-39-99.**
E-mail: kiskeufa@ufacom.ru
«Киске Өфө»нөң индексы – 50665.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте, **253-25-44, 272-89-09, 273-35-92** телефондары буйынса, «Вечерняя Уфа», «Уфимская неделя» һәм «Киске Өфө» гәзиттәренә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә **253-25-44** телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

Гәзит РФ Матбуғат эштәре, телерадиотапшырыуҙар һәм киң информация саралары министрлығының Волга буйы төбәк-ара территориаль идаралығында теркәлде. Теркәү таныҡлығы №7 –1675.

**Беҙҙең адрес: 450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1.**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды, (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).
Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.
Тиражы - 6212
Заказ 1579